ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27-3 июнь - июль (һөтай - майай)

2020

№26 (912)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Гәзит уҡымай...**

дөм һуҡыр ҡалайыҡмы ни?



2

**"Ефремов синдромы" тигән...**

заман "уйындары"



3

**Тормош үҙгәрә, талаптар ҙа үҙгәрә,**

улар илебеҙҙең Төп Законында сағылыш таба



8-9

**Шәүрә Мортазина.**

Легендар атаһының лайыҡлы ҡыҙы



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мин диндәрҙе ҡапма-ҡаршы ҡуйырға, береһен икенсеһенән өҫтөн һанарға йыйынмайым. Кешелә әхлаҡ һәм иман тәрбиәләй икән, тимәк, уларҙың барыһының да маҡсаттары дөйөм алғанда изге һәм юғары. Дини фанатизм менән ағыуланыу, һуҡыр табыныуға тарыу һөҙөмтәһендә сикләнгән донъяла бикләнеп ҡалыу - былары инде рухи эҙләнеүҙәр юлында бер сиктән икенсе сиккә һуғылыуҙыр.***

**Раули БИКБАЕВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Коронавирус афәтенән сығып киләбеҙ шикелле инде, уның һабаҡтары нисек булыр, тип уйлайһығыҙ?

***Айбулат УРАЗБАХТИН, Сибай ҡалаһы:*** Йәмғиәт менән идара итеү көсәйә, хәҙер ҙә, артабан да идара итеүҙе нык ҡәтғиләштергән ҡанундар ҡабул ителәсәк. Күптәргә, әлбиттә, был оҡшамаясаҡ, сөнки демократияла - ирекле һәм иркен тормошта йәшәп өйрәнә башлағайныҡ бит инде. Ә ни өсөн ҡәтғи идара итеү кәрәк? Йәмғиәтте артабан үҫтереү, уны нығытыу өсөн. Мәҫәлән, бөгөн йәмғиәт күп осраҡта үҙен бала кеүек тота. Кемдер, юҡ, тип ҡаршы төшөр. Быны шулай икәнен коронавирус яҡшы күрһәтте лә инде. Өйҙән сыҡмаҫҡа, урамда йөрөмәҫкә, йөрөгән хәлдә лә битлектәр һәм бирсәткәләр кейергә, тигән мотлаҡ талаптарҙы күптәр үтәмәне һәм әле лә үтәмәй, үҙен "тыңлауһыҙ, үпкәсел" бала кеүек тота, хатта быны үҙе өсөн эшләнгәнен уйлап та ҡарамай. Ә бала тыңламай башлаһа, уҡытыусы йәки атай-әсәй был осраҡта нимә эшләй? Дөрөҫ, тәрбиәләүҙә ҡаты саралар ҡуллана. Был коронавирус артабанғы тәрбиә сараларының нindәй булырын күрһәтте.

***Айрат ҒӘЛИЕВ, Янғантау геопарҡы хеҙмәткәре:*** Үкенескә күрә, был вирус беренсеһе һәм һуңғыһы түгел шул. Беҙҙең ата-бабалар ниндәй генә ауырыуҙы еңмәгән: сәсәк, тиф, трахома һ.б. Улар менән сағыштырғанда, яңы коронавирус сире ул тиклем ҡурҡыныс та кеүек түгел. Бары тик уның тиҙ таралыуы һәм тәүге осорҙа нисек дауалау мөмкин икәнлеге билдәһеҙ булыуы ғына йәмғиәтте бер аҙ хафаға һалды. Минеңсә, тиҙ арала был сиргә ҡаршы вакцина табылыр, әммә ауырыу үҙ һабаған онотолмаҫлыҡ итеп аңлатты: һаулығыбыҙға ҙур иғтибар бирә башларбыҙ, кеше ғүмерен ҡәҙер итергә өйрәнербеҙ, тип ышанам. Хатта бик иғтибар итеп бармаһаҡ та, ябай ғына булған һәм һәр көн кемдер тылҡып тороуына ҡарамаҫтан башҡарылырға тейешле гигиена ҡағиҙәләре лә беренсе урынға сыҡты. Ата-әсәләр генә түгел, бик күптәр балаларҙы уҡытыу, уларға белем биреүҙең ниндәй ауыр хеҙмәт икәнен аңланы. Ә инде табиптарҙың эше тураһында әйтеп тә тораһы түгел, бөгөн уларҙы нисек кенә баһалаһаҡ та аҙ булыр кеүек. Хатта ошо осорҙа курьерҙар эшмәкәрлегенең дә ни тиклем хәүефле икәнен бер аҙ аңланыҡ, шикелле.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ҺӘЙКӘЛДӘР...

## терелергә кәрәк



**Хәтер һәм ҡайғы көнөндә Өфө тимер юл вокзалы майҙанында 1941 йылдың йәйендә фронтҡа киткән геройҙарға һәйкәл асылды.**

Республика Башлығы Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, һәйкәл ҡуйылған урын осраҡлы һайланмаған: "Бынан "Прощание славянки" маршы аҫтында йөҙ меңләгән яҡташыбыҙ - атайҙар, ирҙәр, улдар, ҡыҙҙар Бөйөк Еңеү менән иҫән-һау ҡайтыуҙарына эскерһеҙ ышанып фронтҡа киткән. Перронда башҡорт, рус, татар, сыуаш, мари һәм башҡа телдәрҙә йырҙар яңғыраған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, 322 мең яҡташыбыҙ яу яландарында мәңгелеккә ятып ҡалған. Әммә беҙҙең яугирҙарҙың батырлығы һәм ҡаһарманлығы дошманды еңгән. 1945 йылдың йәйендә тап ошо урынға, әлеге перронға, яугир-еңеүселәр менән эшелондар ҡайтҡан", - тине республика Башлығы.

Гранит-бронза скульптура композицияһы 1941 йылда фронтҡа оҙатыуҙарҙы сағылдырған бер ансамбль булып күҙ алдына баҫа. Мемориал туғыҙ һындан тора. Уларҙың бөтәһе лә төрлө милли кейем кейгән. Радий Хәбиров республика халҡының бындай һәйкәл булдырыуҙы күтәп һәм хуплап ҡаршы алыуын билдәләне. Хәҙер һәр кем объект эргәһендә туҡтап, геройҙарҙы иҫкә алыу мөмкинлегенә эйә. "Был һәйкәл китап буйынса түгел, ә ветерандар ярҙамында өйрәнгән тарих символы булыр, - тип иҫәпләй республика ветерандар советы рәйесе Валерий Шәрипов. - Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һәйкәлгә таш һалған ветерандар уны асыу көнөнә тиклем йәшәй алманы. Әммә беҙ уларҙы онотмаясаҡбыҙ". Проекттың художество идеяһы авторы - Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Андрей Назаров. Объектты авторҙар коллективы менән скульптор Вадим Кириллов тормошҡа ашырған.

12+

**✓ Бер күҙенә операция яһатҡан уҡытыусым һыңар күҙе менән гәзит уҡып ултыра! "Ныҡлап шәбәйгәнсе, уҡымай торһағыҙ ҙа була бит", - тигән иҫкәрмәмә: "Аһ, гәзит уҡымай, дөм һуҡыр булып ултырайыммы ни? " - тип яуапланы.**



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...



## Коронавирус афәтенән сығып киләбеҙ шикелле инде, уның һабаҡтары нисек булыр, тип уйлайһығыҙ?

(Башы 1-се биттә).

***Фатима ХӘЙРУЛЛИНА, Өфө ҡалаһы:*** Сирҙән сығып киләбеҙ тибеҙ ҙә, әммә хәүеф кәмемәй, шуға, унан ҡасан тулыһынса сығыуыбыҙ билдәһеҙ булып ҡаласаҡ әле. Сөнки ҡыҫҡырып әйтмәһәләр ҙә, хатта табиптар ҙа, барыбыҙ ҙа (йәки күпселек) ауырып бөтмәйенсә, был сиргә ҡарата иммунитет барлыҡҡа килеүе бик икеле, тиҙәр. Шуға иң беренсе һығымта - һаҡланғанды Хоҙай һаҡлай, тиһәк тә, тәү сиратта, үҙеңдең сәләмәтлегеңде үҙеңә һаҡлау. Сөнки күпме генә тылҡыуға ҡарамаҫтан, халыҡ һаман да битлекһеҙ, бирсәткәһеҙ йөрөй, был күренеш хатта етәкселәр араһында ла күҙәтелә. Ахырҙа халыҡ, үҙҙәре талаптарҙы үтәмәй икән, тимәк, вирус, ысынлап та юҡ, тигән фекергә килә. Юҡҡа ғына, әйткәнһең икән - үтә, юҡһа, ул алдашыу кеүек ҡабул ителә, тимәйҙәр.

Икенсе яҡтан, ҡурсаланыу ваҡыты үтте лә, вирусты еңдек, артабан элеккесә йәшәп алып китербеҙ тип тә уйларға ярамай. Тормош элеккесә булмаясаҡ: эшһеҙҙәр һаны артты, күп предприятиелар ябылды, эшҡыуарҙар ҙа еңел булмаған осор кисерә. Шуға, криминаль күренештәр күҙәтелмәҫ, тип тә әйтеп булмай. Ошо бер нисә айҙа халыҡҡа ярҙам итеүсе ирекмәндәр әүҙем эшләне, был бик сауаплы хеҙмәт. Әммә, кемгә нисектер, һуңғы ваҡытта йәмғиәттә агрессия артыуы ла күҙәтелгән кеүек.

***Дамир ХАНОВ, Өфө ҡалаһы:*** Мин нимәгә иғтибар иттем: ҡурсаланыу ваҡытында күберәген интернет селтәрҙәрендә, онлайн эшләргә, аралашырға тура килә. Хатта мәғариф системаһы ла йылды онлайн тамамланы. Һәм ошонда тағы бер проблема асыҡланды: баҡтиһәң, башҡорт теленең цифрлашыуы бик ныҡ артта ҡалған икән. Транспортта "йүгерек яҙыу"ҙа (бегущая строка) - русса мәғлүмәт, онлайн-банктар, Госуслуги һәм башҡа хеҙмәттәр бары тик рус телендә генә хеҙмәтләндерә. Заман талабына яуап биреп, власть үҙе халыҡты хеҙмәтләндереүҙе еңеләйләштереүҙе хәстәрләп, онлайн хеҙмәттәр булдыра икән, әгәр беҙ унан мәғлүмәтте үҙебеҙгә кәрәкле телдә алыуҙы йәки үҙебеҙҙең телдә мөрәжәғәт итеүҙе талап итмәһәк, бер көн килеп башҡорт теленең бөтөнләй кәрәге бөтөүе лә ихтимал. Шул хаҡта ла уйланһаҡ ине.

**Шәрифә САЛАУАТОВА яҙып алды.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ГӘЗИТ УҠЫМАЙ...

## дөм һуҡыр ҡалайыҡмы ни?



Ейәнсура районы Өмбәт ауылы ағинәйҙәре.

**Һуңғы көндәрҙә гәзит-журналдарға яҙылыуҙың һүлпән барыуы тураһында байтаҡ хат-хәбәр алдым. "Яҙылдыңмы?" - тип һорайҙар. Яҙылдым. Ғәҙәтемсә, тиһәм, алдармын: был ярты йыллыҡта быға тиклем алдырмай ҡалдырмаған, яратҡан баҫмаларым "Йәншишмә", "Йәшлек" гәзиттәрен, "Аманат", "Аҡбуҙат", "Ватандаш" журналдарын етемһерәттем...**

Гәзит-журнал уҡып барыу бәләкәйҙән ҡаныма һеңгән. Беҙ үҫкәндә атайым башҡорт телендәге бөтә баҫмаларға ла даими яҙыла торғайны. Яҙылыу ғына ла түгел, беҙҙән һәр баҫманы төпләп барыуҙы талап итте. Журналдар тап китапханалағыса төпләнеп, өҫтәлдә ятыр, ә гәзиттәр стенала эленеп торор ине. Һәр баҫмаға тәғәйен ҡаҙаҡ ҡағылған, килгән бер һанды ҡулдан-ҡулға йөрөтөп, талаша-тартыша уҡып бөткәндән һуң, шул ҡаҙаҡтарға элә барабыҙ. Үҙенә күрә үҙенсәлекле келәм! Ул серле келәм әле һаман күҙ алдында... Килгән бер һанды уҡып барыу, мәғлүмәтле, йөкмәткеле мәҡәләләрҙе, оҫта яҙған журналистарҙың исем-шарифтәрен иҫтә ҡалдырып уҡыу - атайымдың ҡәтғи талабы. Уҡыйбыҙ, мәҡәләләр буйынса һорауҙарына яуап бирәбеҙ, үҙ фекеребеҙҙе әйтәбеҙ... Гәзит дәрес материалына ҡарағанда ҡыҙыҡыраҡ, күберәк белеү үҙебеҙгә лә ҡәшәй...

Эшләй башлағас, интернет-ресурстар булмаған осорҙа, был алымды үҙем дә ҡулландым. Гәзиттәрҙе икешәр дана алдырып, береһен класс-кабинетымда төпләй-туплай барҙым, икенсеһенең дәрес өсөн кәрәк материалдарын ҡырҡып алып, тематик папкаларымды тулыландырҙым. Интернат системаһында төштән һуң минең кабинетта дәрес әҙерләгән класс уларҙы уҡып рәхәтләнде, өйгә бирелгән эштәрҙе эшләгәндә, иншалар яҙғанда ҡулланды. Һуңғы йылдарҙа икешәр дана уҡ яҙылмаһам да, үҙем алдырған баҫмаларҙы, уҡығандан һуң, мәктәпкә ташыйым. Ҡаныма һеңгән гәзиттән арына алмайым. Элекке һымаҡ йыйылып ятып уҡыған уҡыусылар юҡ, шулай ҙа дәрестәрҙә яҙылғандан тыш белергә теләгәндәрҙең алдарына тиҙ генә гәзит-журналдар һалам... Һәр көндөң зауығына ҡарап: кемгә - "Йәншишмә", кемгә - "Аманат", кемгә - "Киске Өфө"... Уҡыусыларым да өйрәнеп бөткән, эштәрен алданыраҡ эшләп бөткәне: "Гәзит алып уҡып ултырһаң яраймы?" - тип һорай. Дәрестә уҡып бөтә алмағаны өйөнә алып ҡайтып китә. Форсаттан файҙаланып, мин: "Атай-әсәйеңә лә уҡыт, беҙ ҙә яҙылайыҡ әле, тип һора", - тием. Күп осраҡта яуап ыңғай түгел, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы. Ғаиләләге уҡыу мәҙәниәте - үҙе бер тәрбиә мәктәбе бит ул. Был мәктәп күп негатив күренештәрҙән ҡурсыр ине балаларыбыҙҙы. Шуны аңлап етмәй шул атай- әсәйҙәр...

Һәр йыл һайын "Тотош класс менән - "Йәншишмә"гә!" ("Аманат-ҡа!") кеүек акцияларға класс менән ҡушылыу өсөн дә бик күп көс сарыф итергә тура килә. Иң ҙур ҡаршылыҡ - "Аҡса юҡ", тигән яуап. "Барыбер уҡымай, телефондан айырып алып булмай", - тигәндәргә нисек тә аңлатырға тырышаһың: гәзит-журнал, китап уҡырға өйрәтеү - балаларҙы ваҡытлыса булһа ла интернеттан, компьютер-телефондарҙағы әүрәткес уйындарҙан һаҡлап алып ҡалыуҙың бер сараһы ла ул. Уҡырға ғәҙәтләндеңме, ул гәзиттән арыныуы ҡыйын...

Бөтә баҫмаларҙы ла уҡып өлгөрөү мөмкин түгел, әлбиттә. Шуға үҙем: "Әлдә генә хәҙер гәзиттәр аҙнаһына бер сыға әле", - тип ҡыуанам. Мәктәп йәшендә почтальон апайҙың ҡаршыһына "Башҡортостан пионеры" (хәҙерге "Йәншишмә") гәзитен алданыраҡ ҡулға эләктереү өсөн йүгерә инем, хәҙер аҙна аҙағын "Киске Өфө"нө уҡыр өсөн көтөп алам. Шатланып та, уфтанып та ҡулға алам "Киске Өфө"нө. Уфтандырғаны шул: атайым уҡырға өлгөрә алмай ҡалды был гәзитте... Иң тәүҙә "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһын уҡып сығам. Хәс тә ул булып, йәйлап, ҡабаланмай, һәр аҡылын һеңдереп кенә уҡыйым. "Шулай итеп, тағы бер аҡыл" тип ҡабатлайым үҙ-үҙемә: "Үҙеңә ҡәнәғәтләнеү биргән эште эшләйһең икән, тимәк, һин - азат" (Вольтерҙың һүҙҙәре. "Киске Өфө"лә уҡыным, һаман иҫләмәйем)... Ошо уҡ рубрикағы риүәйәттәрҙе, "Уйлыға - уй", "Уңыш ҡаҙан" рубрикаларындағы фекерҙәрҙе мотлаҡ рәүештә юғары класс уҡыусылары менән бүлешәм. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиадала ҡатнашҡан уҡыусыларыма "Йәншишмә", "Киске Өфө" гәзиттәренең береһенә йә "Шоңҡар" журналына яҙылыу мотлаҡ, тип өйрәтәм. "Башҡортостан уҡытыусыһы", "Ағиҙел", "Шоңҡар" журналдары - һөнәри баҫмаларым, өҫтәл китаптарым. Уларға яҙылмау гонаһ менән бер. "Башҡортостан ҡыҙы"н да яратып уҡыйым. Уны, ғәҙәттә, ауылға, әсәйемә яҙҙырам. Ҡартайырға ашыҡмаһын әле, үҙ ҡыҙҙары ҡайтҡансы, төҫлө, сағыу баҫманың зауыҡлы, "текә" ҡыҙҙары менән аралаша торһон, тием...

Шулай итеп, йәнә бер аҡыл: бынан байтаҡ йылдар элек йәйге отпуск ваҡытында тормош иптәшем, балаларым менән бергә күрше Һарғай ауылында йәшәгән уҡытыусым Зарипова Баныу Ғарип ҡыҙының хәлен белергә барҙыҡ. Барып инһәк, бер күҙенә операция яһатҡан уҡытыусым һыңар күҙе менән "Башҡортостан" гәзитен уҡып ултыра! "Ныҡлап шәбәйгәнсе, уҡымай торһағыҙ ҙа була бит инде", - тигән иҫкәрмәмә: "Аһ, гәзит уҡымай, дөм һуҡыр булып ултырайыммы ни? " - тип яуапланы. Ул ваҡытта уҡытыусым һикһәнен тултырғайны... Уҡытыусымдың һүҙҙәрен барыбыҙ өсөн дә аҡыл итеп ҡабатлайым: гәзит уҡымайынса, дөм һуҡыр ҡалайыҡмы ни?..

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**
**Ишембай ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓25 июнгә мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда 5 121 коронавирус инфекциялы сирле иҫәпләнә. Тәүлек эсендә улар 53-кә артҡан. 5 121 ауырыуҙың 2 643-ө һауыҡҡан. Вафат булғандар һаны үҙгәрмәгән һәм 18 кеше тәшкил итә. Башҡортостанда дауахананан тыш пневмония осраҡтары арта бара. Бөтәһе лә коронавирусҡа тикшерелгән. 15 марттан республикала дауахананан тыш пневмония менән ауырыуҙың 8 841 осрағы теркәлгән.

✓Рәсәйҙә 25 июнгә бөтәһе 7113 COVID-19 йоҡтороу осрағы расланған. 92 үлем теркәлгән. Тәүлек эсендә илдә 6 342 кеше дауаханан һауығып сыҡҡан. Дөйөм алғанда, бөгөн Рәсәйҙә коронавирус йоҡтороуҙың 613 994 осрағы теркәлгән. 375 164 кеше һауыҡҡан, 8 605 кеше яҡты донъя менән хушлашҡан. Әлеге ваҡытта ил төбәктәрендә коронавирусҡа 18,1 миллиондан ашыу тест эшләнгән.

✓Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығында яңы коронавирус инфекцияһы буйынса карантинға ябылған дауаханалар тураһында мәғлүмәт бирелде. Улар - Бишбүләк үҙәк район дауаханаһы, Өфөнөң 13-сө дауаханаһы (8 бүлексә). 1 июндән Республика ашығыс медицина ярҙамы станцияһы, Үрге Тәтешле үҙәк район дауаханаһы, "Медсервис" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте, Архангел һәм Бөрө үҙәк район дауаханаһы карантинға ябылды.

✓Өфөлә яңы коронавирус инфекцияһы пандемияһы башланғандан алып рәсми рәүештә 1690 ыңғай һөҙөмтә теркәлгән. Һуңғы тәүлектә биш осраҡҡа артҡан, тип хәбәр итте Роспотребнадзорҙың эпидемиологик күҙәтеү бүлеге етәксеһе урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Зөлфиә Камаева мэрияла уҙған оператив кәңәшмәлә. "100 меңгә сир күрһәткесе 148,2 осраҡ тәшкил иткән, - тине санитар табип. - Бөгөн Өфөлә 14 868 кеше табиптар күҙәтеүенә алынған, уларҙың ике меңдән ашыуы - ОРВИ билдәләре менән".

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров исеменә "Газпром" идараһы рәйесе Алексей Миллерҙән рәхмәт хаты килде. Дәүләт эшмәкәре республика етәксеһенең ярҙамын һәм вахтасыларҙы Яҡут Республикаһының Чаянда яҡтылығынан тиҙ генә ҡайтарыуын билдәләне. Компания идараһы рәйесе һүҙҙәренсә, Башҡортостан менән "Газпром" араһында хеҙмәттәшлек дауам итә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республика властары 1590 вахтасыға тыуған яғына ҡайтырға ярҙам итте.

✓ *Тик барыбер бензинға ла, араҡыға ла, енәйәттәрен йомшартып, "майларға" ла аҡсалары етеп тора. Күрәһең, законды нисек кенә ҡәтғиләштермә, ул барыбер эскән кешегә кәртә була алмай.*



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

**Мәскәү урамында мәңге иҫерек актер Михаил Ефремов тарафынан ҡылынған үлемесле автомобиль фажиғәһе бөтөн илде шаулатты, ләкин бынан ғибрәт алыусы булманы. Күрәһең, фажиғәгә ҡарағанда, йәмәғәтселекте билдәле кешенең персонаһы нығыраҡ ҡыҙыҡһындырҙы.**

# "ЕФРЕМОВ СИНДРОМЫ" ТИГӘН...

## заман "уйындары"



Эйе, хәҙер беҙҙә ана шулай автоһәләкәттәргә ҡарата ла иммунитет барлыҡҡа килде, буғай, сөнки көн дә булып торған бындай йөрәк ярғыс хәбәрҙәргә бит йыуған кеүек күнегә килдәбеҙ. Тәүбә ҡыҫҡырырға, саң ҡағырға, иҫерек водителдәргә ҡаршы күтәрелеп сығырға ла бит... Беҙ тағы ла бер ни булмағандай, көндәлек эштәребеҙгә тотонабыҙ. Ә шул арала "Ефремов синдромы" атамаһы алып өлгөргән бындай авариялар һаны көнләп түгел, сәғәтләп арта бара. Илдең башҡа төбәктәрендә нисектер, әммә Мәскәүҙәге ғибрәттән һуңғы аҙна эсендә генә бер-бер артлы өс үлемесле фажиғәнең дә Башҡортостанда иҫерек водителдәр арҡаһында булыуы нәфрәт тыуҙыра. 16 июндә Иглин ҡасабаһында 37 йәшлек шәп тиҙлектә елгән иҫерек водитель юл ситенән китеп барған 6 үҫмер өҫтөнә барып менә. Бәхеттәренә, бер нисәһе ялтанып өлгөрә, ә бына аттестат алып ҡайтып барған 15 йәшлек ҡыҙ шундуҡ һәләк була, ә уның тиҫтере ауыр хәлдә дауаханаға оҙатыла, төрлө йәрәхәт алған ике үҫмерҙең беренһе - ҡултыҡ таяҡтарында, икенсеһенең яраларын бәйләп, табиптар өйҙәренә ҡайтара.

Икенсе осраҡ: 8 июндә Стәрлетамаҡ ҡалаһында 62 (!) йәшлек иҫерек ир шулай уҡ 15 йәшлек ҡыҙ баланы - 8-се класс уҡыусыһын бәрҙереп үлтерә, ә янындағы дуҫ ҡыҙы йәрәхәттәр менән дауаханаға оҙатыла. Ошо уҡ ҡалала тағы бер иҫерек водитель арҡаһында бәләкәй бала һәләк була.

Был мәғлүмәттәр бер-бер артлы бер үк ваҡыттараҡ булғанға ла күҙгә бәрелә, ә ошоға тиклем дә бит иҫерек водителдәр арҡаһында күпме кешенең ғүмере өҙөлдө! 2019 йылда ғына ла иҫерек водителдәр 4,4 мең кешене (көнөнә - 12 ҡорбан!) тапатып, бәрҙереп үлтерҙе. Эйе, туранантура шулай тип, яуапһыҙлыҡ, тупһыҙлыҡ, башҡалар яҙмышына битарафлыҡ арҡаһында ҡылынған ғибрәт хәлдәр үҙенең исеме менән аталырға тейеш: үлтерҙе. Рәсәйҙәге юл-хәрәкәт тәртибен боҙоуҙарҙың һәр унынсыһы иҫерек водителдәр тарафынан яһала. Һәр иҫерек водитель - потенциаль кеше үлтереүсе. Бына шулай, кешелеген юғалтҡан әҙәмдәрҙе ҡылыҡтарына ярашлы тура әйтеп гәйепләү етмәй беҙҙә. Юғиһә бит, юл-хәрәкәт ҡағиҙәһен боҙған бындай осраҡтарҙы, айырыуса төп гәйеплеләрҙе нисек кенә аҡларға, яҙаны йомшартырға тырышмайҙар. "Һаҡһыҙлыҡ арҡаһында", йәнәһе! РФ Енәйәт кодексының 264-се статьяһы, 4-се а пунктында иҫерек килеш юл ҡағиҙәһен боҙоп, кеше үлеменә сәбәпсе булыу факты иҫерек килеш күрәләтә рулгә ултырыу тип түгел, ә эскән килеш ҡылынған "һаҡһыҙлыҡ " тип атала. И.Соловьев тигән бер Мәскәү юристы әлеге мәңге иҫерек Ефремовтың енәйәтен дә тап шундай һүрәттә - һаҡһыҙлыҡ ҡасафаты тип күрһәтергә тырыша. Ул, йәнәһе, бер кемде лә үлтерергә теләмәгән. Дөрөҫө шул: иҫеректен уйында бер генә теләк: тиҙлек. Араҡы йә наркотикты уға бәйле кешеләр бер ҙә генә "һаҡһыҙлыҡ" арҡаһында түгел, ә аңлы рәүештә, яман гәҙәтенә баш була алмай, нәфсеһен тыя алмағанлыҡтан ҡуллана. Уларҙы был осраҡта "сирле, ауырыу " тип әпәүләү ҙә дөрөҫ түгел, сөнки сирле кеше дауаханала ята йә өйөндә ултыра һәм, әгәр ауырыу икән, уға күрәләтә машина йөрөтөүгә хоҡуғын раҫлап таныҡлыҡ биреү - үҙе енәйәт. Ә инде ҡасандыр документ бирелгән икән, ошоға тиклем юл ҡағиҙәһен боҙоп өлгөргән был әҙәмде ЮХХДИ махсус картотекаға индереп, контролдә тоторға тейеш түгелме икән ни? Үкенескә, ЮХХДИ беҙҙә юл-хәрәкәт ҡағиҙәләрен боҙоу факттарын иҫкәртеү урынына күберәк ана шул авариялар эҙенән генә йөрөргә гәҙәтләнгән, күнелһеҙ хәл-ваҡиғаның иң аҙағына ғына килеп етә улар.

Автоһәүәҫкәрҙәр тарафынан ҡылынған енәйәттәрҙең төп сәбәбе - гәйеплеләргә яҙа сараһының йомшаҡ булыуы, дөрөҫөрәге, уның теүәл үтәлешенең күҙәтелмәүе. Ярай, бер йыл элек закон статьяһын камиллаштыра ла төштеләр, ти. Хәҙер иҫерек көйө кеше тапатып үлтергән өсөн 5-12 йыл төрмә янай, ә ике йә бер нисә кеше үлеме өсөн 15 йылға иркенән мәхрүм итеү ҡаралған, ләкин был яҙаны тулыһынса үтәп сыҡҡандар бармы икән ул тарихта? Күптәр баштан алып, төрмәгә баштарын тыҡмаҫ борон уҡ һаҡланыу саралары күрә башлай: йә зыян күргән яҡ менән хаҡын килешеп, түләп ҡотола, йә "тейешле" кешеләргә аҡса, ришүәт биреп, ирек яулай, ахыр сиктә, әләкһә лә төрмәгә түгел, ә ауыл-ҡасаба тибындағы колонияға барып, иркенләп йәшәй, тегендә-бында йөрөп ята ала, ҡайһылары өлгөлө тәртибе өсөн йә амнистия буйынса ваҡытынан алда иреккә сыға. Бөткәнме ни беҙҙең системалағы тишек-тошоҡ, йырын-йыртыҡ...

Шулай, бер нәмәгә ҡарамай, тормош дауам итә, урамдарҙы, юлдарҙы, хатта йәйәүлеләр законлы һуҡмаҡтарын баҫып алыусы машиналар, уларҙың торған һайын мөгәҙһөҙ һыйырҙай һөмһөҙләнә барған водителдәре арта ғына бара: ҡағиҙәне беләме ул, юҡмы, иҫерекме, айыҡмы, ауырыуны, һауны - бөтәһе лә рулгә ынтылып ята, уны мәртәбә күрә. Ә аңһыҙ, күҙе тонған әҙәм ҡулында машина - ул һәр ваҡыт хәүеф сығанағы. Ҡасан ғына был машиналар ҡиммәтле, әммә үлемесле уйынсыҡ булыуҙан туҡтар икән?

Йәйәү йөрөүҙе күптән онотто әҙәм, йылдар буйы машинаһында ҡорһаҡ үҫтерҙе. Унһыҙ, ярай, үҙҙәренең эше, тик бына айыҡ ҡына булһындар ине лә бит. Хатта бензинға хаҡ артып тороу ҙа төшөрә алмай быларҙы машиналарынан. Ә бит эш хаҡы бәләкәй, түләүҙәр күп, эшһеҙлек, тип меҫкенләнергә яраталар, гәҙәттә, тик барыбер бензинға ла, араҡыға ла, енәйәттәрен йомшартып, майларға ла аҡсалары етеп тора. Күрәһең, законды нисек кенә ҡәтғиләштермә, ул барыбер эскән кешегә кәртә була алмай. Тимәк, тағы бер сәбәп бар һәм ул күптән инде беренсе урында: эскелек, араҡы. Илдә әҙәм балаларының үҙ теләктәре менән араҡы һәм наркотик ҡолдарына әүерелеүе, тотанаҡһыҙлыҡ, кешелекһеҙлек, наҙанлыҡ арта. Шуға бәйле ҡылынған үлемесле юл фажиғәләре халыҡ телендә "Ефремов синдромы" тип атала икән хәҙер. Һәр замандың үҙ "уйындары"...

Әйткәндәй, республика юлдарындағы бындай ҡот осҡос хәлдәрҙән, ниһайәт, ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре лә уянып китте, буғай. 20 июндә генә лә Башҡортостан юлдарында 16 автоһәләкәт теркәлде, унда 3 кеше һәләк булды һәм 21 кеше тән йәрәхәттәре алды, тип хәбәр ителә республиканың баш инспекторы блогында. Был һанды баҫырға әҙерләгәндә алынған мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостан ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре тәүлек эсендә 1900 юл-хәрәкәт ҡағиҙәләрен боҙоу осраҡтарын теркәне, 73 иҫерек водитель (!) тотолдо. Элек урлап ҡыуып алып кителгән бер автомобиль табылды. Бына бит, бурыстары талап иткәнсә, үҙ эшенә яуаплыраҡ ҡарағанда, йәғни әлеге осраҡта юл-хәрәкәт хәүефһеҙлеге һағында көн дә шулай уяу торғанда, күп бәлә-ҡазаларҙы иҫкәртергә, эскән килеш руль артына ултырырға баҙнат итеүселәрҙе ҡый үләндәре һымаҡ берәм-берәм "супләргә" лә була икән! Контроль барлыҡын һиҙеп, улар ҙа, бәлки, был алама гәҙәттәренән тыйыла башларҙар ине.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*УҠЫУСЫБЫҘ ЯҘА*

# ТӨҢӨЛДӨРМӘЙ

**"Киске Өфө"лә "Тел ҡайғыһы беҙҙә" тип аталған бер кәлимәне уҡығас, мин дә ҡайнап китеп, ҡулыма ҡәләм алдым.**

Ысынлап та, донъя артынан, аҡса артынан ҡыуып, үҙенең, балаларының рухи байлығы тураһында онотоусылар арта бара шул. Ошо арҡала балаларының яҙмышы буталған миҫалдар тулып ятһа ла, һабаҡ алмай әҙәм. Аҡса бер ҡасан да, бер кемгә лә етмәй ул. Ә шулай ҙа телде һаҡлау барыбыҙҙың да, һәр кемдең дә изге бурысы. Туған телдә һөйләшмәһәк, уҡымаһаҡ, аралашмаһаҡ, киләсәк быуын, балалар, ейән-ейәнсәрҙәр, бүлә-бүләсәрҙәр беҙҙе ғәфү итмәҫ бит.

"Киске Өфө" гәзитен 2002 йылдан алып уҡыйым. Гәзит миндә бер ҡасан да ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо ҡалдырғаны, төңөлдөргәне булманы. Был юлы ла матбуғатҡа яҙылыу кампанияһы башланыу менән почтаға йүгерҙем. Эйе, хаҡтар йылдан-йыл арта. Уға иғтибар итмәҫкә тырышам. Почта йәшнигенә гәзит килмәй ҡуймаһын тип, тулкынланып көтөп алам "Киске Өфө"нө. Туған телгә һөйөү уятыуҙа, халҡыбыҙ тарихын барлауҙа гәзиттең өлөшө баһалап бөткөһөҙ.

Мин үҙем хаҡлы ялдағы уҡытыусымын. "Киске Өфө"нө мәктәптә эшләгән йылдарымда һәр дәресемдә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте, Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте буйынса үткәрелгән бар саралар ҙа яратып ҡулландым. Шул тиклем ҙур ярҙамсы һәм кәңәшсе булды миңә гәзит. Артабан да халҡыбыҙҙы ҡыуандырып, матур, тәрән аҡыллы, тарихи ысынбарлығыбыҙҙы асып биргән мәҡәләләре менән беҙҙе ҡыуандырыһын әле.

**Рәсимә САФИНА,**
**хаҡлы ялдағы уҡытыусы.**
**Салауат районы Урмансы ауылы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республика Башлығы Радий Хәбиров 1 сентябргә тиклем баш ҡаланың Октябрь Революцияһы урамын үҙгәртеү проекттын күрһәтергә ҡушты. Бойороҡҡа ярашлы, махсус эш төркөмө "заманса йәмәғәт киңлеген" һәм урамдың тарихи тышҡы күренешен һаҡлауҙы күҙ уңында тотҡан концепция әҙерләргә бурыслы. Проектта ҡала халҡының фекерен иҫәпкә алыу тейешлеге билдәләнә.

✓Хоҡуҡ һаҡлаусы Зөлфиә Ғәйсинаның кандидатураһы Башҡортостанда Кеше хоҡуҡтары буйынса вәкил вазифаһына килешеү өсөн Мәскәүгә Рәсәй Федерацияһында Кеше хоҡуҡтары буйынса вәкил Татьяна Москальковаға ебәрелде. Был хаҡта Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәте хәбәр итте. "Башҡортостан Конституцияһына ярашлы, республика Башлығы ошо кандидатураны индерҙе", - тип аңлатма бирҙе республика Ҡоролтайы рәйесе Константин Толкачев.

✓2020 йылдың тәүге биш айы йомғаҡтары буйынса Башҡортостанда сәнағәт етештереүе индексы 99 процент тәшкил иткән, был Рәсәй буйынса уртаса күрһәткестән юғары, тип белдерҙе Радий Хәбиров Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә. Башҡортостанда торлаҡты сафҡа индереү, 2019 йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда, 3 процентҡа артҡан.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында велосипедтар прокаты - велошеринг эшләй башланы. Әлеге ваҡытта ике велопарковка эшләй: беренһе - Черниковка биҫтәһендәге Беренсе май урамында, икенсеһе Мостай Кәрим исемендәге урамда Профсоюздар йорто янында урынлашҡан. Аҙаҡ велопарковкаларҙы Өфө үҙәгенән (Телеүҙәк) Гастелло исемендәге стадионға тиклем Черниковка һәм Инорс биҫтәләре сигендә ҡуйырға йыйыналар. Бынан алда Өфөлә кикшеринг - электросамокаттар прокаты эшләй башлауы хәбәр ителгәйне.

✓Шәйехзада Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты Лариса Абдуллина "Аҡбуҙат" балалар журналының баш мөхәррире итеп тәғәйенләнде. Шағирә, журналист һәм йәмәғәт эшмәкәре Лариса Абдуллина журналистика өлкәһендә - 1994 йылдан, "Башҡортостан" гәзите редакцияһында 2008 йылдан алып эшләй. Быға тиклем "Башҡортостан" гәзитендә әҙәбиәт һәм мәҙәниәт бүлеген етәкләне. "Аҡбуҙат" - мәктәпкәсә һәм кесе мәктәп йәшендәге балалар өсөн айлыҡ әҙәби-нәфис журнал.

✓ *1 июлдә - Рәсәй Конституцияһына үҙгәрештәр индереү буйынса тауыш биргән көндә эшләгән өсөн рәсәйҙәргә икеләтә хеҙмәт хаҡы түләнә. Тауыш биргән көндә эшләмәгән хеҙмәткәрҙәр ҙә эш хаҡын һаҡлап ҡала.*



ҠЫҪҠАСА

# ИМТИХАНДАР БАШЛАНА

✓ **Рәсәй Мәғариф министрлығы Мәғариф һәм фән өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт менән берлектә Берҙәм дәүләт имтиханы теҙмәһен раҫланы.** Һынау имтихандары 29 һәм 30 июндә була. Артабан сығарылыш класс уҡыусылары түбәндәге фәндәрҙән имтихан бирә: 3 июлдә - география, әҙәбиәт һәм информатика, 6 һәм 7 июлдә - рус теле, 10 июлдә - профилле математика,13 июлдә - тарих һәм физика, 16 июлдә - йәмғиәтте өйрәнеү һәм химия, 20 июлдә - биология һәм сит телдән имтихандың яҙма өлөшө, 22 һәм 23 июлдә - сит телдәрҙең "телмәр" бүлеге, 24 июлдә - бөтә фәндәрҙән (телдәрҙән тыш), 25 июлдә - бөтә фәндәрҙән. 3-8 августа Берҙәм дәүләт имтиханының икенсе тулҡыны була.

✓ **Рәсәй Хеҙмәт министрлығынан белдереүҙәренсә, 2020 йылдың 24 июне илдә хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡы һаҡланған ял көнө тип иғлан ителде.** Был көн өсөн хеҙмәткәр ошо көндә тулыһынса эшләгән осраҡта күпме алһа, шунса алырға тейеш. Ошо көндә эшләгән хеҙмәткәрҙәргә (өҙлөкһөҙ етештереү, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ учреждениелары, медицина учреждениелары) аҡса ғәҙәти күләмдә түләнә, сөнки эшләмәгән көндәр ялға йәки эшләмәгән байрам көндәренә ҡарамай. Производство календары үҙгәрмәй, был көн эш ваҡыты нормаһынан алынмай, отпуск оҙайтылмай. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 1 июлдә - Рәсәй Конституцияһына үҙгәрештәр индереү буйынса тауыш биргән көндә эшләгән өсөн рәсәйҙәргә икеләтә хеҙмәт хаҡы түләнә. Тауыш биргән көндә эшләмәгән хеҙмәткәрҙәр ҙә эш хаҡын һаҡлап ҡала.

✓ **Милли ата-әсәләр комитеты балаһын яңғыҙы тәрбиәләгән әсәләргә, шулай уҡ атайҙарға ваҡытлыса өҫтәмә пособие индереү башланғысы менән сығыш яһаны.** Комитеттың тәҡдиме Дәүләт Думаһына һәм хөкүмәткә ҡарауға ебәрелгән дә инде. Билдәләнеүенсә, коронавирус пандемияһы арҡаһында Рәсәйҙә иҡтисади хәл ҡатмарлашты. Дәүләттең төрлө йәштәге балаларға пособие өсөн аҡса бүлеүенә ҡарамаҫтан, яңғыҙ ата-әсәләр яҡланмаған социаль төркөм булып ҡала. "Ғаилә ағзаһына ике йәшәү минимумынан кәм булмаған иҫәптән сығып, йыл аҙағына тиклем яңғыҙ әсәләргә һәм атайҙарға ай һайын пособие түләүҙе һорайбыҙ", - тиелә мөрәжәғәт тексында. Яңғыҙ әсәләр өсөн барлыҡ ғәмәлдәге льготалар һәм пособиелар тулы күләмдә һаҡланырға тейеш, тип тә әйтелә мөрәжәғәттә.

✓ **2019 йыл өсөн физик берәмектәр килеменә һалым түләү ваҡыты 15 июлгә билдәләнде, тип иҫкә төшөрә Федераль һалым хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы.** Декларацияны 30 июлгә хәтлем бирергә мөмкин. Ваҡытты оҙайтыу кризис менән бәйле, элек һалым 30 апрелгә тиклем түләнә ине. Әгәр кеше күсемһеҙ милекте йәки автомобилде һатыуҙан, мөлкәтте ҡуртымға биреүҙән, лотереяла отоштан килемгә эйә булһа, яҡын булмаған туғандарынан ҡиммәтле бүләктәр (күсемһеҙ милек, транспорт, акциялар, пайҙар), сит илдән килем алһа, һалым түләй. Шулай уҡ шәхси эшҡыуарҙар, нотариустар, адвокаттар 15 июлгә тиклем килемгә һалым түләргә тейеш. Һалым ҡайтарmaһына ғаризаларҙы йыл дауамында теләһә ниндәй ваҡытта тапшырырға мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# АҠСА ТУПЛАУ МӨМКИНЛЕГЕ

**Торлаҡ төҙөү өсөн ипотека-аҡса туплау программаһын 2021 йылға тиклем оҙайтыуҙары ихтимал. "Төҙөлөш сәғәте"ндә ошо мөмкинлек тикшерелде.**

Республиканың Торлаҡ төҙөлөшөн үҫтереү фонды генераль директоры урынбаҫары Евгений Декатов һөйләүенсә, тәбәктә программа 2014 йылдан ғәмәлгә ашырыла. Элек унда торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаждар, балалы ғаиләләр һәм 35 йәшкә тиклемге ғаиләләр ҡатнаша алды. 2019 йылдың 1 мартынан Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса был сикләүҙәр бөтөрөлдө. Декатов әйтеүенсә, иҡтисадтағы һәм социаль өлкәләге кризисҡа бәйле, программала ирекле ҡатнашыуҙы 2021 йылдың аҙағына тиклем дауам итергә кәрәк. Ул шулай уҡ граждандар йылына 3 процент ставка менән торлаҡты льготалы кредитлау программаһынан файҙалана алһын өсөн аҡса туплау осороноң минималь срогын бер йылға тиклем кәметергә тәҡдим итте. Ипотека-аҡса туплау программаһы өҫтән алып алты йылға тиклем ике банкта иҫәп асырға мөмкинлек бирә. Ҡатнашыусыларҙың айлыҡ взносына республика бюджетынан взностың суммаһынан 30 процентҡа тиклем премия өҫтәлә. Шулай итеп, Башҡортостанда йәшәүселәр яңы торлаҡ өсөн тәүге взносҡа аҡса туплай ала.

# ГЕНПЛАН ТИКШЕРЕЛӘ



**Ошо көндәрҙә Мәскәү Генплан институты хеҙмәткәрҙәре ҡатнашлығында Өфө ҡалаһының Генпланы буйынса онлайн фекер алышыу үтте.**

Ғәмәлдәге Генплан бынан сирек быуат элек эшләнгән һәм 2006 йылда уға төҙәтеүҙәр индерелгән. Ошо осорҙа бик күп үҙгәрештәр булған һәм улар яңы, 2019 йылда эшләнә башлаған документта сағылыш табырға тейеш була. Эш биш этаптан тора: беренсе этапта мәғлүмәттәр тупланa, территорияны ғәмәлдә файҙаланыуға анализ яһала. Икенсе этапта әҙерлек эштәре алып барыла, ҡала киңлеге үҫеше концепцияһы варианттары ҡарала, төп концепция һайлап алына. Әле ҡарауға документтың өсөнсө этабы сығарылды. Мәскәү Генпланы Институты директоры Татьяна Гук белдереүенсә, яңы документта киңлекте ойоштороуҙың (ҡала киңлеген файҙаланыуҙың) төп принциптарының береһе булып Өфө ярымутрауының эсендәге һәм тышындағы үҫеш тора. Бында халыҡтың йәшәү һәм эшләү урындары ғына түгел, сәнәғәт территорияларын комплекслы тарҡатыу һәм модернизациялау, транспорт хәрәкәтен, социаль инфраструктураны үҫтереү һәм урынлаштырыу күҙ уңында тотола. Шул уҡ ваҡытта ҡаланың йәшелләген һаҡлап ҡалыу ҙа етди иғтибар үҙәгендә булырға тейеш. Бында инде йәшел зоналарҙа актив ял, спорт менән шөғөлләнеү мөмкинлеге иҫәпкә алына. Әгәр транспорт коридорын үҫтереү өсөн йәшел зоналар сиктәрен үҙгәртергә тура килһә, был фондты икенсе ерҙә арттырыу мөмкинлеге лә ҡарала. Стратегик йүнәлештәрҙең береһе булып рекреацион зоналарҙың һәм ял итеү урындарын төҙөкләндереү, тарихи мираҫты һаҡлау, социаль инфраструктураны үҫтереү, производство һәм көнкүреш ҡалдыҡтарын эшкәртеү системаһын булдырыу билдәләнә. Яңы Генплан эшләгәндә ҡала халҡының фекеренә лә ҙур иғтибар бирелә. Проект әҙер булғас, уның буйынса йәмәғәт тыңлауҙары үтәсәк һәм артабан документ фекер алышыуҙар ваҡытындағы иҫкәрмәләр, тәҡдимдәрҙе иҫәпкә алып, камиллаштырыласаҡ.

# ИСЕМЛЕК КИҢӘЙТЕЛДЕ

**Башҡортостанда 3-тән 7 йәшкә тиклемге балаларға айлыҡ аҡса түләү шарттары үҙгәрҙе. 20 майҙан аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр (килеме йәшәү минимумынан - 9 804 һумдан артмаған) өсөн 3-7 йәшлек балаларға түләүгә ғаризалар ҡабул ителә.**

Әлеге ваҡытта түләүҙең күләме 4 984 һумға баһалана. Башҡортостан Республикаһы Хеҙмәт министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 3-тән 7 йәшкә тиклемге балаға аҡса алыусылар исемлеге киңәйтелде. Әгәр элек түләү алыу өсөн аҙ тәьмин ителгән ғаиләнең барлыҡ эшкә һәләтле ағзалары эшләргә йәки белем биреү ойошмаһында көндөҙгө бүлектә уҡырға тейеш булһа, хәҙер иһә был сикләү бөтөрөлдө. Хәҙер 3-тән 7 йәшкә тиклемге балаһы булған бөтә аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр ошондай түләү алырға хоҡуҡлы. Ата-әсәнең эшләп йәки уҡып йөрөүе мотлаҡ тип һаналмай. Граждандарға ғариза биреү ҙә еңел. Барлыҡ кәрәкле документтар улар ҡарамағында булған органдарҙа ведомство-ара эш итеү юлы менән һорап алына. 3-тән 7 йәшкәсә балаларға айлыҡ түләү тәғәйенләү йәки баш тартыу тураһында ҡарар ғариза бирелгән көндән башлап 10 эш көнө дауамында ҡабул ителә. Ведомство-ара эш итеү барышында һоралған мәғлүмәттәр килмәһә, ҡарау ваҡыты ғариза ҡабул ителгән көндән алып 20 эш көнөнә тиклем оҙайтыла.

# ШТРАФТАР КҮЛӘМЕ АРТА

**Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары урамда рөхсәтһеҙ һатыу итеүселәргә штраф күләмен арттырыу тураһында закон проектын ҡарарға ниәтләй. Яңы ҡанун ҡабул ителһә, элек 1,5 мең булған штраф күләме хәҙер 4 меңгә тиклем артырға тейеш.**

Бынан тыш, вазифалы кешеләр һәм ойошмалар өсөн ҡабаттан ҡағиҙә боҙған өсөн дә яуаплылыҡ индерелә. Граждандар өсөн иң түбән штраф күләме - 500 һум - үҙгәрешһеҙ ҡала. "Был хәл-торошҡа ҡарап ниндәй ысул ҡулланырға кәрәклегенә ярҙам итәсәк, - ти парламент спикеры Константин Толкачев. - Бик йыш ябай граждандарҙы файҙаланып, киң ҡоласлы сауҙа алып барыла. Ҡанун боҙоусылар быйндай хоҡуҡ боҙоуҙы даими ҡуллана. Һатыусылар эшҡыуарҙарҙың тауарын үҙенеке итеп һата. Аныҡ һатыусыға һалынған иң ҙур штраф - 1,5 мең һум бындай эшмәкәрлеккә кәртә була алмай, сөнки ул алынған килем күләме менән сағыштырғанда бик бәләкәй. Рөхсәтһеҙ сауҙа ойоштороған кешене яуаплылыҡҡа тарттырыу ҙа мөмкин түгел".

Парламент спикеры белдереүенсә, хоҡуҡ боҙоусыларҙың ошондай схема ҡулланыуы алдында закон көсһөҙ. Был проблема бигерәк тә ҙур ҡалаларға хас. Сауҙа иткән граждандарға ҙур күләмдә штраф һалыу был хәл-торошто үҙгәртергә ярҙам итәсәк. Яңы закон ҡабул ителгән осраҡта урамда рөхсәтһеҙ сауҙа итеүселәргә штраф күләме түбәндәгесә буласаҡ: граждандар өсөн - 500-4000 һум, вазифалы кешеләр өсөн - 20-40 мең һум, ойошма-предприятиелар өсөн - 50-90 мең һум. Ҡабаттан хоҡуҡ боҙғанда штраф күләме граждандар өсөн 4-5 мең һум, вазифалы кешеләр өсөн - 40-50 мең һум, ойошма-предприятиелар өсөн - 90-110 мең һум.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында бензин ҡиммәтләнгән. Өфөлә "Башнефть" компанияһының яғыулыҡ ҡойоу станцияларында Atum-92 маркалы бензиндың бер литры - 42,40 һум, Atum-95 - 45 һум 05 тин, АИ-92 - 42,10 һум, дизель яғыулығы 46 һум 50 тин тора.Һуңғы тапҡыр хаҡ 2020 йылдың ғинуар башында арткайны.

✓25 июндә Росреестрҙың Башҡортостан идаралығы Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрының федераль системаһына тоташты. Унда кадастрҙарҙың һәм хоҡуҡ реестрының элек айырым булған мәғлүмәттәр базаһы берләштерелгән. Шуға бәйле ошо көндән "Шәхси кабинет" сервисында ғына күсемһеҙ милекте электрон төрҙә рәсмиләштерергә мөмкин, уға инеү өсөн Дәүләт хеҙмәттәре сайтында раҫланған иҫәп яҙмаһы булырға тейеш.

✓Өфөлә асыҡ һауала Александр Галибиндың Мостай Кәрим повесы буйынса "Һөнлекәш" фильмын күрһәтәләр. Уны "Башҡортостан" дәүләт концерт залы алдында ҡаранылар. Ойоштороусылар - Өфө ҡалаһы хакимиәте һәм Әмир Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы булышлығында "Башҡортостан" дәүләт концерт залы.

✓Баш ҡаланың "Аҡ Йорт" комплексы янында Көнсығыш сығыу юлы тоннеленең портал өлөшө нигеҙен һалыу бара. Февралдә майҙансыкта урман ҡырҡылды, ер эштәре башланды. Менделеев урамы, Көнсығыш битләүе урман паркы, Өфө йылғаһы һәм "Аҡ Йорт" тау саңғыһы комплексы менән сикләнгән биләмәне пландаштырыу проекты 9 мең самаһы квадрат метр хеҙмәтләндереү объектын төҙөүҙе күҙ уңында тота. Документацияға ярашлы, битләүҙең өҫкө өлөшөндә - өс яңы объект, ә берәүһен аҫта, йылға буйында һалыу күҙаллана.

✓Алыҫҡа йөрөгән поездарҙа йәнә йәмәғәт туҡланыуы нөктәләре эшләй. "Карантин сараларының бөтөрөлә башлауына бәйле пассажирҙар өсөн йәнә вагон-ресторан, вагон-бистролар эшләй. Унда антисептиктар бирелә, бинала кәмендә көнөнә ике тапҡыр дезинфекция үткәрелә. Вагон-ресторан хеҙмәткәрҙәре битлектәрҙән һәм бирсәткәләрҙән даими алмаштырып тора", - тип хәбәр иттеләр Куйбышев тимер юлы бүлексәһенән.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# БАЛАЛАР ЯЛЫ...

## шулай уҡ иғтибар үҙәгендә

**Был аҙнала Төп Законға индерелгән үҙгәрештәр буйынса тауыш биреү башлана, әммә уның төп датаһы булып барыбер ҙә 1 июль ҡала. Өфө ҡала округы хакимиәтендә видеоконференция форматында үткән сираттағы оператив кәңәшмәлә ошо сараға әҙерлек мәсьәләһе көн тәртибенә сығарылған мөһим мәсьәләләрҙең береһе булып торҙо ла инде. Сөнки коронавирус эпидемияны ваҡытында һайлау участкалары халыҡ күп йыйыласаҡ йәмәғәт урынына әүерелә һәм унда мотлаҡ рәүештә һаҡланыу, дезинфекция саралары ҡулланылырға тейеш.**

Һайлау участкаларының әҙерлеге хаҡында ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Рөстәм Гәзизов бәйән итте. Был сараны республиканың Үҙәк һайлау комиссияһы ойоштора. Муниципалитет тауыш биреүгә әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса төрлө кимәлдәге һайлау комиссияларына ярҙам күрһәтергә тейеш. Өфө ҡалаһында барлығы 435 һайлау участкаһы булдырылған, шул иҫәптән 25 участка - граждандарҙың ваҡытлы торор урынында. Әлеге ваҡытҡа уларҙың барыһы ла тауыш биреүгә әҙер, биналар ведомство-ара комиссиялар тарафынан янғын хәүефһеҙлеге һәм терроризм һаҡланыу буйынса тикшереү үткән. Һайлаусыларға мәғлүмәт таратыу маҡсатында Өфөлә 68 урында мәғлүмәт материалдары урынлаштырылған, 45 видеоэкран аша видеороликтар күрһәтелә. 34 сауҙа комплексында, халыҡ күп йөрөгән урындарҙа, йәмәғәт транспортында, шулай уҡ урамдағы радио аша транспорт туҡталыштарында һайлау көнө тураһында аудиотректар ҡуйыла һәм видеороликтар күрһәтелә. Халыҡ күп йөрөгән урындарҙа ирекмәндәр индерелгән үҙгәрештәр тураһында аңлата һәм һайлау участкаларына килергә саҡыра. Өфө ҡалаһының Эшҡыуарҙар союзы тарафынан халыҡтың граждандык әүҙемлеген күтәреү маҡсатында "Рәхмәт" дәртләндереү акцияһы ойоштороласаҡ. Уның сиктәрендә һайлаусыларға беләҙектәр һәм акция партнерҙарынан ташламалар алыу мөмкинлеге биреләсәк. Партнерҙар, акция шарттары менән ufarahmat.com сайтында танышырға мөмкин. Сығыш яһаусы белдереүенсә, барлыҡ һайлау участкалары санитар эшкәртеү үтәсәк һәм был эш көн һайын башҡарыласаҡ. Шулай уҡ һайлаусылар араһында социаль дистанция һаҡланыуы ла күҙәтеләсәк. Һайлаусылар участкаларға ингәндә уларҙың тән температураһы тикшереләсәк, уларға бер тапҡыр ҡулланыла торған бирсәткәләр, битлектәр һәм ручкалар биреләсәк. Республиканың барлыҡ участкалары ла кәрәкле һаҡланыу саралары менән тәьмин ителгән. "Өфө халҡының иғтибарын шуға йүнәлткем килә: дөйөм Рәсәй тауыш биреүе 7 көн - 25 июндән 1 июлгә тиклем бара, - тине Рөстәм Гәзизов. - Һайлау комиссиялары биналарында ла, унан ситтә лә, шул иҫәптән граждандарҙың телдән мөрәжәғәте буйынса ла тауыш бирергә мөмкин. Граждандар участкаларға үҙҙәре телгән ваҡытҡа килә йәки һайлау комиссияһы ағзаларын саҡырта ала. Өйҙә тауыш биреү өсөн һайлау комиссияһына шылтыратып, күсмә тауыш биреүҙе ойоштороуҙарын һорарға, йәки һайлауға барған таныштар, күршеләр аша үтенесегеҙҙе әйтеп ебәрергә кәрәк".

Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин ҡала халҡын әүҙем граждандык позицияһы күрһәтергә һәм йылдың мөһим сәйәси ваҡиғаһында ҡатнашырға саҡырҙы.

Шулай уҡ көн тәртибенә балаларҙың йәйге ялын ойоштороу мәсьәләһе лә сығарылды. Мәғлүм булыуынса, 1 июлдән йәйге лагерҙар эш башлаясаҡ. Был хаҡта хакимиәттең Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова билдәләүенсә, барлығы 271 ял учреждениеһының эш башлауы көтөлә. Улар, дөйөм алғанда 94 мең, шул иҫәптән социаль яҡланмаған төркөмдәрҙән 12 мең баланы ҡабул итергә тейеш. 2 шифахана-һауыҡтырыу лагерында 900 баланың ял итеүе күҙаллана. Ведомство ҡарамағында булған йәки башҡа милек формаһындағы лагерҙарҙа 5 мең бала ял итәсәк, шул иҫәптән 265 бала - ғаиләне алмаштырыусы ғаиләләрҙән. Муниципаль лагерҙар 6 июлдә эш башлаясаҡ һәм уларҙа 2000 уҡыусы һауығын нығытасаҡ. Роспотребнадзор күрһәтмәһе буйынса, лагерҙар яртылаш ҡына тулыландырыласаҡ. 3 июлдән 7 мәктәп яны лагеры эш башлаясаҡ, уларҙа 900 уҡыусы йөрөйәсәк. 31 июлдән 125 мәктәп яны лагеры 13915 бала өсөн ишектәрен асасаҡ. Шулай уҡ хеҙмәт һәм ял лагерҙары ла эш башлаясаҡ. Йәйге осорҙа үсмерҙәрҙе эшкә урынлаштырыу мәсьәләһен хәл итеү ҙә планлаштырылған. Мәшғүллек үҙәктәре аша 5750 бала эш хаҡы түләнгән эшкә урынлашасаҡ, уларҙың 960-ы - ауыр тормош хәлендә ҡалған ғаиләләрҙән, 180-е - социаль хәүеф төркөмө иҫәбендә тороусылар. COVID-19 таралыу хәүефе шарттарында барлыҡ лагерҙарҙа ла һаҡланыу һәм дезинфекциялау талаптары үтәләсәк.

Шулай уҡ кәңәшмә барышында Өлфәт Мансур улы баш ҡалаға "Хеҙмәт фиҙаҡәрлеге ҡалаһы" исемен алыу өсөн тауыш бирергә саҡырҙы. Өфө Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында фашизмды еңеүгә ҙур өлөш индерә. 24 июндән уға ошо исемде биреү буйынса ҡултамғалар йыйыу башлана, шулай уҡ 25 июндән 1 июлгә тиклем һайлау участкаларында ла ҡултамға ҡуйырға мөмкин.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ПЕНСИЯҢ КҮПМЕ?

**Киләһе йылда пенсияның уртаса күләме 17 432 һумға етеүе мөмкин. Документҡа ярашлы, 2021 йылда эшләмәгән пенсионерҙарҙың страховка пенсияһын индексациялау күләме - 6,3 процент, 2022 йылда - 5,9 процент (18 357 һумға тиклем), 2023 йылда 5,6 процент була (19 283 һумға тиклем).**

Түләүҙәр өсөн сығым йыл һайын 1 апрелдән башҡарылған индексацияны һәм пенсионерҙың бынан алдағы йыл өсөн йәшәү минимумының үсеш темпын иҫәпкә алып билдәләнгән: 2021 йылда - 1,5 процент, 2022 йылда - 3,9 процент, 2023 йылда - 3,7 процент. 2021-2023 йылдарҙа тупланма өлөш һәм ашығыс пенсия түләүе күләмен арттырыу планлаштырылмай. Социаль пенсияның уртаса йыллыҡ күләме 2021 йылда - 9977 һум, 2022 йылда - 10 307 һум, 2023 йылда 10 693 һум була.

*БАШ ҠАЛАМ*

# МАШИНАНАН СЫҠМАЙ ҒЫНА...

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин Мәжит Ғафури исемендәге үҙәк мәҙәниәт һәм ял паркында асыҡ һауала автокинотеатр булдырыу буйынса күсмә кәңәшмә үткәрҙе. Сарала проектты тормошҡа ашырыу концепцияны, автокинотеатрҙың тышҡы биҙәлеше, майҙансыкты төҙөкләндереү, эш ваҡыты һәм башҡа мәсьәләләр ҡаралды.**

Был майҙан йорттарҙан алыҫта урынлашҡан, ҡышын унда һырғалаҡ эшләнә, ә йәйгеһен ул картинг майҙаны булып хеҙмәт итә. Автокинотетар ойоштолған осраҡта ла, унда көндөҙөн картинг менән шөғөлләнергә мөмкин буласаҡ. Майҙансыкта 54 машиналыҡ парковка урыны эшләнә. Тамашасылар фильмды ҙур светодиод экрандан ҡараясаҡ, ә уның тауышын автомобилдең аудиосистемаһы аша ишетәсәк. Шулай уҡ туҡланыу урындары ла буласаҡ. Әлеге ваҡытта экран урынлаштырыу урыны әҙерләнгән, төҙөлөш-монтаж эштәрен июль башында тамамлау планлаштырыла.

# ВЕЛОЮЛДАР ИШӘЙӘ

**Баш ҡалала велосипед юлдарының торошо тикшерелде. Рейдта ҡала хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы хеҙмәткәрҙәре, велоактивистар, киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты.**

"БР велосипедсылары союзы" рәйесе Камила Шурмелева белдереүенсә, улар велоюлдарҙы тикшереп сыҡҡан һәм дефекттар булыуын асыҡлап, ҡайҙа ремонт кәрәклеген билдәләп, исемлек төҙөгән. "Ҡала хеҙмәттәренең оператив эшләүе һәм етешһеҙлектәр тиҙ арала бөтөрөлөүе ҡыуандыра, - ти ул. - Велосипедсыларҙың төп теләге - сокорҙарҙың булмауы һәм бордюрҙарҙы түбәнәйтеү". Әйткәндәй, Өфөлә "СУРСИС" МБУ-һында ҡаланың велоюлдарын тикшереп торған махсус бригада булдырылған. Улар велосипедсыларҙың теләктәрен иҫәпкә алып, бордюрҙарҙы түбәнәйтә һәм билдәләр һала, хәрәкәт итеүгә ҡамасаулаған башҡа етешһеҙлектәрҙе бөтөрә. Бөгөн баш ҡала велоюлдарының дөйөм оҙонлоғо 74 километр тәшкил итә. Махсус программаға ярашлы, Октябрь проспекты, Октябрҙең 50 йыллығы, Сельская Богородская, Маршал Жуков, Һупайлы, Менделеев урамдарындағы, "Беренсе май", "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял парктарындағы, Дим районында "Көмөш шишмә" бисәтәһендә, Парк урамындағы "Сәләмәтлек һуҡмағы" һәм башҡа участкаларҙа велосипед юлдары булдырылған.

# АҒИҘЕЛ ЯРЫ МАТУРЛАНА

**Тиҙҙән Ағиҙел йылғаһының Ағиҙел урамынан тимер юл күперенә тиклем участкаһында инженер ҡоролмаларын реконструкциялау менән бер рәттән, алып барылған ярҙы нығытыу эштәре тамамланасаҡ.**

Әле унда комплекслы хәүефһеҙлек системаһын урынлаштырыу һәм яңы канализация торбалары һалыу эштәре башҡарыла. Бынан тыш, территорияла полиция һәм медицина хеҙмәткәрҙәренең стационар постары буласаҡ. Әлеге ваҡытта шулай уҡ Дуҫлыҡ монументы туҡталышында яңы ер аҫты үткәүелен төҙөү эштәре дауам итә. Ул былтыр башланғайны, быйыл йыл һуңында тамамланырға тейеш. Объекттың оҙонлоғо - 110, киңлеге 5 метр.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡурылдай астмаһы

❖ 1 ҡалаҡ яңы йыйылған эт эсәге үләнен (вьюнок полевой) термосҡа һалып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Ашау ваҡытына ҡарамаҫтан өскә бүлеп эсергә кәрәк. Дауаланыуҙы яҙ башлайҙар, көҙгә табан сир китә.

❖ 30 тамсы водород перекисын ярты стакан һыуға тамыҙып, иртәнсәк ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә. Кискеһен 1-әр балғалаҡ бурһыҡ майы һәм балды бутап, йоҡларҙан алда ашап ятырға.

❖ Ҡайын еләге төнәтмәһе йәки һытын эсеү ҙә ҡурылдай астмаһын дауаларға ярҙам итә. Төнәтмәне әҙерләү өсөн 2 ҡалаҡ ҡурай еләге япрағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты-бер сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмәне һәр ике сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ эсергә. Ә бына ҡайын еләге һуты бер эскәндә 4-8 ҡалаҡ кәрәк.

### Гипотония

❖ Ҡан баҫымы түбәнәйгәндә шайтан таяғы (татарник обыкновенный) япраҡтарынан әҙерләнгән төнәтмә файҙалы. 1 ҡалаҡ ваҡланған япраҡтарға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 4 тапҡыр сиреклап эсергә.

❖ Таҙартылмаған ҙур ике баш һуғанға 1 литр һыу ҡойоп, 100 грамм шәкәр өҫтәргә һәм талғын утта 15 минут ҡайнатырға, һөҙөргә. Был һыуҙы көн дауамында ярты стаканлап эсеп бөтөрөргә, ашау мәленә ҡарамай. Шәкәр урынына бал ҡушырға ла мөмкин, әммә уны ҡайнап сыҡҡас ҡына өҫтәргә.

### Герпес

❖ 3 йыллыҡ йөҙйәшәрҙең (алоэ) япраҡтарын ҡырҡып алырға, 7 көн һыуыткыста торорға. Шунан һутын һығып алып, ас ҡарынға ярты балғалаҡ эсергә, артынан һыу эсеп ҡуйырға. Бер үк ваҡытта герпес сыҡҡан урынға ла йөҙйәшәр һутын көнөнә бер нисә тапҡыр һөртөп торорға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

**✓ Балалар беҙгә үҙ ҡулдары менән эшләгән бүләктәрен тапшырҙы. Ҡайһы бер әсәйҙәрҙең ҡотлауға яуап итеп улына йә ҡыҙына уйынсыҡ, йә шоколад тотторғанын күргәс, аптыраным. Быны бит бүләк алмаған башҡа балалар күреп торҙо.**



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Йыш осраҡтарҙа биҙәк салфетка һәм ашъяулыҡтарҙың сите буйлап урынлаштырылған, мөйөштәренә акцент яһалған. Туҡыма уртаһында сәскәле оя биҙәкле ҙур булмаған түңәрәк урынлашҡан. Ябай йәки киң элмә ярҙамында һабаҡтар, төп биҙәктең кәкерсәктәре һәм ситендәге ҡайма эшләнгән. XX б. башы ҡайыуында орнаменталь композицияның бер өлөшө тулыландырмай ҡалдырылған, ҡайһы берҙә сәскә һәм япраҡтарҙың үҙәге генә сигелгән. Ә бына XX быуат уртаһына ҡараған ҡайылған әйберҙәр тултырып сигелеүе менән айырылып тора, биҙәкте киң ҡуш элмә, ҡыя сәнсеп сатрашлап ҡайып тултырғандар, нағыш ҡүләмле күренгән. Биҙәк элементтарының атамаһы орнаменты ҡуҙ алдына килтерергә ярҙам итә: һабаҡ, һарына сәскәһе, һарына - һарына һуғанбашы, мәк сәскәһе, мәк башы, гөл - күп тажлы ялпаҡ сәскә, бөрө, япраҡ, имән япрағы, усаҡ япрағы, борос, бармаҡ, тамсы. XX быуаттың 40-60-сы йылдарына ҡараған таҫтамал һәм алъяпҡыстарҙа осло йәки йомро тажлы сәскәләрҙән ҙур гөлләмә, хатта ҡыуаҡ сиккәндәр. Уртаһында оя биҙәк ҡайылған үҙәктәш композициялар һирәгерәк осраған.



*Туй ашъяулығы (Силәбе өлкәһе, Арғаяш районы, Яңы Субыл ауылы). Автор фотоһы. 1972*



*Алъяпҡыс итәгендәге нағыш (Силәбе өлкәһе). МАЭ. Т.К. Сурина фотоһы*



*Ҡайылған ашъяулыҡ (Силәбе өлкәһе). Автор фотоһы. 1972*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ӘСӘЙҘӘР МӘКТӘБЕ

# УЛАНДАРҒА ХЕҘМӘТ ИТӘБЕҘ...

**Бала саҡта мин нишләптер әрмегә барырға хыяллана торғайным. Атай мәрхүм дә: "Ҡыҙҙар әрмелә элемтәсе лә, шәфҡәт туташы ла, хатта разведчик та була ала", - тип хуплап ебәргәне хәтерҙә. Баҡтиһәң, ошо хыялым бергилке тормошҡа ашҡан икән. Өс бөртөк кенә малайҙан торған "әрме"нең командиры инде мин. Малайҙар - буласаҡ һалдаттар, тимәк, мин кескәй генә "әрме"лә хеҙмәт итеп йөрөйөм, тигән һүҙ был. Ошо әрме хеҙмәтенең бер көнөнә байҡау яһап китәйек әле.**



Иң беренсе бурысым - таң тишегенән тороп, сәй ҡуйып, бутҡа бешереп, һалдаттарҙы уятып, йыуындырып, кейендереп, ашатып, икәүһен мәктәпкә оҙатып, берәүһен балалар баҡсаһына алып барып килеү. Ошо иртәнге процедуралар араһында һәр бер һалдаттың теләген, нимә яратыуын иҫәпкә алып, төшкө ашҡа меню алып ҡалыу - иң мөһим эштәрҙең береһе. Уларҙы оҙатҡас, "казармаларҙа" тәртип урынлаштырып, йыуырын - йыуып, тегерен - тегеп, рәтләрен - рәтләп, ул-был итеүгә, төшкө аш мәле яҡынлай. Бер ҡаҙан аш, бер самауыр сәй, тәмле-татлыһын, бәлешепирәжкиен бешереп, ашатып, аҙаҡ тауҙай һауыт-һабаһын йыуып-йышып урынлаштырып бөтөп, уфф тип тын алайым тиһәң, киске аш мәле етеп килә. Тағы плитә тирәһендә ҡуласала әйләнгән тейендәй пыр туҙып өйөрөләһең...

Шуның менән эш бөттө, тип уйлайһығыҙмы, юҡ-юҡ әле, иң ҡыҙығы алда. Теге ҡуласала өйөрөлгән арала бәләкәс һалдатты баҡсанан алып ҡайтып өлгөрәһең. Тамаҡ туйғас, уйынарға ярай, тип һыпырылып урамға сығып йүгергән һалдаттар артынан, уйын яланына түгел, яу яланына оҙатҡандай булып хәүефләнеп ҡарап тороп ҡалаһың. Эштәрендә теүәлләгән арала туптың ниндәй көс менән тибелеп, даңғырлап ҡапҡаға килеп эләгеүенән ах та ух килеп ҡысҡырышҡан көр тауыштарҙың нимәне аңлатҡанын разведчик һиҙгерлеге менән тыңлайһың. Тауыштар көсәйеп йә киреһенсә, тынып ҡалыуына ҡарап, бинт, йода, зелёнканы әҙерләп, медсестралар посына баҫаһың. Иң хәтәре ошонда инде. Уйын яланынан төрлө йәрәхәттәр менән ҡайта һалдаттар, йә әҙ генә сыйылған, апаруҡ күгәреп ҡайтҡан осраҡтар ҙа була, иң ҡурҡынысы - ҡырҡылған һәм һынған яралар. Был осраҡта инде һалдатты тәүге ярҙам күрһәтеп, аталарының ашығыс ярҙамы менән госпиталгә оҙатаһың. Көндөң яртыһы шулай үтә. Уйнап туйғас, мыршылдай-мыршылдай өйгә эштәр әҙерләйбеҙ, шунан "отбойға" әҙерлек башлана. Беҙҙә ул, ғәҙәттә, 2 сәғәт тирәһе дауам итә. Шуға мин алдан уҡ команда бирәм. Инде ятырға тиһәң, йә асыҡтыра, йә һыуһата, йә эс ауырта, унан ҡалһа, шиғыр ятланмай ҡалған, һәм башҡа бик күп кисектергеһеҙ эштәр ҡалҡып сыға. Ниһайәт, һәр һалдат үҙ урынына ятып, тәмле йоҡоға тала...

Ә һинең эшең бөтмәй әле, алда төнгө ҡарауыл... Ни эшләмәк кәрәк, үҙем хыялландым ошондай уландарҙың бәхетле әсәләре булыу тураһында.

**Гүзәл МЫРҘАЕВА.**
**Баймаҡ районы.**

# ТӘРБИӘМ ДӨРӨҪМӨ ИКӘН?

**Балалар тураһында ине минең дә һүҙем. Мин әле йәш әсә. Йәш тигәс тә, 17 йыллыҡ стажым бар барлыҡҡа, әммә ләкин ҡайһы берҙә, балаларыма дөрөҫ тәрбиә бирәмме икән, тип уйландыра. Эргәтирәмдәге кешеләр ошондай икеләнеүҙәргә сәбәп биреп кенә тора. Шул турала гәзит уҡыусылар менән дә уртаҡлашайым әле.**

..."Баланың батшалығы - биш йәшкәсә", тигәнгә таянам. Ләкин бер көндө балалар баҡсаһындағы беҙҙең төркөмгә алты йәшлек баланы күтәреп алып килеүҙәрен күргәс, был инаныуыма икеләнеп ҡуйҙым да, был хәлгә үҙемсә баһа бирҙем: инде ошо йәшенәсә күтәреп йөрөтһәң, аҙаҡ елкәңдән төшөр микән был бала? Балаларҙы баҡсанан алырға килгәндә ата-әсәләрҙең уларҙы ахылдап-ухылдап үҙҙәре кейендереүҙәре лә аптырата. Үҙеңдән аша ҡарап торған йән киҫәгеңде кейендереп ултырсәле... Баланы артыҡ әпәләү йүнлегә килтермәгәнен тормошта аҙым һайын осратып торғас, минең аптырануҙарым урынлы, тигән һығымта яһап ҡуям.

...Әсәйҙәр байрамына барғайныҡ. Балалар байрам менән ҡотлап, беҙгә үҙ ҡулдары менән эшләгән бүләктәрен тапшырҙы. Ҡайһы бер әсәйҙәрҙең ҡотлауға яуап итеп улына йә ҡыҙына уйынсыҡ, йә шоколад тотторғанын күргәс, бәс, мин донъянан артта ҡалғанмынмы икән әллә, тип тағы бер аптыраным. Быны бит бүләк алмаған башҡа балалар күреп торҙо. Минең балам да, күҙенә йәш алып, ҡайҙа минең бүләк, тигән һымаҡ ҡарап тора. "Балам, бөгөн бит Әсәйҙәр байрамы, бүләк беҙгә генә тейеш", - тип кенә яуаплай алдым. Бына шулай, эскерһеҙ, ихлас хистәр урынына һин - миңә, мин - һиңә, тигән алыш-биреш килеп сыҡты. Ҡыуаныстан йымылдаған күҙ йәштәрең аша баланды ҡыҫып һөйөп, рәхмәт әйтеүҙән дә ҙурыраҡ яуап юҡтыр был мәлдә, тип үҙемде тынысландырам инде һаман да...

...Һәм тағы бер күренеш аптырата. Уландарыбыҙҙы ҡыҙҙарға ҡарата иғтибарлы, ихтирамлы, ипле мөнәсәбәттә булырға тип өйрәтәбеҙ. Ҡатын-ҡыҙ затынан булғандарға тырнаҡ менән дә сиртмәгеҙ, улар хисле була, уйламай әйтеп, күңелдәрен яралап ҡуймағыҙ, тип тылҡыған булам мин дә. Аталары улыбыҙҙы эшкә өйрәтеп, ир-егет өлгөһө бирергә тырыша, мин үҙ яғымдан үҙемсә әүәләйем... Әллә дөрөҫ, әллә юҡ, тигәндәй...

Ҡатын-ҡыҙға ҡарата мөнәсәбәт, тигәндән, бер апайҙың:"Улдарымды, ҡатындарығыҙҙы ҡаты тотоғоҙ, һелкетеп тә алығыҙ, тип өйрәтәм", - тигәненә лә аптырағайным әле. Икенсе бер танышымдың улына: "Шул кәнтәй ҡыҙҙар эргәһенә яҡын барма, ниңә шул кәнтәйҙәр менән уралаһың?"- тигәнен ишетеп, бөтөнләй һүҙһеҙ ҡалдым. "Һуң, һин үҙең дә ҡатындар затынан түгелме һуң?" - тинем уға саҡ иҫемде йыйып. "Булһа-сы, хәҙерге ҡыҙҙар тәртипһеҙ бит", - тигән яуап алдым. Иллә мәгәр иргә - ир тип, ҡатын-ҡыҙға - ҡатын-ҡыҙ тип ҡарауҙың башы тап ғаиләнән, үҙебеҙҙән башлана икәненә ошондай миҫалдарға ҡарап тағы бер тапҡыр инаныла...

Бына шулай, бала тәрбиәһе юҫығында иртәһен дә, кисен дә тынғы бирмәгән өҙөк-һурыҡ уйҙарым, икеләнеүҙәрем менән уртаҡлашып, дөрөҫлөккә яҡын булған яуап табырға маташыуым инде был яҙғандарым...

**Фирүзә ХӨСӘЙЕНОВА.**
**Күгәрсен районы.**

✓ *Дунай буйы башҡорттары боронғо союздаштары - мадъярҙар иленә тулҡын-тулҡын булып барып ҡушылған. Венгрия короле уларҙы үҙ ҡулы аҫтына бик теләп ала, сөнки башҡорт яугирҙарының даны тирә-яҡта билдәле була.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ - ЙӘНӘЙ,

## асылыбыҙ - көнбайыш башҡорттары

Ҡаҙан ханлығында йәшәүсе халыҡтар араһында XVI быуатҡа ҡараған рус документтарында можар тип исемләнгәне лә бар. Можар атамаһын йыш ҡына мишәр этнонимына тура килә тип тә яҙалар. Шул уҡ ваҡытта можар тигәндең мадъяр атамаһының бер аҙ үҙгәртелеп әйтелгән варианты булыуы хаҡында ла фараздар бар. Әммә көнсығыш мадъярҙары Волга буйында түгел, ә Дон йылғаһына яҡын ерҙәрҙә көн итә, уларҙың XV быуатта ла ошонда йәшәүе билдәле. Венгр монахы Юлиандың тап ошо мадъярҙар менән осрашыуын күҙаллап була. Быны уның сәйәхәт маршруты буйынса ла асыҡлап була. Юлиан тәүҙә Будапештан Константинополгә юллана, унан һуң карапта Ҡара диңгеҙ аша сығып, Аланияға барып етә. Ул артабан Волга үренә, Булғар ҡалаһына йүнәлә, тап ошо юлда боронғо ватандаштары һәм ҡәрҙәштәре менән осраша. Бында Дон (Танаис) һәм Волга (боронғо Этиль) йылғаларының бербереһенә ныҡ яҡынлашҡан урыны хаҡында һүҙ бара. Ни тиһәң дә, алдараҡ иҫкә алынған Dentumoger (Дон мадъярҙары) һәм легендар Hungaria Major ("ҙур йылға Этиль буйында") тип исемләнгән ике ил бары тик көнсығыш мадъярҙарының бер үк боронғо төйәге булыуына шик юҡ. Был ерҙәр хәҙерге Волгоград тарафтарында булған, тип фаразлау дөрөҫтәр.

Саксин ҡалаһында (хәҙерге Әстерханға яҡын ерҙәге ҡала) оҙаҡ йылдар йәшәгән ғәрәп сәйәхәтсеһе Әл Гарнати ошо ҡаланың айырым кварталдарында булғарҙар һәм суварҙар ҙа йәшәгән. Ә венгр монахы Юлиан Волга Булғарияһын мәжүсиҙәр батшалығы, тип атай, ә "сарациндар" (мосолмандар) йәшәгән Вела исемле ил унан көньяҡ-көнсығыштараҡ була. Ә был заманда булғарҙар күптән мосолманлыҡта булып, уларҙың Биләр ҡалаһы Волга (Итиль) буйында ҙур Ислам үҙәгенә әйләнгән була. Тимәк, Юлиан Волга Булғарияһының көньяҡ сиктәренә генә килеп еткән була, һәм, әлбиттә, ул сәйәхәт иткән ерҙәрҙә башҡорттар йәшәмәгән, ә башҡорттар тураһында башҡа бер кешеләрҙән алынған мәғлүмәттәрҙе килтергәндер, тигән фараздың ысынбарлыҡҡа тап килеүе бар.

Шулай ҙа боронғо мадъярҙарҙың тәү ватандарында йәшәгән заманда уҡ башҡа ҡәүемдәр менән тығыҙ бәйләнештә йәшәгәнен хәҙерге венгр теле бик асыҡ күрһәтә. Венгр телендә иран (фарсы), палеотөрки (булғар, сувар, хазар) телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәр байтаҡ. Әйтергә кәрәк, хәҙерге башҡорт теле һуңғараҡ осорҙа формалашҡан төрки телдәре төркөмөнә инә, шулай ҙа башҡорт һәм венгр телдәрендә уртаҡ тамырлы һүҙҙәр бар. Тик Булғар иленә сәйәхәт ҡылған Плано Карпини һәм Рубрук, үҙҙәренә тиклемге авторҙарға эйәреп, монгол яуы осорондағы (1230 - 1240 й.й.) Башҡорт иленең ҡасандыр үҙҙәре эҙләгән Magna Hungaria (Бөйөк Венгрия) булыуына ышана. Ошо хаҡта тикшеренеүсе В.П. Шушарин, венгр ғалимы Г. Вековиға һылтанып, былай яҙа: "Уларҙың көнсығыш мадъярҙары, Башҡорт иле һәм башҡорттар тураһындағы мәғлүмәттәре - монгол һарайы даирәләре менән аралашыу һөҙөмтәһе". Ысынлап та, монголдарға көнсығыш мадъярҙары (Волга-Итилдең түбәнге ағымында) һәм башҡорттар менән дә алышҡа инергә тура килә. Тарихсы С. Хәмиҙуллин яҙыуынса, монголдар башҡорттарҙы бачжигит, мадъярҙарҙы мачжарат тип атай, күрәһең, ошо ике ҡәүем кешеләрен улар бер үк халыҡ итеп ҡабул иткәндер. Инде күп быуаттар дауамында телдән төшмәгән башҡорт-венгр ҡәрҙәшлеге хаҡындағы мәғлүмәттәр тап ошо осорҙа яралған да инде. Шулай ҙа XIII быуат аҙағында уҡ был фекерҙе кире ҡаҡҡан шәхестәр ҙә була. Венгр хронисы Шимон Кезаи үҙенең "Гун ғәмәлдәре" ("Деяния гуннов") әҫәрендә (1282 - 1285 й.й.) бына ниндәй мәғлүмәт теркәп ҡуйған: "Скифия берҙәм ил, әммә ул өс төп короллеккә бүленә, исемләп әйткәндә: Башҡорт иле (Bascardia), Денция (Бенция), Магория (Мадьярия)".



Шулай ҙа венгр уҡымышлы заттары, шул уҡ монахтар алыҫ Башҡорт илендә үҙҙәренең боронғо ватанын табыу ниәтенән арынмай әле. Юлиан сәйәхәтенән һуң 90 йыл үтеүгә, Иоганка Венгр исемле икенсе бер монах, Плано Карпини һәм Рубрук отчеттарына ныҡ ышанып, Башҡорт иленә юллана. Ул ысынлап та Көньяҡ Уралға тиклем килеп етә, әммә бында тик башҡорттар ғына йәшәгәненә инанырға мәжбүр була. Ул Францисҡандар Ордены генералына бына шундай мәғлүмәт бирә: "Бөтөн Баскардияның дәүләт башлығын һәм уның ғаиләһенең күпселеген беҙ тулыһынса сарацин яҙығы менән зарарланған хәлдә таптыҡ... Беҙ, динебеҙгә өйрәтеүҙе йышайтҡас һәм сарацин ғалимдарына мөмкин булған барса ысулдар, һәм яҙмалар менән, һәм мөғжизәле күренештәр менән, һәм дәлилдәр менән, һәм миҫалдар менән уларҙың ҡануны ялған һәм мәжүси икәнен иҫбатлағас... улар, ярһып китеп, беҙҙе үлтерергә маташтылар. Беҙҙе тотоп алдылар һәм уҫал рәүештә, тимер менән бығаулап, төрмәгә яптылар, һәм беҙ... үлемебеҙҙе шатланып көттөк, әммә улар, татарҙарҙан ҡурҡып, быға ҡыйманылар. Сөнки татарҙар христиандарҙы ярата, ә уларҙы күрә алмай һәм эҙәрлекләй".

Венгрҙар X быуат башында Карпат тауҙары аша уҙып (йылъяҙмала был тауҙар Уғыр тауҙары тип исемләнә), Паннония территорияһына сыға. Күрәһең, уларға союздаш булған башҡорттар ҙа ошо хәрәкәттә ҡатнаша. Хәҙерге венгрҙар араһында енё һәм джармат (дьярмат) ырыуҙары вариҫтары булыуын башҡаса аңлатып булмаҫ ине. Әммә көнбайыш тарафтарына юлланған барса башҡорттар ҙа венгрҙар менән бергә китмәй: көнбайыш бәшнәктәре һәм башҡорттарының байтаҡ өлөшө Ҡара диңгеҙ буйҙарында, Дунай йылғаһы тамағында төпләнә. Был хаҡта рус йылъяҙмаларында ла, ғәрәп авторҙары китаптарында ла иҫкә алына. Бер ғәрәп сығанағында ошондай мәғлүмәт бар: "... булғар, рус, баджна, баджнак, башгурд диңгеҙе - ә былары төрөктәрҙең өс тоҡомо - Ниташ диңгеҙе ул". Ул заманда ғәрәптәр Ҡара диңгеҙҙе шулай атаған. Бындағы бәшнәк-башҡорт ханлығы 150 йыл дауамында тирә-яҡтағы ҡәүемдәргә хәүеф һалып, уларҙың бәғзеләрен вассалдары сифатында тота. Улар хатта Византия империяһының да ҡотон алып тора. Тарихи сығанаҡтарҙа 932 йылда баджнак, яджна, баджгурд һәм наукерда тип аталып йөрөтөлгән ҡәүемдәрҙең союздаш ғәскәре Византияға баҫып инеп, император Романдың 70 меңлек ғәскәрен тар-мар итеүе хаҡында мәғлүмәттәр бар. Улар хатта бер ни тиклем ваҡытҡа Константинополь менән Рим араһындағы юлдан бер кемде лә үткәрмәй, уны ябып ҡуйыуға өлгәшә.

Әммә XI быуатта бәшнәк һәм башҡорттар Ҡара диңгеҙҙең төньяҡ яры буйҙарынан ҡыпсаҡ-кумандар тарафынан ҡыҫырыҡлап сығарыла. Был тарафтарҙа йәшәгән башҡорттарҙың үҙҙәренең ырыуҙаштары - Венгрия короллегендә йәшәүсе ҡәрҙәштәре янына барып һыйыныуын фаразларға була. Тимәк, Дунай буйы башҡорттары боронғо союздаштары - мадъярҙар иленә тулҡын-тулҡын булып барып ҡушылған: тәүгеләре - йәнәй һәм юрматыларҙың бер өлөшө - мадъярҙарҙың көнбайышҡа хәрәкәтенә тәүҙән үк ҡушылһа, ҡалғандары тарихи сәбәптәр арҡаһында элекке ҡәрҙәштәре янына бер нисә быуатҡа һуңыраҡ килеп етә. Әлбиттә, Венгрия короле уларҙы, мосолман динендә булыуҙарына ҡарамаҫтан, үҙ ҡулы аҫтына бик теләп ала, сөнки башҡорт яугирҙарының даны тирә-яҡта күптән билдәле була бит.

Бында венгрҙар менән башҡорттарҙы бер нисек тә бутап булмай, телдәре лә, диндәре лә, хатта ойошоп йәшәгән ерҙәре лә башҡа. Ошо хаҡта ғәрәп авторҙарының ентекле мәғлүмәттәре тарихи сығанаҡтарҙа хәҙергә тиклем һаҡланып ҡалған.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Башҡорттар артҡа сигенмәй

Лейтенант Мансур Әминевтың 1-се эскадронына ла дошман ҡыҫымы шул тиклем көслө була, улар биләгән позиция өҫтөндә ут ҡойоно уйнай, беҙҙең яугирҙар бер аҙ артҡараҡ китеп торорға мәжбүр була. Тап шул саҡта дошман һалдаттары 294-се атлы полктың (командиры Гәрәй Нафиҡов) уң флангыһын урап үтә башлай. Был полктың һул флангыһы ла асыҡ ҡала: 106-сы уҡсылар бригадаһы командиры, беҙҙең дивизия йә иһә полк командирына хәбәр итеп тә тормайынса, үҙҙәре биләгән рубежды ҡалдырып китә. Һөҙөмтәлә полктың дошман ҡулсаһында тороп ҡалып, ҡамауға эләгеү хәүефе тыуа. 6 июлдә көн буйына ҡаты алыштар тынмай. Эскадрон командирҙары, капитан Шаһикамал Әлибаев, өлкән лейтенант Шәйхулла Сиреғолов, лейтенант Хөсәйен Мирсаяпов, өлкән лейтенант Никон Колесник үҙ эскадрондарын контратакаға күтәрә, дошман уты нисек кенә көслө булмаһын, биләгән позицияларын ҡалдырып китмәй. Беҙҙең яугирҙарыбыҙҙың контратакалары өлкән лейтенант Х.А. Ғиниәтуллиндың, лейтенант Бикмәтовтың батареялары уты менән көсәйтелә. Полк комиссары Хәйрулла Нурғәли улы Әхмәтов 4-се эскадрон позицияларында, яугирҙар араһында булып, улар менән бер сафта контратакаларҙа ҡатнаша. Был рядовой һалдаттар өсөн үҙе үк рухи таяныс булып тора. Полк командиры Гәрәй Нафиҡов алыш менән бик оҫта идара итә, артиллеристар менән даими бәйләнеште өҙҙөртмәй, кәрәк мәлендә резервта торған көстө ваҡытында ҡуллана белә. Әммә аяуһыҙ ҙур өҫтөнлөккә эйә булған дошман көстәре полкты ҡамап алыуға өлгәшә.

Шул мәлдә полковник Шайморатов хәл иткес саралар ҡуллана, полкты артиллерия уты менән ҡурсалау мөмкинлеген файҙалана, дивизияның сапер һәм химик ҡурсалау эскадрондарын алғы позицияларға ярҙамға ебәрә. Әммә көстәр тигеҙ булмағас, хәл ауырая бара. Тап ошо ваҡытта баштан уҡ резервта торған 313-сө атлы полкты (командиры Ғариф Дәүләт улы Макаев) ла ярҙамға ебәреү мөмкинлеге булмай: полк корпус командиры резервына саҡырылып, танк резервы менән бергә ҡаты һуғыш барған Урицкое - Александровка - Бибиково рубежына ебәрелгән була. Әммә ошо иң хәүефле мәлдә лә комдив Шайморатов баҙап ҡалмай, барлыҡ көстәрҙе йыйнап, яугирҙарын Малые Борки ауылы йүнәлешендә контратакаға күтәрә. Гәрәй Нафиҡов полкы ла ошо йүнәлештә һөжүм башлай. 7 июлдең таңына дошман ҡамауы өҙөлөп, 294-се атлы полк 275-се полк янына сыға. Корпус командованиеһы менән һөйләшеп килешелгәс, М.М. Шайморатов, дошмандың артабанғы атакаларын уңышлы кире ҡағыу маҡсатында яңы позицияларға күсеүҙе уңайлыраҡ тип таба. Дивизия Опухтино - Борки - Плехановка ауылдары рубежында оборона тотоуын дауам итә. Немецтар ҙа һөжүм итеүҙән туҡталып торорға мәжбүр ителә.

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***Күптәр балаһы башҡортса һөйләшмәгәнгә мәктәпте генә ғәйепләй ҙа ҡуя. Бында мәктәптең бөтөнләй ҡыҫылышы юҡ. Өйҙә балаларың менән башҡортса һөйләшмәйһең, аралашмайһың, тәрбиә бирмәйһең икән, улар телде белмәйәсәк.***

# ТОРМОШ ҮҘГӘРӘ, ТАЛАПТАР ҘА

## улар илебеҙҙең Төп Законында

**"Үҙемдең йәмғиәт өсөн ниндәй мөһим кеше икәнемде һайлауҙар һәм башҡа тауыш биреүҙәр ваҡытында ғына белеп ҡалам", - ти бер танышым. Шаярта, әлбиттә. Әммә һәр шаярыуҙа хәҡиҡәт тамсыһы барлығын да онотorға ярамай. Әле лә илдә Рәсәй Конституцияһына үҙгәрештәр индерелеп, ул ғәмәлдә ҡабул ителде, шулай ҙа халыҡтың фекерен дә иҫәпкә алырға булдылар һәм 1 июль тауыш биреү көнө тип билдәләнде. Әлбиттә, Конституция - ул илдең төп норматив-хоҡуҡи акты, йәмғиәттең үҫеш йүнәлешен билдәләүсе компас. Шуға күрә, уның ғәмәлдә ҡулланыла башлау-башламауы халыҡ ихтыярына бәйле һәм тауыш биреп, үҙенең һайлауын белдергәнгә тиклем йәмғиәттә етди аңлатыу эштәре алып барыла. Беҙ ҙә РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф БАЙҒУСҠАРОВҡа үҙебеҙҙе борсоған һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек.**

**Бөгөн, моғайын, ғәмһеҙҙәр һәм үтә битарафтар ғына Төп Законға индерелгән үҙгәрештәр һәм төҙәтеүҙәр хаҡында һөйләшмәй һәм бәхәс алып бармайҙыр. Ауылда булһынмы ул, ҡалаламы, социаль селтәрҙәрҙәме - ошо тема даими күтәрелә. Закон сығарыусы булараҡ, һеҙҙең ҡарашҡа, был үҙгәрештәрҙең әһәмиәте һәм мөһимлеге нимәлә?**

- Төп Закон һәр кем өсөн бик мөһим документ һәм уның һуңғы редакцияһы 1993 йылда ҡабул ителгәйне. Шунан һуң тормош бик ныҡ үҙгәрҙе, яңы талаптар барлыҡҡа килде. Беҙгә шуларҙың барыһын да иҫәпкә алып, ошо документҡа индереп, нығытып ҡуйыу кәрәк. Мин халыҡ менән күп осрашам, халыҡ араһында йөрөйөм, был эш пандемия ваҡытында ла туҡтаманы, телефон, интернет селтәрҙәре аша онлайн осрашыуҙар ҙа үткәреп торҙом. Күпселектә, әлбиттә, социаль мәсьәләләр борсой. Был йәһәттән нимә тиер инем: Конституцияға индерелгән үҙгәрештәрҙә пенсияның йыл һайын индексацияланыуы нығытыласаҡ. Халыҡ та: "Законда бит яҙылған, уны Конституцияға индереү кәрәкме?"- тип, ошо мәсьәләне асыҡлауҙы һорай. Эйе, кәрәк. Хатта Закон проектының тәүге вариантында ул "даими рәүештә" тип яҙылғайны, әммә даими - киң төшөнсә, ул ике-өс йылға бер тапҡыр ҙа үткәрелеүе мөмкин. Ә инде төп документта йыл һайын пенсияларға, пособиеларға, социаль түләүҙәргә индексация үткәрелеү нығытыла икән, ниндәй генә хәл-торошҡа ҡарамаҫтан, ул тормошҡа ашырылырға тейеш. Ошо хаҡтағы талап айырым ҡанунда ғына яҙыла икән, илдә көрсөк килеп тыуғанда, башҡа ғәҙәттән тыш хәл булғанда индексациялау туҡтатылып та тороуы мөмкин, әммә Конституцияға индерелгән икән, ул мотлаҡ башҡарыласаҡ. Һәм закон буйынса ул илдәге инфляция кимәләнән кәм булырға тейеш түгел. Шул уҡ ваҡытта, йыл һуңына эш хаҡының инфляциянан күберәк артыуы асыҡланһа, ошо артҡан күләмгә тағы ла индексация өҫтәләсәк. Миненсә, был бик мөһим, сөнки дәүләт үҙ өҫтөнә халыҡ алдында оло бурыс ала, һүҙ бирә, уның үтәлешенә гарант булып тора.

**Шул уҡ ваҡытта Төп Законда элек пенсияға сығыуҙың аныҡ ваҡыты билдәле һәм ул яҙылып ҡуйылғайны. Ә үҙгәрештәр индерелгәндән һуң был статья алып ташланды һәм пенсияға сығыу ваҡыты бөтөнләй күрһәтелмәй. Йәғни, бер нисә йылдан һуң уның ваҡытының тағы ла оҙайтылыу ихтималлығы ла юҡ түгел... Законда, әлбиттә, был мөҙҙәт яҙылған, әммә ул Төп закон түгел, ҡанунға үҙгәрештәр индереүе еңелерәк...**

- Мин һеҙҙән был һорауҙы беренсе тапҡыр ишетәм. Ундай хафаланыу булырға тейеш түгел, сөнки пенсия йәшен үҙгәртергә кәрәк икән, барыбер закон ҡабул итергә кәрәк буласаҡ. Уйлап ҡараһаҡ, пенсияға сығыу йәше Конституцияла уҙған быуаттың 30-сы йылдарында индерелә. Унан һуң нисәмә йылдар шул күрһәткес буйынса йәшәнек. Бында бит халыҡтың йәшәү кимәленең үҙгәреүе, ғүмер оҙайлығы һәм башҡа күрһәткестәр иҫәпкә алына. Мәҫәлән, ул ваҡытта ғүмер оҙайлығы 57-60 йыл булған. Хәҙер иһә 73 йыл.

**Ҡабул ителәсәк Төп Закондағы тағы ла мөһим мәлдәргә урап ҡайтайыҡ...**

- Тел мәсьәләһе лә бик мөһим. Төп Законда бөтә Рәсәй территорияһында рус теле дәүләт теле буласаҡ. Шул уҡ ваҡытта киләһе пунктта уҡ, республикалар үҙҙәренең дәүләт телдәрен булдырырға хоҡуҡлы, тип айырым пункт итеп яҙып ҡуйылды, сөнки дәүләттең бурысы - милли телдәрҙе лә һаҡлауға, үҫтереүгә булышлыҡ итеү. Тағы ла шуныһы мөһим: дәүләт, муниципаль органдарҙа һәм башҡа ойошмаларҙа субъекттарҙың дәүләт телдәре рус теле менән бер рәттән ҡулланылырға тейеш. Был улар араһында береһе өҫтөнөрәк, икенсеһе кәмерәк тигән ҡараш булмаҫҡа тейеш, тигәнде аңлата.

**Рус теле менән бер рәттән субъекттарҙың дәүләт телдәрен дә ҡулланыу мөмкинлеге тураһындағы статья Конституцияла электән дә бар ине, әлбиттә. Һорауым саҡ ҡына икенсерәк: быға тиклем рус теленең дәүләт теле статусы булманы. Хәҙер ул ошо статусты алды, тимәк, закон буйынса, субъекттарҙың дәүләт телдәре лә, рус дәүләт теле лә бер тиң. Әммә мәғариф системаһын алып ҡараһаҡ, рус әсә теле лә, рус дәүләт теле лә ФГОС буйынса уҡытыу планының инвариатив өлөшөндә урын ала, ә субъекттарҙың дәүләт телдәре - вариатив өлөштә. Уларҙың тиңлеге Төп законда яҙылһа ла, ғәмәлдә тиңлек юҡ бит: субъекттарҙың дәүләт теле сәғәттәр булһа уҡытыла, сәғәттәр булмаһа, йәки ата-әсәләр, уҡытыусылар коллективы һайламаһа - уҡытылмай, факультатив булып ҡына ҡала...**

- Телдәр тураһында Закон әҙерләгәндә республикала эшсе төркөм төҙөлдө, уға мин дә кергән һәм республиканың мөнәсәбәтен белдерергә тырыштыҡ. Тәүге вариантта ул факультатив булырға, ФГОС-ҡа инергә тейеш түгел тип яҙылғайны. Минең шәхси фекерем: ул ФГОС-та, йәғни мотлаҡ уҡытылған предметтар рәтендә булырға тейеш, тинем. Икенсенән, балаларҙан йыл һайын ғариза яҙҙыралар ине. Законға уны үҙгәртеп, баҫҡыстар буйынса ҡалдырҙыҡ. Йәғни улар ике тапҡыр ғына ғариза яҙа: башланғыс синыфҡа килгәндә, урта синыфта. Шулай уҡ фондтар булдырыу мәсьәләһен дә ҡараныҡ. Беҙҙең тәҡдимдәр иҫәпкә алынды, милли төбәктәрҙең дәүләт телдәре ФГОС исемлегенә индерелде.

Рус теле илебеҙҙең теле, дәүләт теле булараҡ мотлаҡ уҡытылырға тейеш. Республикалар Рәсәй составында, шуны онотorға ярамай, шулай булғас, уларҙың дәүләт телдәрен мәжбүри уҡытырға кәрәкмәй. Ә кем теләй, уларға балаларын әсә телендә лә, дәүләт теле булараҡ та уҡытыуға бер ниндәй ҡаршылыҡ юҡ. Күптәр балаһы башҡортса һөйләшмәгәнгә мәктәпте генә ғәйепләй ҙа ҡуя. Бында мәктәптең бөтөнләй ғәйебе юҡ. Өйҙә балаларың менән башҡортса һөйләшмәйһең, аралашмайһың, тәрбиә бирмәйһең икән, улар телде белмәйәсәк. Мәҫәлән, минең балаларым 39-сы лицейҙа уҡыны, башҡорт теле аҙнаһына бер тапҡыр ғына инде, әммә улар бит башҡортса һөйләшә, тарихты белә, сөнки өйҙә тәрбиә башҡорт телендә алып барыла. Шундай миҫалдар ҙа килтерә алам: юғары вазифалар биләгән башҡорттарҙың балалары араһында ла башҡортса бер ауыҙ һүҙ белмәгәндәре бар.

**Ике дәүләт теле лә барлыҡ власть органдарында ла тиң ҡулланылырға тейеш, тинегеҙ. Бөгөн, бер кемгә лә сер түгел, тормошобоҙ яйлап цифрлы өлкәгә күсеп бара, күп тармаҡтарҙа хеҙмәтләндереү интернет аша алып барыла. Әммә Госуслуги, банктар һәм башҡа хеҙмәттәрҙә хеҙмәтләндереү бары тик рус телендә генә башҡарыла. Һәм бында ике телдең тиңлеге тураһында һүҙ алып барып булмай. Мәҫәлән, мин Госуслуги аша ниндәйҙер документ алырға башҡортса һорау ҡалдырырға теләйем икән, быны эшләй алмайым, тимәк, минең хоҡуғым боҙола. Республика хеҙмәттәре быны, бәлки, эшләр, әммә федераль органдарҙың республика буйынса идаралыҡтары, бүлексәләре менән нимә эшләргә?**

- Республикала БР халыҡтары телдәрен үҫтереү буйынса терминологик комиссия бар, ул даими эшләргә, дәүләт телдәренең ҡулланылышы законға ярашлы алып барыламы, граждандарҙың хоҡуҡтары боҙолмаймы, юҡмы икәнен тикшереп торорға тейеш. Юлда йөрөгәндә лә бик күп ерҙәрҙә башҡортса тәржемәләрҙең хаталы булыуын күрәм. Был хаталарҙы төҙәтеү ҙә ошо комиссияның бурысы. Һеҙҙең һорауығыҙ менән дә килешәм, хеҙмәтләндереү республиканың дәүләт телдәрендә алып барылырға тейеш. Комиссияға был фекерҙе еткерермен. Әгәр ҙә федераль органдарҙың урындағы ойошмалары был талаптарҙы үтәүгә ҡаршы икән, мәсьәләне шул уҡ закондың үтәлешен контролдә тоторға бурыслы комиссия күтәреп сығырға хоҡуҡлы. Әле беҙгә, депутаттарға, ундай мөрәжәғәт, тәҡдим менән сыҡҡандары юҡ. Тимәк, улар уйлауынса, барыһы ла һәйбәт.

**Конституцияға индерелгән үҙгәрештәрҙән тағы ниндәй әһәмиәтле мәлде билдәләр инегеҙ?**

- Дәүләт Думаһына Президент вәкәләтенең бер өлөшө бирелә, йәғни парламент яңы Хөкүмәт ағзаларының кандидатураһын раҫлай. Был нимәне аңлата: халыҡ үҙе һайлаған депутаттары аша ошо кандидаттарҙы раҫлауҙа йәки кире ҡағыуҙа ҡатнаша ала. Минең шәхси фекеремсә, беҙҙе бит халыҡ һайлап ҡуйҙы, ҡанундар сығарыу өсөн вәкәләт бирҙе. Әммә Хөкүмәт ағзаларын һайларға тигән вәкәләткә эйә түгел инек. Халыҡ яңы Конституция биргән хоҡуҡтар буйынса ошо вәкәләттәрҙе ҡулланырға тейешле депутаттар корпусын яңынан һайлаһын, тигән тәҡдим дә булғайны, әммә ул үтмәне. Миненсә, шулай дөрөҫөрәк булыр ине. Был вәкәләтте ябай ғына итеп аңлатҡанда, шул: әгәр депутаттар Хөкүмәт вәкилдәрен раҫлаһа, уларҙан талап та итә аласаҡ. Әлегә ваҡытта беҙ уларҙан бик һорай, талап итә алмайбыҙ, сөнки уларҙы ил Президенты раҫлай ине. Улар парламент алдында халыҡ өсөн эшләйәсәкбеҙ, тип һүҙ бирһә, талап итеүе лә, халыҡтың үҙ депутаттары аша министрҙарға талабын еткереүе лә еңелләшәсәк, тип уйлайым.

**Шул уҡ ваҡытта ундағы бер статья депутаттарҙы алдан киҫәтеп тә ҡуя бит: әгәр өс тапҡыр ҡаршы тауыш бирһәгеҙ, ил Президенты парламентты таркатырға хоҡуҡлы, тип...**

- Парламентта эш нисек ойошторолған: шундай аңлашылмаусылыҡтар, фекер айырмалыҡтары килеп сыға икән, шунда уҡ эшсе төркөм төҙөп, ул мәсьәләләрҙе һөйләшеүҙәр өҫтәле артында хәл итәбеҙ, булған тәҡдимдәрҙе ҡарап һәм дөйөмләштереп, бер фекергә киләбеҙ. Хөкүмәт ағзаларын раҫлау ҙа шулай булыр тип уйлайым. Кемгәләр ҡаршы булғанда яңы кандидатура тәҡдим итәләр йәки үтмәгән кандидатура менән һөйләшкәндән һуң, ул бер йыл эсендә шундай-шундай эштәрҙе эшләргә вәғәҙә бирә, тигән һынау ваҡыты менән килешеүгә киләләр. Беҙ бит халыҡ өсөн эшләйбеҙ һәм мәсьәләләрҙе килешеп хәл итергә тейешбеҙ. Әлбиттә, халыҡты уйламаһаң, аяҡ терәп ҡарышырға ла мөмкин. Шуға, миненсә, һәр ваҡыт ҡара-ҡаршы ултырып һөйләшергә, диалогтар ҡорорға, уртаҡ фекергә килергә кәрәк. Шулай уҡ тотош исемлеккә түгел, һәр кандидатура өсөн айырым тауыш биреләсәк, шуға эш парламентты таратыуға тиклем барып етмәҫ, тип ышанам.

**Һәр төбәк үҙ депутаттары аша үҙ кешеһен, йәғни үҙ республикаһы, крайы, округына файҙа килтерерлек кешене Рәсәй Хөкүмәтенә тәҡдим итә аламы?**

- Унда тауыш биреү күпселек менән бара. Барлығы 450 депутат, ниндәйҙер төбәк үҙ кешеһен үткәрергә теләһә, 230 кеше менән һөйләшеп килешергә кәрәк була. Әлбиттә, беҙ республика халҡын кандидаттар менән таныштырасаҡбыҙ, уларҙың фекерен беләсәкбеҙ. Әгәр халыҡ кемдеңдер кандидатураһына ҡаршы булһа, һайлаусыларҙың фекерен, мәнфәғәтен яҡлауҙы күҙҙә тотасаҡбыҙ.

✔ *Был күптән кәрәк ине, сөнки сер түгел, күп чиновниктар үҙ илебеҙҙә эш боҙоп, сит илгә сығып ҡаса һәм шунда рәхәтләнеп йәшәй. Бындай чиновник, әлбиттә, үҙенең ерен, үҙенең халҡын уйламаясаҡ.*



# ҮҘГӘРӘ,

## сағылыш таба



**Конституцияла федераль территориялар булдырыу тураһында статья бар. Ул территориялар ниндәй буласаҡ һәм нимәне аңлата?**

- Улар әле лә һәр бер илдә һәм беҙҙә лә бар. Уларға, мәҫәлән, оборона маҡсатындағы федераль ерҙәр инә. Шул уҡ ябыҡ территориялар бар. Улар ҙа федераль ерҙәр тип һанала. Улар булған һәм буласаҡ һәм ихтыяж булғанда ғына өҫтәмә рәүештә булдырыласаҡ. Шулай уҡ урмандарҙың да бер өлөшө федераль ҡармаҡта, әммә улар бит барыбер республикала ҡала. Ундай ерҙәр күп һәм хатта халыҡ уларҙың муниципалитеттыҡымы, республиканыҡымы, федераль ерҙәрме икәнен дә белмәй. Барыбер шул ерҙән йөрөй, шунда йәшәгән, йәшәй. Уларҙың төбәктәргә файҙаһы нимәлә: федераль төбәк булғас, улар федераль кимәлдә финанслана, төҙөләштәр, төҙөкләндереү өсөн аҡса федераль каналдарҙан килә. Минеңсә, республикаға өҫтәмә аҡса килә икән, ул бик һәйбәт. Кешегә республика ҡаҙнаһынан түгел, ә федераль ҡаҙнанан эш хаҡы түләйҙәр икән - был да һәйбәт. Унда бит беҙҙең халыҡ эшләй. Һалымдар республика бюджетына күсә. Ә был инде республика мәнфәғәтендәге юлдар, төҙәләштәр, ремонт эштәренә тотонола.

**Тағы бер уйландырырлыҡ урын: беҙ бит бығаса халыҡ-ара хоҡуҡи акттарҙың өҫтөнлөклө булыуына өйрәнгәнбеҙ, хатта, Европа судына барып етәсәкбеҙ, тип тә эре сирттерәбеҙ. Әлбиттә, Төп Законда сит илдәрҙең Рәсәй Конституцияһына ҡаршы килгән ҡарарҙары эргәһендә Рәсәй закондарының өҫтөнлөгө тураһында әйтелгән әйтелеүен. Шул турала ентеклерәк аңлатмаһығыҙмы?**

- Бында Рәсәй граждандарының хоҡуҡтарын боҙоусы ҡарарҙар тураһында һүҙ бара һәм был статьянан ҡурҡырға ярамай. Мәҫәлән, әгәр сит илдә кейәүгә булған ҡатын-ҡыҙ балаһы менән айырылып ҡайтһа, сит ил закондары буйынса баланы тартып алып, атаһына биреүҙәре мөмкин. Был осраҡта Рәсәй гражданының хоҡуғы боҙола һәм Конституция суды ошо хаҡта ҡарар сығарһа, сит ил ҡарары илебеҙҙең Төп Законына ҡаршы килә икән, сит ил закону түгел, ә Рәсәйҙеке өҫтөнлөклө буласаҡ. Был, минеңсә, бик дөрөҫ. Башҡа илдәрҙә ундай законд бар һәм ул тап ил граждандарының хоҡуғын яҡлай ҙа инде. Беҙ ҙә үҙебеҙҙең граждандарҙың хоҡуҡтарын яҡларға һәм һаҡларға тейешбеҙ.

**Төп Законға илһөйәрлек тәрбиәләү буйынса ла яңы статья индерелгән...**

- Илебеҙҙә илһөйәрлек рухы тәрбиәләү менән бер рәттән, тарихи дөрөҫлөк мәсьәләһе лә алға ҡуйыла, сөнки, үкенескә күрә, һуңғы ваҡытта, айырыуса сит илдәрҙә, улар беҙҙең йәштәргә лә йоғонто яһай. Мәҫәлән, Бөйөк Еңеүҙә СССР-ҙың, Рәсәйҙең өлөшө ҙур түгел, тигән аңлатыу алып барыла һәм киң тарала. Беҙҙең ата-бабаларға ҡуйылған һәйкәлдәр емерелә, ҡәберлектәр юҡҡа сығарыла. Был, әлбиттә, дөрөҫлөккә тап килмәй: фашизмды беҙҙең ата-бабаларыбыҙ еңеп сыҡты. Быны беҙҙең балаларыбыҙ ғына түгел, бөтөн ил, бөтөн донъя белергә һәм танырға, тарихи дөрөҫлөк балаларыбыҙҙы тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнарға тейеш.

**Әммә шул уҡ ваҡытта бындай хәлдәр үҙебеҙҙә лә күҙәтелә: тарих дәреслеген алып ҡараһаҡ, унда элек барлыҡ ҡаҙаныштарҙы совет халҡы яулағайны, хәҙер - Рәсәй граждандары йәки рус халҡы. Ә бит хәҡиҡәт бөтөнләй икенсе: Рәсәй генә түгел, хәҙер айырым йәшәгән БДБ дәүләттәре халыҡтарының да илебеҙ яҙмышына индергән өлөшө баһалап бөткөнөҙ. Был хатаны төҙәтеү өсөн яңы тарих дәреслектәре лә кәрәк...**

- Һеҙҙең менән килешәм. Ни өсөн шулай килеп сыҡты һуң? Бығаса тиклем уҡыу әсбаптарын һәр ойошма яҙа ла, Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығына тәҡдим итә йәки һата һәм улар артабан субъекттарға таратыла ине. Беҙ тарихты боҙоп күрһәтеү күренештәре менән килешмәнек һәм уҡыу әсбаптарын лицензиялы ойошмалар ғына сығара алыуы тураһында закон ҡабул иттек. Ул закон көсөнә инде. Киләсәктә ундай тарихи хәҡиҡәтте боҙған дәреслектәр булмаҫ, яңы тарих дәреслектәре тарихты тулыһынса асып күрһәтер, тип ышанам.

**Тағы ниндәй төҙәтеүҙәрҙә, үҙгәрештәрҙә билдәләп китерһегеҙ?**

- Тағы бер мөһим мәл: чиновниктарҙың, президент булһынмы, депутаттармы, министрҙармы, субъекттар башлыҡтарымы - ғөмүмән, был категорияға ҡараусыларҙың исемлеге бар - сит ил гражданлыҡтары, йәшәүгә хоҡуҡтары һәм сит илдәрҙә иҫәптәре булмаҫҡа тейеш. Был күптән кәрәк ине, сөнки сер түгел, күп чиновниктар үҙ илебеҙҙә эш боҙоп, сит илгә сығып ҡаса һәм шунда рәхәтләнеп йәшәй. Бындай чиновник, әлбиттә, үҙенең ерен, үҙенең халҡын уйламаясаҡ, ул тиҙерәк сит илгә сығып китеүен һәм шунда матур итеп, теттереп йәшәүе тураһында хыялланасаҡ. Әлбиттә, ҡайһы бер чиновниктар был төҙәтеүгә ҡаршы, ә минең иң ныҡ ҡыуанғаным ошо статья булғандыр, моғайын. Ошоноң буйынса сығыш та яһаным.

Беҙҙең халыҡ өсөн тағы нимә мөһим: ғаилә темаһына килгәндә, үкенескә күрә, сит илдәрҙә генә түгел, хатта Рәсәйҙә лә бер енес вәкилдәре араһында ҡоролған ғаиләләр бар. Беҙҙә борон-борондан традицион: ир - атай, ҡатын - әсәй булған ғаилә культы һаҡланған. Ғаилә ҡатын менән ир кешенең союзы. Беҙ ҙә йәштәргә шуны һеңдерергә тейешбеҙ. Һәм ошо турала Төп Законға ла яҙылып ҡуйылды. Сил илдәрҙән килгән мәҙәниәт ил территорияһына инеп бара, хатта традицион булмаған ориентация вәкилдәре үҙҙәренең демонстрацияларын үткәрергә уйлай. Был беҙҙең илебеҙгә лә, халҡыбыҙға ла ят күренеш.

Шулай уҡ үҙгәрештәр балалар темаһына ла ҡағыла. Балалар, уларҙы тәрбиәләү, балаларҙы үҫтергәндә ғаиләгә ярҙам итеү, шулай уҡ етем ҡалған балаларҙы аяҡҡа баҫтырыу - дәүләтебеҙҙең иң мөһим бурыстарының береһе булырға тейеш һәм Конституцияла нығытылып, шундай кимәлгә күтәрелде лә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлеге ваҡытта Төп Закон бөтөн процедураларҙы, Конституция судының тикшереүен үтеп, ҡабул ителгән һәм үҙ көсөнә инергә лә мөмкин ине. Әммә Рәсәй Президенты Владимир Путин халыҡ үҙ һүҙен әйтмәй тороп, уның үҙ көсөнә инмәйәсәген белдерҙе. "Мин был ҡарар менән тулыһынса килешәм, сөнки бында төп һүҙ - халыҡ һүҙе. Коронавирус хәүефе һөҙөмтәһендә тауыш биреү 25 июндән 1 июлгә тиклем бара. Мин халыҡтың - хуплаймы ул, хупламаймы - килеп тауыш биреүен һорар инем, сөнки ҡайһы берәүҙәр, Законды ҡабул итеү-итмәү беҙҙән генә тормай бит ул, тигән ҡараштә. Әгәр халыҡ фекеренән тормаһа, тауыш биреү үткәрелмәҫ, шунда уҡ көсөнә инер ҙә ҡуйыр ине. Халыҡ нисек әйтә - шулай буласаҡ. Ә инде халыҡ ыңғай тауыш биргән осраҡта, Төп закон беҙҙең балаларыбыҙға, ейәндәребеҙгә хеҙмәт итәсәк", - тип халыҡты тауыш биреүҙәрҙә әүҙем ҡатнашырға саҡырҙы Зариф Закир улы.**

Зәйтүнә ӘЙЛЕ
әңгәмәләште.

---

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

*Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ*



# ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Тарихи документтар ни һөйләй?

Башҡорт сословиеһына күсеүсегә аҫабалыҡ хоҡуғы бирелеп, община ерҙәрен һатыу йәиһә ҡуртымға биреүҙә ҡатнашыу, ошонан үҙенә тейешле килем алыу мөмкин булыр ине. Әммә татар, мордва, удмурт, мари типтәрҙәренә һәм мишәр припущенниктарына ғына түгел, башҡорт типтәрҙәренә лә башҡорт аҫаба ерҙәренә хужа булыу мөмкин булмай. Бындай осраҡтар үтә һирәк булып, башҡорт аҫабаларының етем припущенник балаһын уллыҡҡа алыуы йәиһә кемдеңдер ер хужаһының тол ҡатынына өйләнеүе менән генә бәйле. 1841 йылда теркәлгән 72 666 мишәрҙең 4,8 процентының аҫабалыҡ хоҡуғы була тороп та, улар башҡортлоҡҡа күсеү тураһында уйламай, һәм бының уларға һис бер кәрәге булмаған.

Өсөнсө фактор. Көнбайыш Башҡортостанда этник-ара процестарға дин йоғонтоһо көслө була. Башҡорттар һәм татарҙар бер үк мосолман кешеләре булғас, уларҙың тығыҙ аралашыуы өсөн дини ҡаршылыҡтар булмай. Ярым күсмә тормош алып барыусы аҫабалар менән сағыштырғанда, ултыраҡ тормошҡа күскән көнбайыш башҡорттарының ижтимағи тормошона Ислам тәрәнерәк үтеп инә. Уҡымышлы дин әһелдәренең татар сығышлы булыуы ла Бөгөлмә һәм Минзәлә башҡорттарының татар ассимиляцияһына бирелеүендә ошо факторҙың мөһим роль уйнауын раҫлай.

Дүртенсе фактор. Көнбайыш Башҡортостандың дүрт өйәҙе башҡорттарының татарҙар менән аралашыуы уларҙың үҙ дәүләтселеге бөтөнләйгә булмаған шарттарҙа бара. Һуңынан ошо өйәҙҙәр (Сарапул өйәҙенән башҡа) Татарстан Республикаһы составына индерелеп, унда йәшәүсе башҡорттар үҙҙәренең этник үҙаңын тулыһынса алмаштыра.

Мәҫәлән, ТАССР составына ингән Бөгөлмә өйәҙендә ваҡытында башҡорт-татар нисбәте 0,35 : 2,84 булһа ла, сәйәси фактор ошо өйәҙ башҡорттарының тулыһынса татарлашыуына килтерә. Башҡа төбәктәрҙә этнос-ара бәйләнештәрҙең бик интенсив булыуына ҡарамаҫтан, этник ассимиляция күҙәтелмәй. Бәләбәй һәм Бөрө өйәҙе башҡорттарының теле ассимиляцияға дусар булһа ла, улар үҙҙәренең этник үҙаллылығын һаҡлап ҡала. Пермь губернаһы Уса өйәҙенең 28 ауылында йәшәүсе ғәйнә башҡорттары, татарҙар һәм фин телле халыҡтар менән аралашып, этник яҡтан ҡатнаш мөхиттә йәшәп, тел яғынан ассимиляцияға бирелгән хәлдә лә, үҙҙәренең этник асылын һаҡлап ҡалған. Әйтелгәндәрҙән тик бер һығымта эшләп була: Татарстан һәм Удмурт республикалары составына индерелгән элекке Бөгөлмә, Минзәлә, Алабуға һәм Сарапул өйәҙҙәре башҡорттарының этник ассимиляцияланыуына хәл иткес социаль факторҙар менән бер рәттән, билдәле ижтимағи-сәйәси шарттар, атап әйткәндә, баҫмаларҙың бер телдә генә сығарылып, мәктәптәрҙә уҡытыуҙың татар телендә алып барылыуы сәбәп була.

Бишенсе фактор. Этник-ара процестарға демографик фактор, йәғни бер этностың һаны арта барып, икенсеһенең кәмеүе һиҙелерлек йоғонто яһай.

1795 йылғы V ревизия мәғлүмәттәре Ырымбур губернаһының этник яҡтан ҡатнаш ауылдарында башҡорттарҙың татар һәм типтәрҙәргә ҡарағанда байтаҡҡа күберәк булыуын күрһәтә.

**1795 йылда ҡатнаш ауылдарҙа башҡорт, типтәр һәм татарҙарҙың һаны**

| № т/б | Өйәҙҙәр | Халыҡ һаны һәм өлөшө | | | | | | Татар һәм типтәрҙәрҙең проценты |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | башҡорттар | | типтәрҙәр | | татарҙар | | |
| | | абс. | % | абс. | % | абс. | % | |
| 1. | Верхнеуральск | 18 847 | 98,4 | 161 | 0,9 | 139 | 0,7 | 1,6 |
| 2. | Бәләбәй | 17 280 | 66,5 | 6 360 | 24,5 | 2 343 | 9 | 33,5 |
| 3. | Бөрө | 20 504 | 87,1 | 2 075 | 8,8 | 960 | 4,1 | 12,9 |
| 4. | Бөгөлмә | 2 417 | 38,8 | 2 209 | 35,5 | 1 604 | 25,7 | 61,2 |
| 5. | Боғорослан | 444 | 90,8 | 31 | 6,3 | 14 | 2,9 | 9,2 |
| 6. | Быҙаулыҡ | 1 115 | 100 | - | - | - | - | - |
| 7. | Минзәлә | 17 840 | 72 | 4 528 | 18,3 | 2 410 | 9,7 | 28 |
| 8. | Ырымбур | 22 188 | 100 | - | - | - | - | - |
| 9. | Стәрлетамаҡ | 27 129 | 89,3 | 1 696 | 5,6 | 1 544 | 5,1 | 10,7 |
| 10. | Троицк | 14 449 | 97,8 | 35 | 0,2 | 298 | 2 | 2,2 |
| 11. | Өфө | 8 409 | 67,8 | 1 392 | 11,2 | 2 612 | 21 | 32,2 |
| 12. | Силәбе | 10 069 | 100 | - | - | - | | - |

(Дауамы бар).

**✓ Ошо ҡиәфәтендә ул ҙурыраҡ та, дәһшәтлерәк тә күренә ине. Һиҫкәнгән айыу туп-тура миңә ҡарап тора. Хатта ҡурҡыныс булып китте. Башымдан: "Бөттө былай булғас, һунар барып сыҡманы", - тигән үкенесле уй үтеп китте.**





*Иҙрис НОҒОМАНОВ*

# ҺУНАРСЫ ЯҘМАЛАРЫ

## АЙЫУ ҺОЛОНО ЛА ЯРАТА

Һуңғы йылдарҙа ауыл тирәһендә айыу нәҫеле күбәйеп китте. Был уға һунарҙың тыйылыуынан киләләр. Емешеләгә, башҡа уңышы менән һығылып торған йомарт көҙ етә башлаһа, йыртҡыс, кешенең хәләл мал-тыуарынан тыш, башағына көсө етмәйенсә йығылып ятырға әҙер һоло баҫыуҙарына ла һиҙелерлек зыян килтерә. Тайыш табан эйәләшеп алған урындарҙан йүнле иген йыйып алырмын тип өмөт итмә. Баҫыуҙың ышығыраҡ, аулағыраҡ мөйөшөн һайлап, ул һоло һөтләнә башлағандан уҡ тәләфләргә тотона. Йыш ҡына кисен һин дә мин ултырып ҡалған ашлыҡ таң атыуға аяуһыҙ тапалып иҙелгән килеш ерҙә лыпым ята. Ул һабаҡтарҙы инде бер ниндәй ҙә комбайн йыйып ала алмаясаҡ. Уңыш юғала, йән әсей. Өҫтәүенә, айыу ошо тапалған ашлыҡ араһында һөрөлгән сәйер һуҡмаҡтар һалып бөтә. Шул рәүешле уның ашауына ҡарағанда тәләфләп әрәм итеүе күпкә артығыраҡ зыян килтерә.

Ғәҙәттә, уңыш мул йылдарҙа айыу малға теймәй. Ә һуңғы осорҙа ошо ҡағиҙә йыш боҙола: уңыш та бар, мал да тәләфләнә. Быныһы ла, минеңсә, йыртҡыстарҙың һаны самаһыҙ артыуына бәйлеләр: күберәк йәнгә ашау ҙа күберәк талап ителә. Йәнә лә, иттән бер тапҡыр ауыҙ иткән айыу артабан емеш-еләк, һоло менән генә мөрхәтһенмәйәсәк. Ит ашап өйрәнгән януарҙан уны юҡ итеп кенә ҡотолорға мөмкин. Башҡа юлы юҡ.

Баҫыу ситтәрен өйөрөлтөп сабырға төшкәндә айыу йыҡҡан һыйыр түшкәһен күреп ҡайттым. Януар ҡорбанын һоло баҫыуы эсендәге ҡулҡыла һағалап ятҡан ине. Мин уның ғәйрәтенә хайран ҡалдым. Ете йөҙ килограмм самаһы тартҡан һыйырҙың ул тәүҙә бер нисә ҡабырғаһын һуғып һындырған, аҙаҡ мейеһен сәсрәтә һуҡҡан. Ике киҙәнеүҙә һыйырҙы йығып ҡара! Ҡот осҡос көс эйәһе! Үҙең күрмәйенсә тороп, быны күҙ алдына килтереүе ҡыйын.

"Күр ҙә тор, былай барһа, иген өлгөрөп яҫмаларға һала башлағансы әлеге майҙандың яртыһы тапалып бөтәр". Башыма килгән тәүге уй ошо ине. Ни өсөн тигәндә, хәҙер үләкһә еҫенә ошо тирәнең барлыҡ айыуҙары, айыуҙарынан башҡаһы ла һеперелеп йыйыла башлаясаҡ. Ә уларға һинең һолоң бар ни, юҡ ни - үҙ тамаҡтары туйһа, булды. Әйтергә кәрәк, йәтеш урынды оҡшатып, унда эйәләшкән тайыш табанды биҙҙереүе анһат эш түгел. Быны тик мылтыҡ ярҙамында ғына башҡарып була. Хәйер, әлеге урындан биҙгән хәлдә лә, ныҡыш януар барыбер был төбәкте бөтөнләйгә ташлап китмәйәсәк.

Мылтыҡ тигәндән, ә ниңә самалап ҡарамаҫҡа. Атай-олатайҙарым борондан айыуға һунар иткән. Айыу алған - дан алған. Дөрөҫ, ҡулға йыртҡысты атыуға рөхсәт ҡағыҙы төшөрөүе еңелдән булмаҫ, быныһын яҡшы беләм. Беҙҙә бит шулай: януар көн аша тип әйтерлек йә башмаҡты, йә һауын һыйырҙы йығып, зыян өҫтөнә зыян килтерә, ә уның үҙенә тейергә ярамай. Яраған хәлдә лә, лицензия артынан ҡырҡ тупһа тапарға, һунар эшендә бер ни аңламаған йөҙ түрә алдында кәпәс һалып инәлергә кәрәк. Шунһыҙ һис килеп сыҡмай. Ҡиммәтле ваҡыт ҡулдан ысҡына, кәйеф төшә, теләк һүрелә. Ә айыухан ағайыңа шул ғына кәрәк, ул яуызлыҡтарын ҡылып, этлек эшләүен дауам итә. Уға рөхсәт тә, ҡағыҙ ҙа кәрәк түгел. Әйткәндәй, бер заман бүре менән дә шул уҡ хәл булманымы ни? Булды бит. "Урман санитарына" ирек биреп үрсеттек тә, хәҙер ҡотола алмайбыҙ. Хөкүмәт премияһын бирә, башҡаса ла дәртләндереп ҡарай, әммә һоро үләт һаны артҡандан-арта. Бүре хәҙер самаһыҙ күп, урмандағы булған йәнлекте ҡырыпһеперә генә. Айыу менән дә шул уҡ хәл ҡабатланмаҫ тип кем әйтә ала?

Уйланып йөрөнөм дә, кискелеккә рөхсәтһеҙ-ниһеҙ сыҡтым да киттем. Ете төн уртаһында мине кем ҡарап тора ла, кем күрә. Бер ус аяһылай ҡағыҙ киҫәге юҡ тип, күпме кеше тир түгеп үҫтергән, бына-бына келәттәргә инергә торған тос һолоноң тапалып әрәм булыуына күрәләтә юл ҡуйырға ярамай ҙа баһа. Мин - агроном. Мин үҫтерелгән ашлыҡты һаҡларға тейешле. Ә һыйырҙарға килгәндә - улар өсөн айырым яуаплы кешеләр бар, шулар хәстәрләһен.

Үләкһә аунап ятҡан ер ныҡ тапалырға өлгөргән ине. Мин унан алыҫ түгел баҫыу ситендәрәк үҫкән, ботаҡтары инде аҫҡа ҡарап һәленә башлаған йөҙйәшәр тарбаҡ ҡайынды яҡтыла уҡ билдәләп ҡуйҙым: аңдып ултырыу өсөн ҡулай урын. Киске эңерҙә, күҙ бәйләнеп, ысыҡ төшөү менән комбайндар эштән туҡтай. Юғиһә, еүеш иген йүнләп сабылмай, брак китә. Ә брак эш өсөн баштан һыйпамайҙар.

Комбайнсылар тимер аттарын "минең" ҡайындан йөҙ аҙымдар самаһы арыраҡ ҡуйҙылар. Үҙҙәре шунда уҡ өҫтө көплө машинаға ултырып, ҡайтып та киттеләр. Мин сәңгелдәкле мотоциклым менән уларҙың артынан төшкән кеше булдым да, бер аҙ барғас, кире боролдом. Йәнәһе, күҙ яҙлыҡтырҙым. Айыу атырға йыйыныуымды бер кем дә белергә тейеш түгел. Матайымды әле һыуынырға ла өлгөрмәгән комбайндар араһында ҡалдырғандан һуң, йәһәтләп, ҡайын башына менеп ҡунаҡланым.

Һоҡландырғыс төн! Ҡараңғылыҡ менән тынлыҡ хөкөмлөгө. Береһенән-береһе уҙҙырырға теләп емелдәшкән иҫәпһеҙ-һанһыҙ йондоҙло, дөм-ҡара булһа ла, үтә күренмәле күк көмбәҙендә болот әҫәре юҡ. Тимәк, тәүге ҡырауҙарға ла күп ҡалмаған. Төндәрҙең бындайы мотлаҡ ҡырау алдынан ғына булыусан. Хәйер, ҡырау тип хафаланһаҡ та, уларҙың да ниндәйҙер кимәлдә файҙаһы бар. Ул сейле-бешле ултырған игенгә, башҡа үлән орлоҡтарына тиҙерәк өлгөрөргә булышлыҡ итһә, инде кәрәге бөткән япраҡтарҙы ҡапылыраҡ ҡорота. Ашлыҡтың, бигерәк тә һолоноң, аҫҡы йәм-йәшел ҡыяҡтарын ҡыуартып, сабыуҙы һиҙелерлек еңеләйләштерә. Эштең сифаты бермә-бер күтәрелә. Ҡайын япраҡтары ла бит ҡырауҙан һуң ғына ихласлап һарғая башлай. Тәбиғәт-әсә барыһын да алдан ҡарап, алдан хәстәрләп ҡуйған.

Башта күҙгә төртһәң күренмәслек ҡараңғы һымаҡ булһа ла, бер аҙҙан Ирәндек ашаһынан күтәрелгән тулы ай йомарт яҡтыртып ебәреүгә, әйләнә-тирә шөйлә күренеп ҡалды. Хатта күңеллерәк булып китте. Юғиһә, яңғыҙлыҡ менән ҡараңғылыҡ, уларына өҫтәп билдәһеҙлек рухты ныҡ иҙә бит ул. Билдәһеҙлек тигәнем шул: айыу аңдып ултырған һунарсыны алда нимә көткәнен бер кем дә әйтә алмай.

Бер мәлде, яңғыҙын бошоноп ултырма әле, тигәндәй, яҡындағы әрәмәлектә көсәнеп-көсәнеп тартай ҡысҡырырға тотондо, уныһына илаһи моңо менән таллыҡ эсендәге күренмәҫ ҡошсоҡ ҡушылды. Сутылдығын сыға: әллә йәмле йәй үтеүенә һағышлана, әллә нимәгәләр шатлана, белмәҫһең. Бағры йылғаһы буйында, Сәүкә ташы тип аталған бейек кенә ҡая тарафтарында өкө уһылдап ҡуйҙы. Уның тауышы, баҫалҡы ғына ишетелһә лә, былай ҙа һағайып торған күңелгә аңлайышһыҙ шом өҫтәй.

Көндөҙөн йылы булғас, төнгөлөгөн уйлап еткерелмәгән: кейем йоҡараҡ, еүеш һалҡынлыҡҡа арҡа буйы зымбырлап өшөтә лә башланы. Әйткәндәй, әлеге хәлгә үҙ ғүмеремдә нисәнсе тапҡыр ҡалам, һаман киҫәмәйем, һаман белмәйем. Йөҙ йыл йәшә, йөҙ йыл өйрән, тигәндәре ошолор инде. Хәйер, яҡты донъя серҙәре менән йәшәйеш хикмәттәрен йөҙ йыл ғына түгел, мең йыл йәшәһәң дә өйрәнеп тә, белеп бөтөп тә булмайҙыр ул. Шул иҫәпкә бер үк тырмаға ҡабат-ҡабат баҫыу ҙа инә. Ошо рәүешле төнгө һалҡынға ҡалып ҡалтыраныуҙарым күпме булды, өшөп-туңып ултырғанда әйтеүҙәр әйтеп бөтәм, әммә ләкин мәле еткәс, барыбер онотам.

Башымда ошоноң ише үкенесле уйҙар ҡайнаша. Ләкин, алдан ҡайғыртмағас, хәҙер инде түҙергә генә ҡала. Түҙәм, арты҇ хәрәкәт яһамайым, тауыш-тын сығармайым. Боҫҡонда саҡта хатта ботаҡ та һелкенергә тейеш түгел. Әле һунарсының күҙҙәре менән ҡолаҡтары ғына эшләй. Бар уңыш тик уларҙан тора. Шөкөр, улар мине һынатҡаны юҡ. Ишетеү һәм күреү ағзаларым ошоғаса үҙ вазифаларын аныҡ башҡара килде. Бөгөн нисек булыр? Шикле тойолған бер шипкерт-хәрәкәт тә, бер тауыш та иғтибарҙан ситтә ҡалмай.

Ниһайәт, көтмәгәндә эргәләге ҡыуаҡлыҡта һаҙ турғайы сиҡылданы: сиҡ... сиҡ... сыҡ... сыҡ... Ошо аһәңһеҙ генә ауазды төнгө һунарсы иһә тулҡынланып та, һағайып та ҡабул итә. Ни өсөн тигәндә, әлеге турғай тынысһыҙлана башланымы, был ошо тирәгә ниндәйҙер йәнлек яҡынлашыуының ышаныслы билдәһе. Унан да ышаныслыраҡы башҡаса юҡ. Һунарсыға көндөҙ һайыҫҡан, төнөн һаҙ турғайы тауыш бирә. Әлбиттә, уларҙың да тауышын аңлау кәрәк. Юғиһә, шул уҡ һайыҫҡандың уйламаҫтан үҙенде лә "һатыуы" бар.

Уйҙарға бирелеп ултырған ерҙән ҡапыл һиҫкәнеп киттем. Ауырая башлаған ҡабаҡтар кинәт асылды. Иң ҡыҙығы шул: өшөп-ҡалтыраныуҙар шунда уҡ юҡҡа сыҡты. Кеше булмышының ошо хикмәтле торошо нимәнән булалыр, мин әлегә быға яуап таба алғаным юҡ. Йөрәк йышыраҡ тибеүҙән ҡан шәберәк йөрөп китәме? Әллә мажара көҫәгән көҙөклө аңда башҡа берәй үҙгәрештәр башланамы? Нисек кенә булмаһын, өшөп-ҡатҡан тәнде бер нисә секунд эсендә ялҡын солғап ала. Әле генә һалҡындан ыҙа сиккән һунарсыны хәҙер инде ҡайнар ялҡын өтөп бара. Ҡыҙыҡ түгелме ошо? Бына әле лә бөтә тәнем буйлап эҫе тулҡын үтте, һырт буйҙарым зымбырлап китте. Уларына татлы тулҡынланыу өҫтәлде. Мин инде ҡуҙғалыу түгел, ныҒыраҡ итеп тын алырға ла ҡурҡам. Миңә хәҙер бөтә ҡарайсыҡ нәмә лә ҡыбырлаған, яҡын-тирәлә нимәләрҙер ҡыштырлашҡан кеүек. Ҡыҫҡаһы, һәр шикле шәүлә күҙгә айыу булып күренер мәл етә. Сөнки мин бит айыу көтәм. Төлкө аңдығанда ул шәүләләр төлкө булып күренер ине. Шулай ҙа һелкенешеп торған шәүләләр урындарында ҡала килә, ә тайыш табан юҡ. Тимәк, теге ҡошсоҡто ниндәйҙер бүтән йән эйәһе бимазалаған.

Мин көтәм... Баяғы ярһыу хәлемдән инде тыныслана төштөм. Арҡам тағы өшөй башланы. Ҡапыл... Кемдер ныҡ һыҙланғандай ыңғырашып ҡуйҙы. Яҡында ғына. Комбайндар торған тарафта сәп-сөп иткән сәйер тауыш ишетелә. Айыу! Мин ҡабат дөрләй башлағанымды тоям. Эйе, хаталанырлыҡ түгел, ҡайҙалыр тайыш табан рәхәтләнеп туҡ һоло менән һыйлана. Кинәнестәндер инде, күкрәк төпкөлөн тетрәндереп сыҡҡан ғәйре тауыш менән һирәк-һаяҡ ыңғырашып ҡуя. Әле ул тауыш бер ниндәй ҙә хәүеф менән янамай, ҡурҡыныс та түгел. Сөнки айыу мине күрмәй ҙә, тоймай ҙа. Ә бит һунар итергә сыҡҡан януарҙың үкергән ауазы ҡот осҡос. Күп тапҡырҙар ишеткәнем бар. Ул ауаз теләһә ниндәй ҡорбандың рухын һындырырға һәләтле. Шунлыҡтан, ҡорбан, үҙе лә абайламаҫтан, йыртҡыс тырнағына барып эләккәнен һиҙмәй ҙә ҡала. Ауға сыҡҡан айыуҙарҙың күҙенә салынмауың хәйерле. Улар ике уйлап тормай. Улар тиеүем шуның өсөн, сөнки ауға айыуҙар, ғәҙәттә, күмәкләп сыға. Был отошло алым: береһенең тауышынан өрккән ҡорбан еңел генә икенсе айыуға тәл була...

Көсөргәнеп, ҡараңғылыҡҡа текәлгән көйө ҡатып ҡалғанмын. Ара алыҫ булғанлыҡтан, айыуҙы шәйләрлек түгел. Үкенес. Шул уҡ ваҡытта аптырарлыҡ: айыу комбайндарҙан һис ҡурҡмай. Был минең өсөн киләсәккә тағы бер һабаҡ.

Ул төндәге һунарым уңышһыҙ булды, айыуҙы атыу түгел, күрә лә алманым. Уның ҡарауы... Иртәгеһен йәнә шул уҡ баҫыуға килдем. Тағы теге ҡайынға үрмәләргәме? Юҡ инде. Мин хәҙер әҙ-мәҙ һабаҡ алған. Йолҡош әтәс ише шоҡорайып ағас ботағында ултырғансы, йомшаҡ ултырғыслы комбайн кабинаһы кем менән уртаҡ? Йыртҡыс бит йәнһеҙ машинаны бар тип тә белмәй. Өҫтәүенә, бөтә яланды алған солярка аңҡыуы башҡа булған еҫтәрҙе баҫа. Бына бит уның әтнәкәһе!

Ҡабырғалағы тәҙрәнең шылдырмалы өлгөһөн асып ҡуйҙым. Юғиһә, бер ниндәй тауыш ишетелмәйәсәк. Миңә бөгөн, төнгө тәбиғәт хозурлығына һоҡлана-һоҡлана, оҙаҡ көтөргә насип булманы. Күп тә торманы, һоло эсенән ҡуршылдауға тартым таныш тауыш ишетелеп ҡалды һәм бер аҙҙан тайыш табан үҙе лә пәйҙә булды. Ул бөтөнләй яҡын ине. Уҙа барһа, ун-ун биш аҙым самаһы. Минең фараз дөрөҫкә сыҡты. Солярка ҡатыш май еҫенән айыу мине һиҙмәй һәм эргәһендә генә мылтыҡлы кеше ултырыуын уйлап та бирмәй. Көнө буйына ышҡылыуҙан баҙлап, хәҙер инде һыуына барыуҙан тимер өлөштәрҙең ара-тирә тыңҡылдашып ҡуйыуына ла иғтибар итмәй. Йыртҡыс, күрәһең, әлеге тауыштарға күнегеп бөткән. Комбайндың йәнһеҙ, шуға күрә зыянһыҙ икәнен яҡшы белә. Ә бит үҙ-үҙеңә артыҡ ышаныу - үлемесле һаҡһыҙлыҡтың нигеҙе. Ошо хәҡиҡәткә мин тағы бер тапҡыр инандым.

Оло һаҡлыҡ менән, әкрен-әкрен генә урынымдан торорға маташам. Пружиналы йомшаҡ ултырғыс хыянатсыл шығырлап ҡуя. Быны шунда уҡ ишетеп алған шилма, шөғөлөн ташлап, кинәт кенә боролдо ла, түңәрәк ҡолаҡтарын һаҡсыл ҡарпайтып, артҡы тәпәйҙәренә баҫты. Ошо ҡиәфәтендә ул ғәҙәттәгенән күпкә ҙурыраҡ та, дәһшәтлерәк тә күренә ине. Һиҫкәнгән айыу туп-тура миңә ҡарап тора. Хатта ҡурҡыныс булып китте. Башымдан: "Бөттө былай булғас, һунар барып сыҡманы", - тигән үкенесле уй үтеп китте. Үҙемдең шулай алабармаһыраҡ ҡыланыуыма йәнем көйҙө. Тын алырға ла ҡыймай, байтаҡ ваҡыт һыңар аяғымда баҫып торҙом. Мин айыуға, айыу миңә текләгән көйө ҡатып ҡалғанбыҙ. Шунда аңыма барып етте: саң ултырған тәҙрә аша ул бит мине шәйләй алмай аҙаплана. Ошо мәл аҙ ғына хәрәкәт тә етә ине, тайыш табан салҡан ҡолап китәсәк тә юҡҡа сығасаҡ. Тик ул хәрәкәтте мин яһаманым, түҙҙем. Күпме ваҡыт шулай торғанбыҙҙыр, әммә минең артабан тәҡәт ҡалманы. Ни булһа шул булыр, тип, уңайлап торорға йыйынғанымда айыу, тынысланып, дүрт тәпәйенә баҫты. Тағы бер аҙҙан, бер ни булмағандай, һыпырып һоло ашарға тотондо.

Ошонан файҙаланып, икенсе аяғымды ла иҙәнгә терәй һалдым. Бына бит айыу, хәйләкәр, ә кеше унан хәйләкәрерәк булып сыҡты. Шулай ҙа ни өсөн йыртҡыс емтек янына барманы, ә һолоға өҫтөнлөк бирҙе? Быныһы әлегәсә асыҡланмаған һорау булып ҡалды.

Еңел һулап, ярым асыҡ тәҙрәнән күҙәтә башланым. Баштараҡ көҙөкләнеп үтә һаҡ ҡыланған йыртҡыс тора-бара һиҙгерлеген юғалтты, бугай, мылтыҡ көбөгәненең нимәләр "зыңҡ" бәрелеп китеүен дә ишетмәне. Ашау ҡомарына ныҡ бирелгән усланған айыу бер мәлде ергә ултырып алды. Ул уңлы-һуллы услап, суҡ һолоно тештәре менән оҫта һыпырып ала. Кинәнестән уһылдап, хатта ыңғырашып ҡуя. Бер урында ашай бирә лә, ултырған көйө генә алға шыуыша, тағы йыпыра. Уның ауыр кәүҙәһе аҫтында ярылып ҡара эҙ ҡала. Бына нисек итеп һала икән тайыш табан һөрөлгән кеүек тәрән, йышылып бөткән буразналарҙы! Өҫтәүенә, ул элекке әҙер буразнаһынан "шыуып" йөрөүҙе өҫтөнөрәк күрә һымаҡ. Ни өсөн тигәндә, мин ҡарап торған арала ғына бер юлдан ҡабат-ҡабат үтте, шул тирәнең игенен бөтөнләй иҙгесләп ташланы.

Ҙур һаҡлыҡ менән мылтығымдың көбәген тәҙрә уйымына тыға алдым. Хәҙер инде беҙ еңеүсе! Самалап йыртҡыстың урта биленә, ҡалаҡ һөйәк аҫтынараҡ тоҫҡаным. Ярһый төшкән йөрәк тибешен баҫмаҡҡа тәрән итеп һулыш алдым һәм... Тәүге айыуыма тиҙерәк ҡағылып ҡарайһы килә, әммә ҡабаланырға ярамай. Яралы йыртҡыстың хәйләләшеп ятыуы бар. Йән бит. Бер кемдең дә уны былай ғына, ҡон ҡайтармайынса тороп бүләк иткеһе килмәй.

Ышыҡ биргән комбайн кабинаһында тулҡынланып та, йөрәкһеп тә ултырам. Бер аҙ яҡтырғанды көтәм. Көтәм һәм үҙемдең түҙемлекҡә аптырап ҡуям. Хәйер, уның нимәһенә аптырарға? Артабан йәшәгең килә икән, түҙем дә, сыҙам да булыу, уяу ҙа, һаҡ та булыу зарурлығын һис оноторға ярамай.

Әле ерҙә лыпым ятҡан айыуҙың йәне сыҡҡанмы-юҡмы икәнен яҡтырғас, ҡолаҡтарына ҡарап ҡына аныҡ белергә була. Тере йыртҡыстың ҡолаҡтары һәр ваҡыт шымтайып ҡыҫылған була. Ниндәй генә хәйләле булмаһын, ул ошо хәлен йәшерә белмәй ҙә, йәшерә алмай ҙа. Ярай әле әҙәми зат ошоно нисектер асыҡлай алған. Ә асыҡлағанға тиклем күпме ҡорбандар талап ителгәндер инде...

Иртә таңды саҡ-ҡа көтөп алдым. Ҡояш сығышы алһыулана башлау менән хәрәкәтһеҙ кейектең тырпайған ҡарпыш ҡолаҡтарын күреп күңелем булды. Тынысландым. Хәҙер шикләнмәйенсә эргәһенә барырға мөмкин.

Ғәйрәте ташып торған дәү айыу атҡан ыңғайы уҡ үлгән булған. Был хаҡта уның һыуынып ҡата башлаған кәүҙәһе һөйләй. Комбайнсылар килгәнсе, айыуҙың тиреһен тунап алдым. Үҙем ҡойоп һағаған йоморо йәҙрә януарҙың ҡалаҡ һөйәген онтап, йөрәгенә инеп ултырған. Күренеп тора, йәне күҙ асып йомғансы сығып осҡан. Айыуҙың ашҡаҙаны ярты лаш тулы ит ине. Тимәк, уның ҡайҙалыр тағы ҡорбаны булған Тимәк, ул "ашты" аралаштырып ашарға ярата. Итте эшкәртер өсөн һолоноң файҙаһы юҡ түгелдер...

Әрәм итеп ташлап ҡуйып булмай ҙа баһа, күңел болғандырғыс ауыр еҫ бөркөп торған ғәләмәт һимеҙ айыу итен алыҫ булмаған леспромхоз урыҫтарына "бүләк иттем". Оҡшай икән, әҙерләй беләләр икән, һаҫыҡ булһа ла, әйҙә, ашап кинәнһендәр. Үҙемә лә "ауыҙ итеп" ҡарарға тәҡдим яһағайнылар, нисектер, тән тартманы. Атамолатам ашаған ашмы...

Мин һиңә - һин миңә, тигән һымаҡ, уның ҡарауы, минең өсөн ул йылды утынға ҡытлыҡ булманы. Ә татлы тамаҡ тайыш табандарҙың теге баҫыуға килеп-китеп йөрөгәндәре башҡаса тойолманы. Шуғамылыр, һолоноң уңышы мул булды.

**(Дауамы бар).**

## АУЫЛЫМ МӘҘӘКТӘРЕ



### Дүрт йәштә уҡырға өйрәндем

Әхирәтемә ҡунаҡҡа килгәнбеҙ. Биш йәшлек улы шыпшыма, бер хатаһыҙ, тасуири итеп китап уҡып ултыра. Һоҡланып ҡарап торҙом да:

- Оһо, ҡалай матур уҡый! - тинем. Әхирәтем:

- Ул өс йәшендә уҡый башланы! - тине. Улы, уҡыуынан туҡтап:

- Мин һиңә иҫәрме ни өс йәштә китап уҡып ултырырға! Өс йәштә хәрефтәрҙе генә өйрәндем, дүрт йәшемдә саҡ уҡый башланым! - тине лә, уҡыуын дауам итте.

### Автотүләү

Һигеҙ йыл самаһы элек телефоныма ай һайын 50 һум аҡса күсә башланы. Кем күсергәнен дә белмәйем, тик "ошо номерға 50 һум аҡса күсте" тигән ҡыҫҡа хәбәр килә. Аптырағас, бөтә туғандарымдан, дуҫтарымдан, танышҡарымдан: "Минең телефонға аҡса һалманығыҙмы?"- тип һорай башланым. "Юҡ, беҙ һалманыҡ", - тиҙәр. Ниндәйҙер изге йән хәйер һала, тип, аҡса күскән һайын шул билдәһеҙ "кешегә" бағышлап:"Эй, Хоҙайым, мине ҡыуандырғанда үҙе ҡыуанһын, миңә һалған аҡсаһы үҙенә йөҙ-мең тапҡыр артып ҡайтһын!" - тип доғалар уҡый башланым. Шулай бер йылға яҡын изге теләктәр теләп ултырҙым. Бер ҡунаҡҡа барғанда, тамам аптырап: "Кем минә аҡса һала, һеҙҙең берәйегеҙ түгелме?"- тип һораным. Зирәк кенә ҡунаҡ "Нисек, күпме, ҡайҙан күсә?" тип төпсөнөп һорай башланы. Мин һөйләп бирҙем. Ул: "Һинең бит банк карточкаһына автотүләү ҡуйғандар!" - тип ҡысҡырып көлөп ебәрмәһенме. Икенсе көндө банкка барып тикшерткәйнем, ысынлап та, карточкаға автотүләү беркетелгән. Мин йыл буйы үҙемә үҙем доғалар бағышлап ултырғанмын!

### Үгеҙемде һатып, колбаса алам

Ҡунаҡҡа барғанбыҙ, өҫтәл тулы мул аҙыҡ, бай табын. Хужалар ихлас һыйлай.

- Ашағыҙ, бөтә ризыҡтан да ауыҙ итегеҙ! Бына ҡыҙҙырылған тауығы, салаты, йәшелсә-емеше, колбасаһы! - тип һәр беребеҙҙе ҡыҫтайҙар. Шунда бер ҡунаҡ:

- Мин колбаса яратам ул! Бына иртәгә үгеҙемде һуйып, баҙарға алып барып һатам да, күүүп итеп колбаса алып ҡайтам әле! - тип һөйләнә-һөйләнә колбасаға үрелде.

### Һинең үгеҙҙән түгел

Ауылда бер апай үгеҙен бестереп өлгөрмәгән. Йәй буйы көтөүҙә һыйырҙарҙы ҡыуып йөрөнө уныһы. Күпмелер ваҡыт үткәс, апайыбыҙ ауылда һыйыры быҙаулаған һәр бер өйгә килеп: "Минең үгеҙем һыйырығыҙҙы ҡасырҙы, шуға быҙауланы. Хәҙер миңә аҡсаһын түләгеҙ!"-тип йөрөй башланы. Бер көндө беҙҙең дә һыйыр быҙауланы. Апайыбыҙ йүгереп килеп етте. Атайым сыҡты ла, ашыҡмай ғына һораша башланы:

- Үгеҙең ниндәй төҫтә ине? Ҙур инеме? Тауышы нисек ине?

-Үгеҙем көрән төҫтә, башында аҡ табы ла бар, ҙур ине, гел үкереп ҡайта торғайны,- тип апай үгеҙенә "ҡылыҡһырлама" бирҙе. Атайым ихлас тыңлап торҙо ла:

- Бeләһеңме, беҙҙең быҙау ҡара төҫтә, башында табы ла юҡ. Улайһа, һинең үгеҙҙән түгел инде, шуға аҡсаһын да бирә алмайым! - тип әйтеп ҡуймаһынмы! Апай ни әйтергә лә белмәй, бер аҙ аптырап торҙо ла, аҡсаһыҙ сығып китте.

### Бөтөн өй

Егерме йыл элек ауылда беҙҙең ғаилә яңы өй һалып керҙе. Мейес сығарырға тип, әле яңы ғына мейес һала башлаған оҫтаны саҡырҙылар. Бәлки, аҡсаһын әҙерәк һорар, тип уйлағандыр ата-әсәйем. Бер нисә көн эсендә оҫта мейесте һалып та бирҙе. Ҡыуанып, яңы мейесте яғып ебәрҙек. Тик ни эшләптер төтөн мөрйәнән тышҡа сыҡмай, өйгә тулды. Әсәйем: "Тапҡанһың оҫта!"- тип атайымды әрләй. Атайым да бирешмәй:

- Өй бөтөн, шуның өсөн төтөн! - тип ғорур итеп әйтеп һалмаһынмы!

Ул көндө беҙ тәҙрә-ишектәрҙе асып өйҙө оҙаҡ елләттек. Һуңынан икенсе, ысын оҫта килеп, матур итеп мейес һалып бирҙе. Бала саҡта булған ошо ваҡиға мине, үҫә төшкәс, тормоштағы төрлө хәлдә лә уның ыңғай яғын күрергә өйрәтте.

### Бригадирға өмәгә

Ауылдың бригадиры үҙенә бесән эшләтергә ир-егеттәрҙе өмәгә алып сыға. Һәр береһе тырышып эшләй икән. Тик бер ярҙамсы ғына йүнле эш күрһәтмәй, илпеһалпы йөрөп, бригадирҙың теңкәһенә тейә. Бына төшкө аш мәле етә. Бригадир ағайыбыҙ мул ғына һыйын, ит, картуф, май-ҡаймаҡ, ҡатыҡ, йоморҡа, икмәген теҙә башлай. Теге ялҡау егетебеҙ оло һыйға ҡарап тора ла:

- Ағай, әллә беҙ һиңә өмәгә сыҡтыҡмы, колхозға түгелме? - тип һорап ҡуя. Шунда ғына бригадирыбыҙ уның ни эшләп ялҡауланып йөрөгәнен аңлай. Колхозға түгел, ә бригадирҙың үҙенә өмәгә сыҡҡас, төштән һуң иң һыҙғанып эшләй уңған егетебеҙ.

### Бейә дағаһы

Ауылдағы тимерлеккә ир-егеттәр йыйылып, бер-береһенең хәл-әхүәлен һорашып, һуңғы яңылыҡтарҙы һөйләп, шаярып-көлөп ултыралар икән. Шунда бер ағайыбыҙ:

- Егеттәр, әйтегеҙ әле, нисек малай "эшләргә"? Еңгәйегеҙ алты ҡыҙ алып ҡайтты бит! - тип кәңәш һораған. "Тәжрибәле" икенсе ауылдашыбыҙ:

- Бына тағы бәпәй "эшләйем" тиһәң, мендәр аҫтына аға һал! Атты ысын ир-егет кенә тотоп дағалай ала бит! - тигән.

Бер йылдан тағы ла ауылдың ир-егеттәре тимерлектә осрашҡан. Ҡыҙға бай ағайыбыҙ:

- Эй, егеттәр, ни эшләп теге ваҡыт алданығыҙ инде? Мендәр аҫтына аға һалып, бәпәй "эшләнем", барыбер етенсеһе лә ҡыҙ булды! - тигән. Кәңәш биргән ағайыбыҙ ҙа юғалып ҡалмаған:

- Дағаһы бейәнеке булғандыр! - тип әйтеп ҡотолған.

**Айһылыу СИРБАЕВА.**
**Дыуан районы.**

## ДАУАМ ИТЕП...

# СТУДЕНТ МӘҘӘКТӘРЕ

**Бөгөн нисектер, белмәйем, үткән быуаттың һикһәненсе йылдарында студент образын мәңге аҡсаһыҙ, ас йөрөгән кеүек күҙ алдына баҫтыралар ине. Утыҙ төтөн булмай, тигәндәй, дөрөҫлөккә хас яҡтары ла булғандыр инде. Шуға күрәләр ҙә ул осор анекдоттарында студенттарҙы шулайыраҡ һүрәтләйҙәр ине.**

***

Бер студент ауылға телеграмма һуға икән. Ҡыҫҡа хәбәрендә бер генә һүҙҙе ҡабатлай ти был: "Студент". Каникулға ҡайтҡанында атаһы телеграммалағы һүҙҙең мәғәнәһен һораған.

- Уның нимәһе аңлашылмай, "Срочно требуется уйма денег. Есть нечего. Точка." тип яуап биргән улы.

***

Бер студент урам буйлап икмәкте типкесләп китеп бара икән.

- Һин нимә, аҡылыңдан шаштыңмы? Изге нәмәне типкесләйһең, - тигән иптәше.

- Шаулама, анау мөйөштә үткәс, икәүләп бүлешеп ашарбыҙ, - ти икән икмәк типкәне.

***

Студенттар ашханала сиратҡа баҫҡандар. Алған ашамлыҡтары сәй ҙә икмәк икән. Бер студент эре генә ҡиәфәттә:

- Миңә һигеҙ сосиска бирегеҙ, - тигән.

Сираттағылар иҫтәре китеп, быға тексәйгән.

- Һәм... ун алты вилка бирегеҙ, - тип өҫтәп ҡуйған сосиска алыусы студент.

***

Аслыҡтан интеккән бер студент дөйөм ятаҡ коридоры буйлап темеҫкенеп йөрөй, ти. Бер бүлмә эргәһенән үтеп барғанда танауын бешкән ит еҫе ҡытыҡлаған быны. Бүлмәгә инһә, бер төркөм студенттар өҫтәл артында ит ашап ултыра икән. Был да мәжлескә ҡушылған, өҫтәлдең ситенә генә килеп ултырған. Тамағы туя башлағас:

- Бына беҙҙең декан миңә һис тә оҡшамай, - тип, һүҙ башлаған был.

- Оҡшамаһа, ашама һуң, - тигәндәр уға.

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

*✓ Ул һәр ваҡыт ғәҙеллекте яҡлай. Унының бөтә ижади яҙмышы, шәхси тормошоноң да айырылғыһыҙ өлөшө һәр төрлө демагогияға, битарафлыҡҡа һәм наҙанлыҡҡа ҡаршы көрәш һәм протест, баш күтәреү рухы менән һуғарыла.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ҺИМЕҘЛЕК - АУЫРЫУ

■ Америка медицина ассоциацияһы һимереүҙе ауырыу тип танырға тәҡдим итә. Элек ассоциация һимереүгә "йәмәғәт һаулыҡ һаҡлау өлкәһенең төп проблемаһы" тигән ҡылыҡһырлама бирә ине. Был ҡарар юридик көсөнә инһә, һимереү кеүек ауыр проблеманы хәл итеү юлдары ла еңеләйәсәк, ти белгестәр. "Артыҡ ауырлыҡ сир түгел, ә артыҡ ашау һәм аҙ хәрәкәтләнеүгә бәйле йәшәү рәүеше алып барыуҙың эҙемтәһе, тип әйтеү дөрөҫ түгел. Мәҫәлән, тәмәке тартырғамы, юҡмы икәнен дә кеше үҙе хәл итә, әммә унының һөҙөмтәһендә тыуған үпкә яман шешен ауырыу түгел тип атарға бер кемдең дә башына инеп тә сыҡмай", - тиелә ассоциацияның мөрәжәғәтендә. Һимереү - ул сир, тигән фекерҙе Кардиологтарҙың Америка колледжы, Һимереү проблемалары йәмғиәте, Американың клиник эндокринологтары ассоциацияһы ла хуплай. Әлеге мәлдә артыҡ ауырлыҡ менән Америка халҡының өстән бер өлөшө яфалана. RTI International институты фараздары буйынса, 2030 йылға уларҙың һаны 42 процентҡа етәсәк.

■ Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге буйынса Европа агентлығы ғалимдары асыҡлауынса, телевизорҙан рекламаланған төрлө йогурттарҙың кеше организмы өсөн бөтөнләй файҙаһы юҡ икән. Белгестәр 500 етештереүсенең тауарын тикшергәндән һуң, уларҙың 70 процентының рекламала әйтелгән мәғлүмәткә тап килмәүен билдәләгән. Әммә был яңылыҡ йогурттарҙы бөтөнләй ҡулланырға ярамай, тигәнде аңлатмай. Бары уларҙан ниндәйҙер дауалау эффекты көтмәгеҙ. Британия ғалимдары фекеренсә, көн һайын һөт йәки һөт аҙыҡтары ашаусылар гипертония менән һирәгерәк ауырый. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, һөт аҙыҡтарында кальций һәм калий күп, улар артериаль баҫымды көйләү һәләтенә эйә.

■ Нәҫелендә эсәк яман шеше булған кешеләр был хәүефте фолий кислотаһына бай ризыҡтар менән туҡланып түбәнәйтә ала. Америка ғалимдары 90 мең кешене тикшереп, шундай һығымтаға килгән. Улар яман шеш менән ауырымаҫ өсөн көнөнә 400 мг фолий кислотаһы ашарға ҡуша. Был кислота шпинатта, брокколи һәм башҡа төр кәбеҫтәләрҙә, һыйыр бауырында күп. Ғалимдар фекеренсә, фолий кислотаһы ДНК төҙөлөшөндә ҙур роль уйнай һәм ул етешмәй башлаһа, организм был сиргә тиҙ бирешә башлай.

■ Ҡыҙҙырылған картуф, тауыҡ, майлы балыҡ ятатһағыҙ, майҙа ҡыҙҙырылған бәлештәрһеҙ йәшәй алмаһағыҙ, улар тыуҙырған хәүеф тураһында ла онотмағыҙ, ти Америка ғалимдары. Был ризыҡтар простата биҙе яман шешенә килтерә ала. Сиэтлдағы Яман шеш тикшеренеүҙәре үҙәге белгестәре билдәләүенсә, майҙы ҡыҙҙырыу һөҙөмтәһендә канцероген матдәләр - альдегидтар, гетероциклик аминдар һ.б. бүленеп сыға. Тап улар ир-егеттәрҙә простата биҙе яман шеше барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә лә инде. Был проблема Америка халҡына ғына янамай, бөгөн Европала ла ҡыҙҙырылған ризыҡтар ҙур һорау менән файҙаланыла.

■ Иртән яҡшы кәйефтә уянып та, көн дауамында унының ҡапыл кирегә үҙгәреүе - эш аҙнаһы дауамында йоҡо туймау һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән арыуға бәйле. Һуңғы ун йыл дауамында был бәлә бер кемде лә урап үтмәй. Кешеләр эштәге көсөргәнештән арый, һуң йоҡларға ята, иртә тора. Бындай күңелһеҙлек булмаһын өсөн көн һайын сәғәт 10-да йоҡларға ятырға кәңәш итә ғалимдар.

*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*



**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрына 1948 йылда ГИТИС тамамлаған режиссер Шәүрә Мортазина килә. Яҙмыш ҡушыуы тап шулай: ул театрға нигеҙ һалған шәхес Вәлиулла Мортазин-Иманскийҙың фамилиялаш аҙашы, унының кеүек үк ҡанлы 30-сы йылдарҙа репрессия ҡорбаны булған легендар башҡорт полководецы Муса Мортазиндың ҡыҙы.**

# ШӘҮРӘ МОРТАЗИНА.

## Легендар атаһының лайыҡлы ҡыҙы

Шәүрә Мортазина - Бөйөк Ватан һуғышынан һуңғы ауыр йылдарҙа башҡорт театрын яңырыу юлына сығара: актер театрынан режиссер театрына, традицион-ҡәҙимге театрҙан донъяны яңыса яҡтыртыуға ҡоролған фәлсәфәүи театрға күсереүсе ныҡлы күпер һала. Башҡорт сәхнәһенә режиссер театры принциптарын индереп, илдәге театр ҡанундарының иң алдынғы ысулдарына таянып, Шәүрә Мортазина художестволы яҡтан бөтөн һәм тулы ҡанлы спектаклдәр ҡуйыуға өлгәшә, образдарҙың тормошсан асылыуын, мизансценаларҙың психологик шартлылыҡҡа тура килеүен, актер кисерештәренең ысынбарлыҡҡа яҡын булыуын алға ҡуя. Донъя, рус, башҡорт һәм башҡа милли репертуарҙа үҙҙәренең сәхнә йәшәйешен тапҡан профессиональ актерҙарҙың тотош бер быуыны тап Шәүрә Мортазина ҡуйған постановкаларҙа үҫеп сыға.

Шәүрә Муса ҡыҙы Мортазина 1925 йылдың 22 июлендә Мәскәү ҡалаһында тыуған. Унының бала сағы шартлы рәүештә ике осорға бүленә: ғәмһеҙ бәхетле мәлдәр һәм өмөтһөҙ хәсрәтле йылдар. Тәүгеһендә ул үҙенең шәхсән булмышын тәрбиәләүҙә мөһим роль уйнаған атаһының сикһеҙ һөйөүенә ҡойонған иркә ҡыҙ бала. Ҡырыҫ һәм ҡайсағында ҡаты холҡло, талапсан комбриг Муса Мортазин үҙенең өйөндә яғымлы һәм нескә күңелле атай - алты балаһын яратып туймаҫ йән була. Ул балаларында шәхес үҙәген тоторлоҡ сифаттарҙы - сабырлыҡ, яуаплылыҡ, намыҫлылыҡ тәрбиәләргә тырыша: уларҙы төрлө яҡтан үҫешкән камил рухлы һәм белемле итеп күрергә ынтыла. Шәүрә шулай һөйөүгә һәм китаптарға күмелеп үҫә. Юғары мәҙәни зауыҡҡа эйә булған Муса Лут улы Мортазин балаларында нәфис сәнғәткә һөйөү тәрбиәләй, йыш ҡына үҙе менән Ҙур театрға йөрөтә, ундағы махсус урындарҙа ултырып, бәләкәй Шәүрә донъя балет һәм опера сәнғәтенең иң сағыу өлгөләрен тыңлай һәм тамаша ҡыла. Өйгә ҡайтышлай улар театр тураһында фекер алыша, унының кешеләргә тәрән йоғонтоһо хаҡында һөйләшә. Буласаҡ режиссерҙың донъяуи ҡараштары атаһы менән бергә ҡорған йөкмәткеле әңгәмәләрҙә байый һәм нығына.

Әммә 1937 йылда, комбриг Мортазин репрессияға эләгеп, атылғас, бөтәһе лә юҡҡа сыға. Атаһының фажиғәле үлеме һис тә аҡларлыҡ һәм ғәфү итмәҫлек, иң бәғерһеҙ һәм мәрхәмәтһеҙ ғәҙелһеҙлек булып Шәүрә Мортазинаның хәтеренә ғүмергә уйыла. Шуға күрә лә бөтә ғүмере буйы берәй ризаһыҙлыҡ һәм килешмәүсәнлек тойғоһо уянған мәлдәрҙә Мортазина айырыуса ҡырыҫ, ҡаты күңелле һәм башҡаларға ғына түгел, хатта үҙ-үҙенә ҡарата ла саманан тыш талапсанға әйләнә. "Халыҡ дошманы"ның ҡыҙы атаһына тел тейҙергән әҙәмдәр алдында бер ҡасан да ауыҙ йомоп шымып тормай. Ул һәр ваҡыт ғәҙеллекте яҡлай. Унының бөтә ижади яҙмышы, шәхси тормошоноң да айырылғыһыҙ өлөшө һәр төрлө демагогияға, битарафлыҡҡа һәм наҙанлыҡҡа ҡаршы көрәш һәм протест, баш күтәреү рухы менән һуғарыла. Шуға күрә бөтә драматургтарҙан уға иң күңелдәш яҡыны Антон Павлович Чехов була, унының пьесаларын ул башҡорт сәхнәһендә бер нисә мәртәбә ҡуя.

Атаһының үлеменән һуң ун ике йәшлек Шәүрә әсәһе һәм дүрт һеңлеһе, бер энеһе менән - ете етем - Мәскәү йорттарының береһендә еүеш подвалда йәшәй. Әсәһе сит кешеләрҙең керен йыуа, шулай ашарлыҡ аҡса таба, балалары уға ярҙамлаша. Йәшәү шарттары алама булыуға ҡарамаҫтан, Шәүрә мәктәпте ташламай. Профессия һайлар ваҡыт еткәс, атаһының васыят һүҙен тотоп, документтарын ГИТИС-тың режиссер факультетына тапшыра һәм А.М.Лобанов менән И.Я.Судаков курсына уҡырға инә.

Башҡорт театрын күтәрергә кәрәк - атаһының күңеленә бала сағынан һеңгән ошо һүҙҙәре институт тамамлағас та Шәүрәне Өфөгә алып килә. Йәш режиссер ҡыҙ эш башлаған осор айырыуса ауыр һәм ҡатмарлы була, сөнки репрессиялар дауылы башҡорт театрын нигеҙләгән һәм етәкләгән ижади көстәрҙе ҡырып юҡ иткән, аслы-туҡлы һуғыш һәм һуғыштан һуңғы йылдарҙың ыҙалары башҡорт театры үҫешендә бөтөн юлды томалаған, етмәһә, һәр кемдә көсөргәнешле ҡурҡыу, һәр ҡайҙа тулы шомло атмосфера хөкөм һөрә.

Бына тигән махсус белем алған режиссерҙың труппаға килеүе театрҙа һөйөнөс һәм өмөт уята. Ләкин Шәүрә Мортазина үҙенең режиссер хыялдарын тиҙ арала ғына тормошҡа ашыра алмай. Бының өсөн әҙерлекле йәш актерҙар кәрәк була. Башта ул оло быуын актерҙары менән эшләй. Унан һуң, башҡорт театры өсөн ижад иткән милли драматургия бөтөнләй юҡ хәлдә була. Драматургтарға профессиональ тәжрибә етешмәй, уларҙың һәр яҙғаны сәнғәтте һәм әҙәбиәтте ҡаты тышауҙа тотҡан соцреализм ҡалыптары аша үткәрелә.

Рус сәхнәһе традицияларын яҡын күргән Шәүрә Мортазина милли театрҙың башҡа мәҙәниәттәр менән аралашмайынса үҫешә алмауын аңлай, унының ижади ынтылышы классик репертуарҙы үҙләштереү менән бәйле. Башҡорт театры тарихында ул рус һәм көнбайыш Европа классик драматургияһын төрки халыҡ сәхнәһенә күсереү оҫтаһы булып хәтерҙә ҡаласаҡ. Унының тарафынан сәхнәүи һынланыш тапҡан әҫәрҙәр: А. Островский - "Һуңғы ҡорбан", П.Кальдерон - "Мөхәббәт менән уйнамайҙар", У.Шекспир - "Виндзор көлкөбикәләре", "Макбет", "Ромео менән Джульетта", А.Чехов - "Дядя Ваня", "Аҡсарлаҡ", "Иванов", Дж. Лондон "Урлау", Э.де Филиппо "Филумена Мортурано" ("Был бисәнең үҙ белдеге"), Дж.Лоусен - "Ҡунаҡ йорто әкәмәттәре" (Бер ғаилә хикәйәте", Вольтер - "Мөхәммәт" һәм башҡа спектаклдәр сәхнәне һәм тамашасы йөрәген яулай.

Шәүрә Мортазина Башҡорт сәхнәһендә 1972 йылға хәтле эшләү дәүерендә йәмғеһе илленән ашыу спектакль сығара, театрҙың быға саҡлы күрелмәгән ижади мөмкинлектәрен аса, театр республиканың мәҙәни һәм сәнғәти күгендә генә түгел, бөтә Советтар илендә яңы заман сәнғәт усағының өлгөһө булып таныла. Классик пьесаларҙа ул "бөгөнгө ағыш"ты, үҙ заманының ритмын һәм һулышын эҙләй. Шәүрә Муса ҡыҙы шулай уҡ бик һәләтле педагог була. 1964 йылдан 1966 йылға саҡлы ул Өфө сәнғәт училищеһында уҡыта, ә 1968 йылдан 1970 йылға ҡәҙәр күптән түгел генә асылған Өфө дәүләт сәнғәт



Репетициялар ваҡытында.



Пьеса буйынса фекер алышыу.

институтының режиссура һәм актер оҫталығы кафедраһын етәкләй.

1955 йылда Башҡорт академия театры Мәскәүҙә Башҡорт сәнғәте һәм әҙәбиәте декадаһында үҙенең иң уңышлы спектаклдәрен күрһәтә. Улар араһында Мортазинаның "Дядя Ваня"һы ла тамашасы хөкөмөнә сығарыла. Чехов геройҙарының эске тотанаҡлығы, бына-бына тышҡа бәреп сығырға ғына торған көсөргәнешле хистәренең "биктә" ҡалыуын репетицияларҙа ҡат-ҡат әйтеп-туҡып, әйләнгән һайын актерҙарҙың хәтеренә һалып торғандыр режиссер. Был талап ниндәйҙер кимәлдә артистарҙың уйынын артыҡ шаштырыуҙан һаҡлар, сентименталлектән, зауыҡһыҙ саманан ашыуҙан арындыра, һәм спектакль кешене уйландыра торған баҫҡысҡа күтәрелә.

Шәүрә Мортазина актер һәләтенең ысын тәбиғи асылын күрә һәм аса белә. 60-сы йылдарҙа уҙ сәхнәүи балҡышын тапҡан актерҙар быуынының профессиональ яҡтан нығыныуында ул айырым роль уйнай. Тап шул осорҙа, 1959 йылда, республикаға Мәскәүҙән ГИТИС-тағы башҡорт студияһының (Б.В.Бибикова менән О.И.Пыжова курсы) беренсе сығарылыш актерҙары ҡайта. Улар - Гөлли Мөбәрәкова, Илшат Йомағолов, Шамил Рәхмәтуллин, Муллаян Сөйәрғолов, Роза Кәримова, Хәмит Яруллин, Зинира Атнабаева, Әмир Абдразаҡов, Марат Солтанов, Физә Латипова, Фәрдүнә Ҡасимова, Гүзәл менән Хәкимйән Сәғитовтар һәм башҡалар була. Артабан уларҙың һәр ҡайһыһы башҡорт театры үҫешенә үҙенең тос ҡабатланмаҫ өлөшөн индерәсәк. Был көслө һәм теремек динамикалы быуын бер нисә тиҫтә йылдар буйы милли сәхнәнең йөҙөн билдәләйәсәк.

Рус психологик театрының традициялары буйынса белем алған гитиссылар милли театрға тормошто яныса аңлатыу һәм һынландырыу ысулдарын, сәхнәүи уйындың бай алымдарын өҫтәй. Уларҙың ҡайтыуы менән башҡорт театры репертуары нык төрләнә, йәш геройҙарҙы йәш актерҙар уйнай. Ошо йәш көстәргә таянып, Шәүрә Мортазина 1960 йылда А.Чеховтың "Аҡсарлағын" ҡуя, унда Нина ролен Роза Кәримова башҡара, ә Треплевты 60-сы йылдарҙағы тамашасының иң һөйкөмлө һәм танһыҡ актерҙарының береһе Илшат Йомағолов уйнай. Ул башҡорт драма театрында эшләй башлап, тәүге биш йыл эсендә утыҙҙан ашыу ролдә сәхнәгә сыға! Сағыу экспрессиялы актер, тәрән психологизм оҫтаһы булараҡ, ул бик күп төп ролдәрҙә башҡарыу бәхетен татый.

Мортазинаның йәнә бер тетрәткес тамашаларының береһе - Вольтерҙың "Мөхәммәте". Ул ябай ғына әҫәр түгел, һәм уның ҡаршылыҡлы, ҡатмарлы темалы бигерәк тә милли сәхнәлә уйнағанда бик иғтибарлы булыуҙы һәм һаҡ эш итеүҙе талап итә. Мәскәүҙә уйналған был спектаклгә лә театр белгестәре һәм тикшереүселәре ҙур ҡыҙыҡһыныу менән килә - Вольтерҙың тап ошо пьесаһы совет сәхнәһендә ҡуйылыу ваҡиғаһы үҙе генә лә ғәжәйеп ҡыҙыҡлы хәл була. Әммә ләкин, тыштан ҡарағанда, пьесаның яҙылышы дингә ҡаршы йүнәлтелгән булһа ла, башҡорт театрының спектакле кеше күңелендә урғыған ҡатмарлы эске көрәште сағылдыра. Трагедияның мәғәнәүи асылын һәм мәғәнәһен Мөхәммәт образы түгел, ә йәш кенә Сәйет менән Пальмира образдары аса. Мөхәммәт ролен гитиссы Марат Солтанов уйнай. Был актерҙың тәбиғәттән бирелгән һөйкөмлөлөгө һәммә кешене арбай, уны юҡҡа ғына "беҙҙең Жан Маре" тип йөрөтмәйҙәр, һәм ошо "затлы", ялҡынлы ҡиәфәте арҡаһында байтаҡ социаль һәм романтик геройҙарҙы һынландыра ул, ләкин, бәхетһеҙлеккә ҡаршы, был һоҡланғыс артистың ғүмере иртә өҙөлә, шулай ҙа ул башҡорт театры тарихында һиҙелерлек эҙ ҡалдыра.

Шәүрә Муса ҡыҙы башҡорт театры коллективына Бөтә Союз танылыуын "Мөхәммәт" спектакле менән генә килтермәй, шулай уҡ 1967 йылда М.Кәримдең "Ай тотолған төндә" трагедияһын сәхнәләштергәне өсөн ул РСФСР-ҙың К.С.Станиславский исемендәге Дәүләт премияһына лайыҡ була. Бөгөн дә был трагедия башҡорт драматургияһы классикаһы һанала, илле йылдан ашыу иң юғары талапҡа яуап бирерлек милли сәхнә әҫәре өлгөһө булып ҡала. Әммә ләкин ул заманда, 1964 йылда, Шәүрә Муса ҡыҙы был әҫәргә тәү башлап оло юл ярыусы була. Режиссер шуны асыҡ тойомлай: Мостай Кәримдең ғәжәп халыҡсан пьесаһында кешелектең трагик заңы бар.

Бөгөнгө режиссерҙар йыш ҡына тарихи пьесаларҙы ҡуйғанда шундай тоҙаҡҡа эләгә: тормош-көнкүреш ваҡ-төйәген төпсөрләп теҙергә тырыша, уйын гәмәлен һабантуй күренештәре, халыҡ ижады өлгөләре менән "байыта", шул арала характерҙарҙың психологик яҡтан асылыуы "онотола". Мәскәү тәнҡитсеһе О.Радищева Мортазина постановкаһынан һуң былай ти: "Ул боронғо үткән заманды Башҡортостанда халыҡ нисегерәк йәшәгәне хаҡында беҙ бер нәмә лә белмәнек тиерлек, әммә шул боронғо кешеләрҙең ни өсөн янып-көйөүҙәрен белдек, һәм ошо уларҙы беҙгә нык яҡынайтты".

"Мөхәммәт" менән "Ай тотолған төндә" әҫәрҙәренең яҡынса бер осорҙа сәхнәгә ҡуйылыуы һис тә осраҡлы түгел. "Мөхәммәт"тә дини фанатизмдың рухи һуҡырлыҡ булыуы бары тик һүҙ араһында ғына әйтелһә, икенсе трагедияла фанатизм - кешеләргә ҡара көстәрҙе бергә укмаштырған яуызлыҡ символы, тотош илде ааyһыҙлыҡҡа, ҡанһыҙлыҡҡа этәреүсе ҡурҡыныс көс. Ошо яҡлап ҡарағанда спектаклдең аҙаҡҡы сәхнәһе ғибрәтле. "...Шашынған кешеләр төркөмө үҙҙәрен баш бирмәҫ икәүҙән (азатлыҡты һайлаған Аҡъегет менән Зөбәржәттән. - **А.С.**) айырып торған тирмәнең диуарҙарына ике яҡлап сытырман йәбешеп, йән тәслимгә дер һелкетә. Торлаҡтың кәртә-ҡоршауҙары ян-яҡҡа сәсрәп ҡыйрап төшә. Тирмәнең ҡалдыҡ һайғауҙарын һаман ҡулдан ысҡындырмай, кешеләр улар менән ғашиҡтарҙың яҡлауһыҙ-ышыҡһыҙ кәүҙәләренә берсә һуғырға киҙәнә, берсә артҡа сигенә биреп, уларҙы тағы ла нығыраҡ ҡыҫымға алырға уҡталалар. Далала малды шулай ҡанығып ҡамайҙар. Ай тотолоу хаҡындағы хәбәр әҙәмдәрҙе оло ҡурҡыуға төшөрә, аҡылын юйып аҡырышҡан тауыштар күккә олғаша, тирә-яҡ ҡот осмалы ҡараңғылыҡҡа сума. Авансценаның тап уртаһында ҡарттар төркөмө. Улар илерешеп һауаға ҡарап ҡолдарса ялбара. Үҙҙәренең томана наҙанлығының тотҡондары, ҡурҡыу-ырымдарҙың ҡолдары булараҡ, улар был мәлдә фанатизм аяныслы батҡан ҡараңғы донъяның күҙгә бәрелеп торған ҡотһоҙ бер күренешен хасил итә".

"Ай тотолған төндә" лә, "Мөхәммәт"тә лә Шәүрә Муса ҡыҙының шәхси уйланыуҙары ҡуша туҡылған: хәҡиҡәт өсөн, ирек-азатлыҡ өсөн һәр ваҡыт иң йәш, иң гүзәл һәм иң талантлылар, иң мөһиме - бер ниндәй ғәйебе булмаған йәндәр һәләкәткә дусар ителә. Тап ошо ҡатмарлы һорауҙарға Шәүрә Муса ҡыҙы үҙенең күп постановкалары аша яуап эҙләй, уларҙа тап әлеге лә баяғы йәш кешеләр бөтә күңел сафлығы, шиғрәнә йәне, ныҡлы ихтыярлы холҡо, яҡты зиһенле аҡылы менән шул емергес өйөрмәне туҡтатырға тырыша, дауылға, ҡара көскә ҡаршы сыға, утҡа-һыуға ташлана... 1970 йылда уның бөтә дәүер-замандарҙың иң гүзәл пьесаһын - Шекспирҙың "Ромео менән Джульетта"һын сәхнәгә алыуы һис тә тиктәҫкә түгел. Спектаклдә С.Прокофьев музыкаһы яңғырай, пластик бейеүҙәр һалыусыһы башҡорт балетының маһир оҫтаһы һәм иң күренекле педагог-хореограф Тамара Шәһит ҡыҙы Хоҙайбирҙина була, фехтование сәхнәләрен Хәмит Яруллин ҡуя. Ромеоны күптән түгел генә Башҡорт театры труппаһына килеп ҡушылған йәш Фидан Ғафаров уйнай, ә Джульетта - Роза Кәримова.

Драматургияла Шәүрә Мортазина һәр ваҡыт чеховса интонацияларҙы эҙләй, ҡайғыларҙан талсыҡҡан күңелде, кәмһетелгән рухтың һыҙланыуын, ҡыйралған бәхет аяныстарын, кешенең уҙ-үҙе һәм башҡалар алдында бурыслы тойоуын күрергә теләй. Шәүрә Мортазинаның һуңғы эше, йәғни "Аҡҡош йыры", иң аҙаҡҡы ижади ҡомары "Ивановтың һәләкәте" (1978) спектакле була. Был үҙе уҡ символ, ишара. Мортазинаны үҙе "тыуҙырған" геройҙарының аҙмышы көтөп тора. Академия театрында сирек быуат фиҙакәр хеҙмәт итеп, ижади емешле осороноң иң юғары нөктәһенә еткән ваҡытта ул театрҙы ҡалдырырға мәжбүр була. Театрҙа сағыу, ярҙан ярға тулышып аҡҡан ташҡын кеүек ижади дәүер башлана, һәм был яңы дәүерҙең ҡояшын ҡалҡытыусы, яңы театрға нигеҙ һалыусы, актер театрынан режиссер театрына ныҡлы күпер ҡороусы шәхестең исеме һәр кемгә билдәле, ул - РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, РСФСР-ҙың К.С.Станиславский исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, бөйөк башҡорт ҡаһарманы Муса Лут улы Мортазиндың ғәзиз балаһы, башҡорт режиссеры Шәүрә Муса ҡыҙы Мортазина.

**Айһылыу СӘҒИТОВА.**

**(Руссанан Сәрүәр СУРИНА тәржемәһе, мәҡәлә ҡыҫҡартып бирелә).**

---

*УҢЫШ ҠАҘАН*



## ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

### 27-се идея
### Маҡтау магияһы

Тормош юлында ниндәй генә кешеләр осрамаҫ! Улар һинә бәхет өҫтәрлек бәхетле кешеләр булырмы, әллә тормошонда һоро төҫкә буярға тырышҡан йонсоған, төшөнкөлөккә бирелгән ваҡ кешеләрме? Һин тормошоңдо бәхетле яһаған, шатлыҡҡа сорнап алған кешеләр менән аралашырға теләр инеңме? Быға өлгәшеүҙең ябай бер ысулы бар. Ул - маҡтау һүҙе. Тик мин ялған түгел, ә тәрән, ихлас маҡтауҙы күҙ уңында тотам. Миңә Джонни Фигароның тарихы бик оҡшай. Был ун өс йәшлек итальян милләтле үҫмер Нью-Йоркта йәшәгән. Ул уҡытыусылар өсөн торғаны бер яза булған - һәр ваҡыт һуғышҡан, бәләкәстәрҙең уйындарына килеп ҡыҫылған. Уҡытыусылар менән тупаҫ һөйләшкән, ни тиклем ҡатыраҡ яза бирһәләр, тәртибе шул тиклем насарыраҡҡа әйләнгән.

Алтынсы класта уҡығанда мәктәпкә тыныс, тотанаҡлы уҡытыусы ҡыҙ килә. Шулай бер көн тәнәфес ваҡытында Джоннины класҡа инергә саҡыралар. Ул шаулап килеп инә лә, ултырғысына лап итеп барып ултыра. Йәш уҡытыусы уға ҡарай ҙа, йылы итеп, ихлас йылмайып: "Таҙа күлдәк тә кейеп алғас, һин бөгөн бик матурһың, Джонни", - ти. Ул боролоп, турайып ултыра.

Иртәгәһенә ул ғорурланып кейеп йөрөгән күлдәгенең яғаһы аҫтынан өлтөрәп бөткән ҡара галстук бәйләп килә. Уҡытыусы шунда уҡ уның галстугына ла иғтибар итеп, малайҙы маҡтай. Бер көндән һуң малайҙың ботинкаһының өҙөлөп бөткән шнурҙары яңыһына алыштырыла, ә ботинкалары ялтыратҡансы таҙартылған була.

Йәш уҡытыусы Джонниҙы элек тәрбиәләүселәргә: "Маҡтағыҙ һеҙ уны, һәм ул үҙгәрәсәк", - ти.

Джонни Фигаро үҫеп еткәс, уҡып сығып, Урта Көнбайышта дәүләт университеты ректоры булып китә. Фәҡирлектә, бысраҡ ярлы урамдарҙа йәшәргә дусар ителгән малай, ҡасандыр уҡытыусыһының маҡтауы арҡаһында, танылған академик булыуға өлгәшә.

Маҡтау нурҙарында бөтә нәмәнең таждары асылып, сәскәгә төрөнә. Маҡтау - йән өргөс дым. Яҡшы ҡылыҡтарҙы хуплап, һин был донъяла изгелек ҡоралына әйләнәһең. Үҙең осрашҡан бөтә кешеләргә лә күҙ һал, уларҙың өҫтөнлөктәрен күреп, баһала. Ысын күңелдән маҡтап әйткән ябай ғына бер һүҙ ҙә тормошоңда осраған кешенең шәхесен ҡырҡа үҙгәртеүе мөмкин.

Маҡта, сөнки маҡтағанда һин илаһи донъябыҙҙағы Мөхәббәт Рухы кеүек эш итәһең.

Дуҫтарым, беҙ был донъяға Хоҙай мөхәббәте ҡоралы менән хеҙмәт итергә килгәнбеҙ. Һәр ваҡыт изгелек эҙләп, уға маҡтау йырлаһаң, был тәғәйенләнешеңдә утәү күпкә еңелерәк буласаҡ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 29 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.10 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Знахарь". [16+]
22.25 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Познер. [16+]
3.30 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-10". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Берёзка". [12+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 Ради добра. [12+]**
**17.30 "Пофутболим?" [12+]**
**18.00, 5.00 "Бай бакса". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Д/ф "Эвакогоспиталь". [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.30 Спектакль "Отчаянная". [12+]**
**2.30 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 30 ИЮНЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 1.00 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.45 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Знахарь". [16+]
22.25 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Право на справедливость. [16+]
3.15 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-10". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Берёзка". [12+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15, 5.00 Автограф. [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 Детей много не бывает. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Заблудшая". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 1 ИЮЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 9.00, 12.00 Новости.
6.10, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
10.20 Д/ф Премьера. "Байкал. Новый ковчег". [12+]
11.20, 12.10 Видели видео? [6+]
14.15 Х/ф "Весна на Заречной улице". Кино в цвете. [12+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 Х/ф "Весна на Заречной улице". [12+]
16.25, 18.20 Творческий вечер Александры Пахмутовой. [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Х/ф "Бриллиантовая рука". [0+]
21.00 Время.
21.45 Т/с "Знахарь". [16+]
22.40 Х/ф "Белые ночи почтальона Алексея Тряпицына". [16+]
0.20 Д/с "Россия от края до края". [6+]
1.55 Наедине со всеми. [16+]
3.25 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.15, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 13.00, 14.00, 16.00, 17.00, 18.00, 20.00 Вести.
11.30, 13.10, 14.30, 16.10, 17.15, 18.10 Т/с "Дневник свекрови". [12+]
21.20 Т/с "Берёзка". [12+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "София". [16+]
4.00 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00, 7.45 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 8.30, 12.30, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.45, 10.45, 12.45, 15.45 Интервью. [12+]**
**9.00 "Сәләм, Республика!" [12+]**
**9.45 Х/ф "Колонкай". [0+]**
**10.30, 15.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.30, 15.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**11.45 "Гора новостей". [6+]**
**12.00 Это Родина моя! Концерт. [0+]**
**13.00 Спектакль "Необычная история в обычной деревне". [12+]**
**16.00 Х/ф "Чак-чак". [12+]**
**17.15 Посмотрим... [6+]**
**18.00 Үткән гүмер. [12+]**
**19.00, 20.00 Концерт НСО РБ. [12+]**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**21.00 Дела и люди. [12+]**
**22.00, 5.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Спектакль "Тамарис". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Песнь во сне". [12+]**
**4.30 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 2 ИЮЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 0.50, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.15 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Знахарь". [16+]
22.25 Премьера. "Док-ток" [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Премьера. "Гол на миллион". [18+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-10". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Берёзка". [12+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай бакса". [12+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 Памяти народного поэта РБ Абдулхака Игебаева... Концерт. [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Спектакль "Нэркэс". [12+]**
**3.00 Спектакль "Близнецы". [12+]**
**5.00 Үткән гүмер. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 3 ИЮЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50, 2.40 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.25 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.05 Мужское/Женское.[16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Фабрика звезд". Лучшее. [12+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "История The Cavern Club". [16+]
1.10 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.50, 3.10 Т/с "Тайны следствия-10". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
23.45 Х/ф "Обучаю игре на гитаре". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 5.00 Башкорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 4.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 "Башкорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башкорттар. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Спектакль "Вишневая гора". [12+]**
**1.30 Уфа. Живое. [12+]**
**2.45 Спектакль "Молодые сердца". [12+]**
**5.30 "Наука 102". [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

## 4 ИЮЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.05 Д/ф "Фрунзик Мкртчян. Человек с гордым профилем". [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.50 Премьера. "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
15.00 Х/ф "Суета сует". [6+]
16.35 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.50, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.00 Большая игра. [16+]
0.10 Х/ф "Большие надежды". [16+]
2.00 Наедине со всеми. [16+]
3.25 Модный приговор. [6+]
4.10 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 "Сто к одному".
11.00 Вести.
11.30 "100ЯНОВ". [12+]
12.30 "Доктор Мясников". [12+]
13.35 Х/ф "Подмена в один миг". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Несколько шагов до любви". [12+]
1.10 Х/ф "Слепое счастье". [12+]
4.16 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "Сыйырсык". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**13.15, 20.15 Земляки. [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт Бибисары Азаматовой. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.00 Ради добра. [6+]**
**20.30 "Байык-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15, 4.45 "Башкорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Спектакль "Операция". [12+]**
**2.00 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.45 Спектакль "Любви все возрасты покорны". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 5 ИЮЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.35, 6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.20 Х/ф "Цирк". [0+]
7.50 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.50 Премьера. "На дачу!" с Ларисой Гузеевой. [16+]
15.00 Премьера. "Моя мама готовит лучше!" [0+]
16.00 Большие гонки. [12+]
17.25 Русский ниндзя. [12+]
19.20 Три аккорда. [16+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Dance Революция". [12+]
0.00 Х/ф "Планета обезьян: Война". [16+]
2.20 Наедине со всеми. [16+]
3.45 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.20, 1.30 Х/ф "Ясновидящая". [12+]
6.00, 3.20 Х/ф "Вальс-Бостон". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Устами младенца".
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 "Сто к одному".
11.00 Вести.
11.30 Х/ф "Любовь без лишних слов". [12+]
15.45 Х/ф "Противостояние". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Моя вершина. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТеко!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 Башкорттар. [6+]**
**15.30 Д/ф "Мы - одна семья". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00, 2.30 "Онота алмайым". Юбилейный вечер народной артистки РБ Розы Аккучуковой. [12+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "Байык-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.45 Спектакль "Скупой". [12+]**
**4.30 "Млечный путь". [12+]**

✓ *Үҙебеҙ ниндәйҙер йомош ҡушҡан кешене ҡат-ҡат тикшереү - ул, үҫәмеюҡмы, тип тикшереү өсөн генә үсентене ерҙән һурып сығарыуға тиң.*
*(Ҡытай аҡылы).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ТУҒАН ТЕЛЕН ҠӘҘЕРЛӘГӘН ХАЛЫҠ ҠӘҘЕРЛЕ БУЛЫР




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**25-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Әкиәт. Биишева. Әйбер. Гиена. Туҡай. Ҡарсыға. Рампа. Шәкүр. Обойма. Арзан. Мао. Телсе. Йоҡо. Арал. Роман. Ватан. Олон. Ташбаҡа. Алтай. Мәжнүн. Нейтрон.

**Вертикаль буйынса:** Рыбаков. Гимназист. Аран. Ант. Баян. Атаман. Аҡҡош. Әсирә. Мал. Аманат. Бесәйҡойроҡ. Латин. Театр. Он. Таш. Торна. Әҫпе. Үтес. Йәр. Еҙнәй.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Июнь - Июль (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 29 (8) дүшәмбе | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 30 (9) шишәмбе | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 1 (10) шаршамбы | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 2 (11) кесе йома | 3:17 | 4:47 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 3 (12) йома | 3:18 | 4:48 | 13:30 | 20:22 | 21:52 | 23:22 |
| 4 (13) шәмбе | 3:18 | 4:48 | 13:30 | 20:22 | 21:52 | 23:22 |
| 5 (14) йәкшәмбе | 3:19 | 4:49 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ҠЫРАУҘАР БУЛМАЙ



**Алдағы ике-өс көндә Башҡортостанда төндә ҡырау төшөүе туктай һәм июлдә бындай һауа шарттары ҡабатланмай.**

Рәсәй Гидрометүҙәгенең фәнни етәксеһе Роман Вильфандтың теорияһы шуны раҫлай. "Теоретик яҡтан хәҙер ҡырау булмай. Сөнки ҡырау төшһөн өсөн һауаға тупраҡты ла һыуытырға тура килә, ысынында иһә был мөмкин түгел", - тине "РИА Новости" агентлығы әңгәмәсеһе. Рәсәй Гидрометүҙәгенең лабораторияһы мөдире Людмила Паршина һүҙҙәренсә, июлдә Башҡортостанда һауа температураһы, Урал буйындағы кеүек үк, норманан бер градусҡа юғарыраҡ була.

*СӘНҒӘТ. МӘҘӘНИӘТ. ӘҘӘБИӘТ.*

# ИШЕКТӘР АСЫЛА...

**Республика Башлығы Башҡортостан хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә мәҙәниәт учреждениеларын асыуҙы һәм күмәк халыҡ ҡатнашлығындағы саралар үткәреүҙе яҡшылап уйларға ҡушты.**

Радий Хәбиров мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡоваға ошо темаға тәҡдимдәр әҙерләү бурысын йөкмәтте. "Әйҙәгеҙ, мәҙәниәт учреждениеларын асыу йәһәтенән бергәләп уйлашайыҡ. Роспотребнадзор менән һөйләшеү һәм килешеү уҙғарып өлгөрһөндәр өсөн ҡасан әҙер булыуығыҙҙы әйтегеҙ һәм яйлап аса башлағыҙ", - тине Радий Хәбиров. 30 июндә Халыҡ-ара форум уҙғарыла, унда 50-нән ашыу кеше ҡатнаша, тип билдәләне республика Башлығы. Шулай уҡ ул Башҡортостанда ғибәҙәт йорттары асыласағы тураһында ла хәбәр итте. "29 июндән халыҡ мәсеттәргә, православие ҡорамдарына килә алһын өсөн был ҡарарҙы рәсмиләштерергә кәрәк, улар асылһын, эшләһен", - тип белдерҙе республика Башлығы.

# ТЕЛДЕ ӨЙРӘН...

**"Торатау" конгресс-холында "Башҡорт теле: яңы ҡараш" тип аталған сара уҙҙы. Унда башҡорт телен популярлаштырыу проекттары менән таныштырҙылар.**

Сара барышында ҡатнашыусыларға башҡорт телен өйрәнеү өсөн видео-дәрестәр һәм мобиль ҡушымталар, Бәйләнештә һәм iTunesta башҡорт телендә беренсе подкастар, "Аҫылташ" йөштәр брендьы тураһында һөйләнеләр. Мультиинструменталист Заһир Зәйнетдин башҡорт телен өйрәнеү буйынса BashWord мобиль ҡушымтаһы менән таныштырҙы. "Хәҙер башҡорт телен өйрәнергә теләгән һәр кем телефонына беҙҙең ҡушымтаны күсерә һәм уға көнөнә 10 минут ваҡытын бүлә ала. Ҡушымта 117 дәрестән, 39 бүлектән һәм 1,5 мең һүҙҙән тора. Был һүҙҙәр минең тауышым менән яҙҙырылған", - тине Заһир Зәйнетдин. Артист һүҙҙәренсә, көн һайын башҡорт теленең ябай һүҙҙәре менән таныушу өйрәнеүҙе еңеләйтә. Тест системаһы белемдәге етешһеҙлектәрҙе асыҡларға ярҙам итә.

# БАБИЧ КИТАБЫ

**Өфөлә Шәйехзада Бабичтың 125 йыллығы билдәләнгән йылда уның "Ал да сәс нур халҡыңа" шиғырҙар китабы баҫылып сыҡты. Башҡорт телендәге йыйынтыҡ Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә донъя күрҙе.**

Китапта ни бары 24 йыл ғына йәшәгән (1895-1919) күренекле башҡорт шағирының 90-ға яҡын әҫәре баҫылған. Йыйынтыҡҡа "Башҡортостан", "Ҡурайҡайға", "Мандолина" кеүек билдәле шиғырҙары, "Ғазазил" поэмаһы, "Ҡандала" балладаһы һәм башҡа әҫәрҙәре ингән. Китап Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбайҙың "Быуындарға рухы аманат" баш һүҙе менән асыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2020 йылда шағир Шәйехзада Мөхәмәтзакир улы Бабичтың тыуыуына 125 йыл тулыуҙы билдәләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы.

# "ҠОШ ЮЛЫ"

**"Ҡош юлы" башҡорт бард йыры республика фестивале 31 июлдән 2 авгусҡа тиклем Ҡыйғы районында уҙғарыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, фестиваль башҡорт шағиры һәм драматургы Рафаэль Сафиндың ижадына арнала.**

Фестивалде ойоштороусылар Тимур Йосопов, Айгөл Ғәбитова һәм Рөстәм Миһранов Ҡыйғы районына "разведкаға" барып ҡайтты. Улар район хакимиәте башлығы Зөһрә Гордиенко менән осрашты һәм ойоштороу мәсьәләләрен тикшерҙе. Әй йылғаһы буйындағы аҡланды ҡараны, Йыланды ауылына шағирҙың музейына барҙы. Ҡатнашырға теләгәндәр июнь аҙағына хәтлем гитарала йыр башҡарып төшкән видеояҙманы йәки 8-10 шиғырҙан торған ижади шәлкемде фестивалдең рәсми төркөмөнә ебәрергә тейеш. 17 йәше тулғандар һәм унан өлкәнерәктәр ҡатнашырға мөмкин.

✓ *Башҡорт планшеттары һәм смартфондар әлегә исемлек буйынса республикабыҙҙың балалар баҡсаларына бушлай таратыла башланы. Киләһе партияны сауҙа селтәрҙәренә сығарырбыҙ тип уйлайбыҙ.*



АФАРИН!

# ПЛАНШЕТТАР...

## башҡортса һөйләшә

**Һуңғы йылдарҙа башҡортса ҡурсаҡтар күреп аптырау ҡатыш һоҡланыуыбыҙҙы тыя алмағайныҡ, сөнки быға тиклем ҡурсаҡтар тик русса ғына һөйләшә торғайны һәм уларҙың үҙ телебеҙҙә әңгәмә ҡороуы аяҙ көндә күк күкрәгәндәй булды. Ҡасандыр республикала бала сағынан уҡ шиғырҙар яҙыуы, төрлө мәҙәни саралар уртаһында булыуы менән билдәле Фәнзил Әҙелбаев һәм шулай уҡ сәхнә, телевидение йондоҙо булған Лилиә Дауытова ғаилә ҡороп, ижади тандем нигеҙендә тыуған идея һөҙөмтәһе булды ул. Бөгөн Сибай телевиденияһы директоры булып эшләгән Фәнзил, Сибай ҡалаһының халыҡ мәҙәниәте һәм ял үҙәге режиссеры Лилиә ошо көндәрҙә тағы ла шәп яңылыҡ менән ҡыуандырҙы. Әйҙәгеҙ, шул турала һөйләшеп алайыҡ.**







**➔ Әле яңы ғына һеҙ тормошобоҙға башҡортса һөйләшкән ҡурсаҡтарҙы индергәйнегеҙ, бөгөн балалар өсөн яңы уйынсыҡ - башҡортса, татарса һөйләшкән планшеттар эшләүҙе юлға һалғанһығыҙ. Был ихтыяж ҡасан һәм нисек тыуҙы, был хаҡта уй электән йәшәй инеме, әллә үҙегеҙ атай-әсәй булғас ҡына уйлана башланығыҙмы?**

- Башҡорт телендә ҡурсаҡтар, шулай уҡ планшет, смартфондар хаҡында беҙ үҙебеҙ атай-әсәй булғас ҡына уйлана башланыҡ, сөнки сауҙала балаға алып бирерлек, уны бәләкәйҙән туған телгә ылыҡтырырлыҡ, әсә теленә һөйөү уятырлыҡ уйынсыҡтар юҡ ине. 2018 йылда башҡортса һөйләшкән ҡурсаҡтар менән бер рәттән, шунда уҡ ошо планшет һәм смартфондарҙы ла сығарырға хыялландыҡ, әммә ул йылда беҙ үҙебеҙҙең теләккә өлгәшә алманыҡ. Республика етәкселеге алмашынып, Радий Фәрит улы Хәбировтың командаһы килеү менән власть тарафынан маҡсатыбыҙға хуплау алдыҡ һәм уйыбыҙҙы тормошҡа ашырҙыҡ. Был, әлбиттә, беҙҙең ғаиләнең генә түгел, тотош команданың ҙур хеҙмәте һөҙөмтәһе. Шиғырҙарҙы яҙыуҙа шағирә Гөлнара Хәлфетдинова ҡатнашты, көйҙәрҙе БР Милли халыҡ инструменттары оркестры артисы Раян Хөснуллин яҙҙы, уларҙы башҡорт эстрадаһы йырсыһы Ләйсән Ғәлимова, Милли йәштәр театр артисы Нәғим Нурғәлин, Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы йырсыһы Заһир Иҫәнсурин башҡарҙы. Был проектты "Маҡсат" РОМОһы менән бергәләп Башҡортостан Республикаһы Грантына тәҡдим итеп, еңеп сыҡыуыбыҙ һөҙөмтәһендә тормошҡа ашыра алдыҡ.

**➔ Башҡортса планшеттар тураһындағы хәбәр социаль селтәрҙәрҙә йәшен тиҙлегендә таралды һәм шунда уҡ "бөткән, яңы партия килгәнен көтөгөҙ", тип яҙалар. Тәүге партия шулай тиҙ таралдымы, уны кемдәр алды, моғайын да, әлегә сауҙа селтәрҙәренә сығарылмағандыр?**

- Башҡорт планшеттары һәм смартфондар әлегә исемлек буйынса республикабыҙҙың балалар баҡсаларына бушлай таратыла башланы. Киләһе партияны сауҙа селтәрҙәренә сығарырбыҙ тип уйлайбыҙ.

**➔ Планшет тураһында ҡыҫҡаса аңлатып та китегеҙ әле: ул нисек эшләй, унда ҡыҙыҡлы ниҙәр бар?**

- Уның режимдары күп. Эсендә алфавит, һандар, төҫтәр, ноталар, шиғырҙар, йырҙар, еңелсә иҫәпләү (алыу, ҡушыу), хайуандар атамалары, уйындар тупланған. Төймәләргә баҫып, бала уны рәхәтләнеп ҡуллана ала. Уның нисек эшләүе тураһындағы инструкция бик ябай, ололар тиҙ генә төшөнөп, балаларға аңлата ала. Шулай уҡ нимәнән башларға белмәһәгеҙ, минең йәки "БашТой"ҙың "Бәйләнештә" селтәрендәге сәхифәләге видеоны ҡарарға мөмкин.

**➔ Хәҙер балалар күберәген гаджеттар ҡуллана, хатта йәнһүрәттәрҙе лә гаждет аша ғына ҡарай. Башҡортса йәнһүрәттәр, әкиәттәр тупланған гаджет эшләүҙе күҙалламайһығыҙмы?**

- Башҡорт телен үҫтереү менән бәйле беҙҙең пландарыбыҙ бихисап, әлбиттә. Әммә уларҙың ҡасан тормошҡа ашырылыуы ғына билдәһеҙ. Нисек кенә булмаһын, төп маҡсатыбыҙ - һәр баланың үҙ телен белеп, һөйөп үҫеүе өсөн заманса мөмкинлектәр булдырыу.

**➔ "БашТой" - ул нимәне аңлата һәм ни өсөн тап шундай исем һайланығыҙ? Бөгөн һеҙ халыҡ-ара кимәлдә билдәле компания менән хеҙмәттәшлек итәһегеҙ. Был кимәлгә нисек сыҡтығыҙ, әллә ятып ҡалғансы - атып ҡал, тип, бәхетегеҙҙе һынап ҡарарға булдығыҙмы?**

- "БашТой" - ул башҡорт уйынсыҡтары тигәнде аңлата ("toy" - инглиз теленән тәржемәһе - уйынсыҡ). Ҡурсаҡтарҙы сығарыр алдынан исем хаҡында оҙаҡ баш ваттыҡ. Сөнки компания исеме эшебеҙҙең йүнәлеше хаҡында әйтеп торорға, интернациональ булырға тейеш тип иҫәпләнек. "БашТой" беҙҙең бар талаптарға яуап бирҙе. Ысынлап та, әлеге мәлдә халыҡ-ара кимәлдә билдәле компания менән хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Рәсәй Федерацияһында күптәргә билдәле "Азбукварик" компанияһы уйынсыҡтары ла шунда эшләнә. Башҡорт планшенттарын, смартфондарын билдәле булмаған Ҡытай заводтарында күпкә осһоҙораҡ хаҡҡа ла эшләтеп булыр ине, әммә беҙ тәү сиратта уйынсыҡтарҙың сифатына, эшләнгән материалына иғтибар бүләбеҙ, сөнки балалар һаулығы - ҡиммәтрәк.

**➔ Һеҙҙең балаларығыҙ ҙа бәләкәй генә ваҡыттарынан уҡ социаль селтәрҙәр геройына әйләнгәйне. Моғайын, ҡурсаҡ-планшет кеүек уйынсыҡтарығыҙҙың тәүге баһалаусылары ла уларҙыр. Улар был уйынсыҡтарҙы нисек ҡабул итте? "Баһалама ағзалары" бик талапсан, ҡәтғи булмағандыр, моғайын?**

- Әлбиттә, тәүге ҡулланыусылар - беҙҙең балалар. Башҡорт ҡурсағын Айзель ҡыҙыбыҙҙа һынаһаҡ, планшет, смартфондар малайҙарға бирелде. Шиғырҙарын тиҙ генә ота һалып һөйләгәндәрҙе ҡыуандыра. Үҙ-ара шиғырҙарҙы бутап, көлөшөп ултырғандары шатландырҙы. Тимәк, балаларға ҡыҙыҡ - был иң мөһиме.

**➔ Башҡорт телен артабан да үҫтереү, уның ҡулланылышын киңәйтеү, балаларҙа бәләкәйҙән уҡ әсә теленә һөйөү тәрбиәләү өсөн тағы ла нимәләр эшләргә була һәм кәрәк?**

- Туған телде атай- әсәй яратһа, бала ла ситтә ҡалмай. Кистән балаға әкиәттәр уҡыу, тыңлатыу ҙа мөһим роль уйнай. Әлбиттә, үҙ-ара башҡорт телендә аралашыу - иң мөһиме.

Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА
әңгәмәләште.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# "ЯРАР" ТИГӘН ЭШ...

## ярты булыусан

Кеше аҡылы менән бай булғанса, үҙ аҡылың менән ярлы бул.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙебеҙ нимдәйҙер йомош ҡушҡан кешене ҡат-ҡат тикшереү - ул, үҫәмә-юҡмы, тип тикшереү өсөн генә үсентене ерҙән һурып сығарыуға тиң.

**(Ҡытай аҡылы).**

Һәр юғалтыу - ул табыш. Һәр табыш - ул юғалтыу.

**(Джалелитдин Руми).**

Үҙ-үҙе менән идара итә алмағандар башҡалар менән дә идара итә алмай.

**(Инглиз мәҡәле).**

Белмәйем, ҡайһыһы яҡшы: файҙа килтергән яуыҙлыҡмы, әллә зыян килтергән изгелекме?

**(Микеланджело).**

Енеү - ул ахмаҡлыҡ. Енергә түгел, ә ышандырырға кәрәк - бына ошо данға бәрәбәр.

**(Виктор Гюго).**

Яҡшыраҡ һикереү өсөн артҡа китеү кәрәк.

**(Француз мәҡәле).**

Аҡыллы булғың килһә, аҡыллы һорау бирергә, иғтибар менән тыңларға, тыныс ҡына яуап бирергә һәм әйтер һүҙең булмаһа, һөйләүҙән туҡтарға өйрән.

**(И. Лафатер).**

Әгәр эшлеклелек сифаттары буйынса үҙеңдән дә түбәнерәк хеҙмәткәрҙе эшкә алаһың икән, тимәк, һинең кимәлен уныҡынан да түбәнерәк икәнде иҫбат итәһең.

**(Р. Грант).**

Насар уныштан һуң да сәсергә кәрәк.

**(Сенека).**

Дошманыңды еңә алмаһаң, уның менән берләш.

**(Теодор Рузвельт).**

Дошманыңды еңер өсөн унан көслө булырға ынтылма, ә уны үҙеңдән көсһөҙ ит.

**(Боронғо ҡытай мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: " Дошмандарыңдан ҡурҡма - иң насар осраҡта улар һине үлтерергә мөмкин. Дуҫтарыңдан да ҡурҡма - иң насар осраҡта улар һиңә хыянат итергә мөмкин. Битарафтарҙан ҡурҡ - улар үлтермәй ҙә, хыянат та итмәй, әммә донъялағы бар хыянаттар һәм үлтерештәр уларҙың өнһөҙ ризалығы менән ҡылына".**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99, 246-03-24** |
| **Матбуғат таратыу** | **246-03-23** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
25 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3600
Заказ - 504/06